Мәләүез үҙәкләштерелгән китапхана системаһы
М.Буранғолов исемендәге 1- се һанлы ҡала китапханаһы



Мөхәмәтша Буранғолов (1888 -1966)

# Халыҡ хәтерендәге сәсән

Дайджест

Мәләүез 2013

Халыҡ хәтерендәге сәсән: дайджест [Текст] / Төҙөүсеһе Н.Исхаҡова. –
Мәләүез, **2013. - 103** б.

# Уҡыусыға

Мөхәмәтша Буранғол XX быуат башҡорт рухи доньяһында иң күренекле, үҙәк урында торған шәхестәрҙең береһе. Фәндә һәм әҙәбиәттә ул арҙаҡлы фольклорсы, драматург һәм сәсән-шағир булараҡ киң танылыу таба.

Арҙаҡлы һүҙ оҫталары - сәсәндәр менән осрашып, уларҙың тормошо һәм ижады хаҡында киммәтле мәғлүмәттәрҙе теркәп ҡуя. Уҙған быуаттарҙағы башҡорт сәсәндәренең ижадына һәм биографияһына ҡараған бик күп материалдар фәҡәт уның хәстәрлеге арҡаһында һаҡланып ҡалған.

Был йәһәттән М. Буранғолдоң ҡульяҙма мираҫындағы «Башҡорт халыҡ поэзияһы», «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәттәре, халыҡ йырҙары йыйынтыҡтары ҙур әһәмиәт ҡаҙана.

Ә инде уның донья халыҡтары фольклорында һәм мифологияһында ҡабатланмаҫ урында торған «Урал батыр» эпик ҡобайырын яҙып алыуы ысын мәғәнәһендә ижади ҡаһарманлыҡҡа тиң һәм ижади уңыштары, халыҡ алдындағы фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн уға 1944 йылда Халыҡ сәсәне тигән маҡтаулы исем бирелеү ҙә сәсәнгә оло бер баһа.

Халыҡҡа хеҙмәт итеү өлгөһө булып йәшәгән сәсән Мөхәммәтша Буранғоловтың тормошо һәм ижады һәр яҡлап өйрәнеүгә лайыҡлы.

Ошо йәһәттән мәшһүр сәсәнебеҙҙең тыуыуына 125 йыл тулыу айҡанлы беҙҙең 1-се һанлы Мөхәмәтша Буранғолов исемен йөрөткән китапханабыҙ киң ҡатламлы китап уҡыусылар: шәхестең бай ҡомартҡыһын өйрәнеүселәр, уҡытыусылар, музей хеҙмәткәрҙәре, театр коллективтары һәм фольклор төркөмдәре өсөн «Халыҡ хәтерендәге сәсән» исемле библиографик дайджест әҙерләне.

Дайджест өс бүлектән төҙөлгән:

1 - се бүлек «Оло яҙмыш» тип атала. Был бүлек сәсән яҙмышын һәм бай ижадын асып бирә.

2 - се «Сәсән булған ерҙә һүҙ ҡала» бүлегендә шәхестең замандаштарының, уның ижадын өйрәнеүселәренең һәм яҡындарының хәтер сәхифәләре тупланған. Был бүлектә сәсән эшмәкәрлегенә, ижадына анализ өлгөләре лә табырға мөмкин.

3. - сө бүлек «Сәсәндең бай мираҫы». Был бүлектә китапханала булған сәсәндең әҫәрҙәре тупланған.

Һәр бер мәғлүмәт дайджесты өйрәнеүсегә тулыландырып бирелә. Айырыуса күренекле шәхестәребеҙ Р. Байымов, Р. Шәкүр, И. Бүләков һәм З. Шәриповаларҙың ғилми эштәре ихтибарға һәм ихтирамға лайыҡ.

Дайджесты, шулай уҡ уҡыусыларға һәм студенттарға ла тәҡдим итәбеҙ.

Мәғлүмәт хронологик һәм алфавит тәртибендә урынлаштырылған.



*1 – се бүлек*

Оло яҙмыш

# Оло яҙмыш

Иҫкә алды мине ил,
Исем бирҙе миңә ил.
Халыҡ сәсәне, тине ил.
Хөрмәткә ҡарап рәхмәтте
Кемгә төбәп әйтәйем?...

М.Буранғолов. «Рәхмәт һүҙе»
ҡобайырынан

**1. Баймов, Б. Фиҙаҡәрлек [Текст] / Б. Байымов, фәндәр академияһы Урал булегенең Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре**
**// Башҡортостан ҡыҙы. - 1988. - №12. - Б. 28 - 29.**

Мөхәммәтша Ғабдрахман улы Буранғолов 1888 йылдың 15 декабрендә элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосына ҡараған Үрге Ильяс ауылында (хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Красногвардейский районы) урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Туғыҙ йәшкә еткәндә атаһыҙ ҡала, ун икегә ингәндә әсәһе менән бәхилләшә. Үкһез етем ҡалған үҫмер тамаҡ хаҡына байҙарға яллана, төрле ҡара эштәр башҡара.

Атаһының теләге менән рус башланғыс мәктәбендә уҡый башлаған Мөхәммәтшаны ағалары көсләп Ҡарғалылағы дини мәҙрәсәгә күсерәләр. Бында ул инде үҙ йүнен үҙе күрергә тейеш була. Уҡыуҙан бушаған арала хәлфәгә хеҙмәтселек итә, йәй көндәрендә Ырымбурҙа бер байҙың сәйханаһында официант булып эшләй. Һуңыраҡ ул Аҡтүбә ҡалаһында тирмәнсе була, ә 1906 йылда ҡаҙаҡтар араһында балалар укыта.

1907 - 1908 йылдарҙа Башҡортостанда халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы уткәрелә. Был эштә тәржемәсе сифатында М. Буранғолов та тҡатнаша. Тап ошо 1907 йылда уның артабанғы тормошона тәрән йоғонто яһаған иҫтәлекле ваҡиға була: ул Этҡол волосы Иҙрис ауылында (хәҙерге Баймаҡ районы) йәшәүсе атаҡлы Ғәбит сәсән менән таныша. Ғәбит сәсәндең шул ҡәҙәр оҫта ҡурайҙа уйнауы, меңәр юллыҡ - ҡобайырҙарҙы яттан белеүе, артислыҡ таланты уны таң ҡалдыра, халыҡ ижадын йыйыуға һәм өйрәнеүгә рухландыра.

Ошо осрашыуҙан һуң уға фольклор «ене» ҡағыла ла. Ҡайҙа ғына бармаһын, халыҡ ижады өлгөләрен яҙыл алыуҙы ул үҙенең беренсе эше тип ҡарай башлай. Ғәбит сәсән менән ул 1922 йылға тиклем (сәсән үлгәнсе) бәйләнешен өҙмәй. Ошо дуҫлыҡ, теләктәшлек һөҙөмтәһендә халҡыбыҙҙың классик мираҫын тәшкил иткән «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Иҙел менән Яйыҡ», «Һары мулла» һәм башҡа мәшһүр эпостар, күп һанлы легендалар, йырҙар ҡағыҙға төшөрөлә.

Быларҙан башҡа М. Буранғолов төрлө ерҙә төрлө кешеләрҙән «Маян менән Мәргән», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Күсәк бей», «Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола», «Заятүләк», «'Караһаҡал», «Батырша», «Юлай менэн Салауат» кеүек поэтик хазиналарҙы яҙып ала һәм уларҙы халыҡҡа еткереү өсөн күп көс һала.

Халыҡ ижадына йәне-тәне менән бирелеү, һәр әҫәрҙе зиһене һәм йөрәге аша үткәреү уны илһамландыра һәм яңы ижадҡа әйҙәй. Ҡобайырҙарға эйәреп. М. Буранғолов үҙе лә шиғри әҫәрҙәр ижад итергә тотона. Әммә уның иң тәүге уңышы драматургия өлкәһендә була. 1917 йылда ул «Ашҡаҙар» исемле драма яҙа. Әҫәр шул уҡ йылда Ырымбур һәм Өфө ҡалаларында сәхнәгә ҡуйыла. Был пьеса Башҡорт драма театры сәхнәләштергән иң тәүге әҫәрҙәрҙең береһе була һәм ул 30-сы йылдарға тиклем коллективтың төп репертуарынан төшмәй.

Халыҡ араһында йөрөп, ауыҙ-тел әҫәрҙәрен йыйыу, уларҙы пропагандалауҙан, художестволы ижад менән шөғөлләнеүҙән тыш М. Буранғолов үҙ халҡы өсөн тағы бер фиҙаҡәр эш башҡара. 1911 йылда «Хөсәиниә» мәҙрәсәһен тамамлағандан алып 1938 йылға тиклем ул уҡытыусылыҡ эшенә бирелә, башҡорт-татар ауылдарында мәғариф эшен юлға һалыу буйынса байтаҡ көс түгә. 1916 йылдарҙа М. Буранғолов Быҙаулыҡ ҡалаһында мәғариф бүлеге инспекторы булып эшләй. 1919 йылда Туҡ-Соран кантонында ойошторолған крәҫтиән һәм һалдат депутаттарының беренсе съезында уны кантон башҡарма комитеты председателенең урынбаҫары итеп һайлайҙар һәм мәғариф бүлеге мөдире вазифаһын йөкмәтәләр. Ошо съезда ҡатнашыу һәм яуаплы вазифа алыу ул мәлдә М. Буранғолов өсөн, бәлки, һөйөнөс тә булғандыр, әммә һуңыраҡ был ваҡиға уның тормошон ҡаҡшатҡан һәм ҡатмарландырған оло көйөнөскә әүерелә. Кемдеңдер ялған ялаһы менән был факт ҡабартыла, йәнәһе, М. Буранғолов Зәки Вәлидов хөкүмәтенә хеҙмәт иткән. Бына шулай М. Буранғоловҡа «буржуаз милләтсе» тигән ҡара мөһөр тағыла ла. Нисек сәйер яңғырамаһын, әммә факт: «милләтсе» тип ғәйепләүҙәргә уның халыҡ ижадына таянып яҙҙған пьесалары ла «ярҙам» итә. Уның фольклор-

этнографик драмаларын иҫке тормошто идеаллаштырыусы, хандар дәүерен данлаусы зарарлы әҫәрҙәр тип баһалап, уларға кәртә ҡуялар. Шул сәбәптән ул яҙған утыҙҙан ашыу пьесанан тик өсөһө генә донья күрә. М. Буранғолов яҙмышын бигерәк тә «Иҙеүкәй менән Мораҙым» пьесаһы ҡатмарлаштырып ебәрә. Халыҡ ҡобайырына нигеҙләнеп яҙылған был әҫәр, ентекле тикшерелмәй тороп, халыҡтар дуҫлығына зарарлы әҫәр тип табыла. (Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был ғәйеп КПСС Үҙәк Комитетының билдәле ҡарарында ла сағыла). М. Буранғоловтың патриотик рухын, тынғыһыҙ һәм емешле ижадын күрә алмаусылар уның үткәнен ҡаҙып, юҡтан бар ғәйеп табып, СССР Яҙыусылар союзы ағзалығынан сығаралар, Халыҡ сәсәне тигән маҡтаулы исемдән яҙҙыралар һәм төрмәгә ябалар.

Асылда ул ниндәй эштәр башҡарған, ниндәй уй-теләктәр менән йәшәгән һуң? Әйтгәнебеҙсә, 1938 йылға тиклем ул төрлө урындарҙа балалар уҡыта. Үҙенең киң эрудицияһы, тарих һәм филология буйынса төплө белеме менән ул балаларҙа милли культураға, фольклорға, телгә, әҙәбиәткә һәм сәнғәткә һөйөү тәрбиәләй.

Уҡытыусылыҡ хеҙмәте менән бергә М. Буранғолов фольклор йыйыу һәм уны пропагандалау эшен дә туҡтатмай. «Шура», «Октябрь» журналдарында, «Башҡортостан» газетаһы биттәрендә ул яҙып алған халыҡ ижады өлгөләре, мәҡәләләре баҫыла. Революциянан һуң байтаҡ йылдар, асылда 1932 йылда уҙғарылған СССР яҙыусыларының беренсе съезына тиклем, фольклорҙы «кәрәкмәгән иҫкелек ҡалдығы» тип, ситкә типкән, хатта уға ҡарты көрәш барған осорҙа ла М. Буранғолов халыҡ ижадына булған ҡарашын үҙгәртмәне, күңелен һыуындырманы. Фольклорҙы тәрән аңлап бөтә йөрәктән ихтирам итеүе, уның көндән-көн юғала барған гәүһәр бөртөктәрен бирелеп йыйыуы, ауырлыҡтарға ҡарамайынса, матбуғат биттәрендә һәм телдән туҡтауһыҙ пропагандалауы үҙе үк оло фиҙакәрлек ине.

Уның яҙмаларының ҡиммәте бөгөнгө көн өсөн дә баһалап бөткөһөҙ. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә донъя күргән 18 томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының, бигерәк тэ эпосҡа,

тарихи йырҙарға, легендаларға арналған өлөшөнөң үҙәген, арҡа һөйәген шул М. Буранғолов йыйған материалдар тәшкил итте лә инде.

Алдынғы ҡарашлы, актив гражданин булараҡ, М. Буранғолов социализм өсөн барған тиңһеҙ көрәшкә лә үҙ өлөшөн индерҙе. Әмма уға ғәйеп япҡанда был эштәрен иҫкә алыусы ла булмай.

1931 - 1935 йылдарҙа М. Буранғолов Мәләүездә балалар уҡыта. Унан һуң ике йыл Йоматау ауыл хужалығы техникумында тел һәм әҙәбиәт дәрестәре алып бара. 1936 йылда уны Әлшәй районына күсерәләр. Әммә яңы ерҙә ул оҙаҡ эшләй алмай, 1937 йылдың декабрендә ҡулға алына. Алты айҙан ашыу барған тикшеренеү һөҙөмтәһендә ғәйепһеҙ тип табыла. Тулыһынса аҡланып сыҡҡандан һуң, ул Өфөләге Тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә алына.

Ошо мәлдән, йәғни 1938 йылдан, уның иң актив ижад осоро башлана. Институтта ул үҙе йыйған һәм архивта элегерәк тупланған фольклор материалдарын системаға һала, уларҙы жанрҙар буйынса классификациялай. Улар нигеҙендә «Башҡорт халыҡ поэзияһы», «Башҡорт тарихи йырҙары һәм легендалары», «Башҡорт туй йолаһы» исемле күләмле хеҙмәттәр яҙа. Әммә бөгөн дә үҙ әһәмиәтен юғалтмаған был хеҙмәттәр билдәле сәбәптәр аркаһында донъя күрмәне, ҡыҙғаnысҡа ҡаршы, әле булһа ҡульяҙма рәүешендә туҙанланып архивта ята.

Әйткәнебеҙсә, М. Буранғолов яҙыусы булараҡ та бик бай мираҫ ҡалдырҙы. Бигерәк тә ул драматургия өлкәһендә актив эшләне. Башҡорт дәүләт драма театрының формалашыу йылдары, сәхнәбеҙҙә тәүләп башҡорт теленең яңғырауы ла сәсән һәм драматург М. Буранғолов исеме менән бәйле. 1920 – 1930 йылдарҙа ул «Ялан-Йәркәй», «Буранбай»

«Башҡорт туйы», «Сәлим кантон», «Ҡалым», «Тәфтиләү», «Шәүрә килен», «Прокурор», «Ҡараһаҡал» һәм башҡа күп кенә пьесалар яҙа. Байтағы Башҡорт дәүләт драма театры тарафынан сәхнәгә ҡуйыла. Пьесаларҙың исеменән үк күренеүенсә, драматургтың был типтағы әҫәрҙәре боронғо халыҡ йырҙары һәм легендалары менән ауаздаш. Әҙәбиәт белгесе И. Бүләков билдәләүенсә М Буранғолов ижадының үҙенсәлеге лә шунда: ул

башҡорт совет драматургияһында фольклор-этнографик йәки көнкүреш - этнографик тип аталған тематик-стиль йүнәлешен башлаусы булып тора. Әммә яҙыусы бындай әҫәрҙәр менән генә сикләнмәй, заман проблемаларын, көнүҙәк мәсьәләләрҙе лә ҡыйыу күтәреп сыға. Шулар иҫәбенә «Прокурор», «Көтөүсе», «Ҡыҙыл таш», «Колхозсылар» һәм башҡа пьесаларын индерергә мөмкин.

М. Буранғоловтың поэтик ижады ла иғтибарға лайыҡ. Ул «Юлай менән Салауат», «Салауат йырҙары», «Ҡараһаҡал», «Бөйөк дуҫлыҡ тураһында йыр», «Бөйөк Ватан һуғышы тураһында йыр», «Закон тураһында ҡобайыр» исемле күләмле ҡобайыр поэмалар, баитаҡ шиғырҙар яҙа. Ижади уңыштары, халыҡ алдындағы фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн уға 1944 йылда Халыҡ сәсәне тигән маҡтаулы исем бирелә.

Әммә шулай ижади эштәргә күмелеп, илһамланып йәшәү осоро оҙаҡҡа бармай. 1950 йылда ун йылға хөкөм ителә. КПСС-тың шәхес культын фашлаған XX съезынан һуң 1956 йылда, иреккә сығарыла. Уны реабилитациялау эшен урындағы властар өс йылға һуҙа. СССР Генеральный прокуроры ҡыҫылғас ҡына, был эш ыңғай хәл ителә. Бынан һуң да уға иркенләп йәшәргә, үҙенең ижад емештәрен китап итеп күрергә яҙмай. 1966 донъя ҡуйғас, бер һандыҡ ҡулъяҙма әҫәрҙәр изге мираҫ булып улы Нәжибкә күсә. Был яҙмалар күптән түгел Башҡортостан ғилми үҙәге архивына тапшырылды.

Уҡытыусы, фольклорсы, яҙыусы Мөхәммәтша Буранғолов үҙ халҡын өҙөлөп һөйҙө, уның аң һәм культура үҫешенә билдәле өлөш индерҙе. Уның тормошо, ялҡынлы ижады халҡына физаҡәр хеҙмәт итеү өлгөһө ул М. Буранғоловтың исемен мәңгеләштереү, бай мираҫын халыҡҡа еткереү буйынса байтаҡ эштәр эшләйһе бар әле беҙгә.

**2. Буранғолов М. Минең биографиям [Текст] // Буранғолов, Мөхәммәтша. Һайланма әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. – Б. 448 - 450.**

«1888 йылдың 15 декабрендә элекке Һамар губернаһы Бышаулыҡ өйәҙенең (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Александровка районы) Үрге Ильяс ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуғанмын. Ата-әсәйем 1900 йылда донъя ҡуйҙы. Ҡәрҙәштәремдә йәшәп, улар ҡулында тәрбиә алдым. 1901 йылда башланғыс мәктәпте бөтөргәс, Ырымбур ҡалаһына киттем. Йәйҙәрен Баязитов Баһауетдин тигән кешенең сәйханаһында официант булып эшләнем, ә ҡышын Ҡарғалылағы Сәйет биҫтәһендә Ғәликәевтең 7-се мәсете мәҙрәсәһендә уҡыным. 1903, 1904, 1905 йылдарҙа Аҡтүбә ҡалаһында Зәбиров Фәтҡулла исемле кешенең тирмәнендә ашлыҡ ҡабул итеп торҙом. 1906 йылдың йәйендә Аҡтубә өйәҙенең ҡаҙаҡ ауылдарында мөғәллимлек иттем. 1907 - 1908 йылдарҙың йәйге мәлдәрендә Башҡортостан буйлап йөрөп, башҡорттарҙы өҫтәмә рәүештә иҫәпкә алған саҡта тәржемәсе булдым. Ошо ваҡытты башҡорт фольклорын йыйыу өсөн дә файҙаландым. 1909, 1910 йылдарҙа ҡаҙаҡ ауылдарында ла йөрөнөм, ҡыштарын Ырымбурҙа «Хөсәйениә» мәҙрәсәһендә уҡыным. 1910 йылдың сентябрь айында хәрби хеҙмәткә саҡырғайнылар, ләкин, яраҡһыҙ тип, аҡ билет тотторҙолар. 1911 йылда «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен тамамланым һәм 1912 йылда Ырымбур өйәҙенең Ҡайыпҡол ауылында уҡытыусы булып эшкә урынлаштым.

1914 йылда Ҡайыпҡол йәмәғәтселегенең йыйылышы, мине Ҡайыпҡол мәсетенең муллаһы итеп тәғәйенләп, хәрби хеҙмәттән азат итеүҙе юлланы. 1916 йыл ауыл уҡытыусыларын да хәрби хеҙмәттән ҡалдырыу тураһында указ иғлан ителде. Шунан файҙаланып, мин Бышаулыҡҡа киттем һәм халыҡ мәғарифы бүлегенә милли мәктәптәр инспекторы булып эшкә индем. 1916 йылдан алып 1918 йылға тиклем шунда эшләнем һәм шулай уҡ тыуған ауылым Үрге Ильяста ла уҡыттым.

1917 йылдың 25 декабрендә Бөтөн башҡорт съезы (Ҡоролтай) үткәрелеп, унда Башҡорт автономияһы иғлан ителде. Ҡоролтайҙан һуң Быҙаулыҡ өйәҙендә йәшәгән башҡорт халҡы Туҡ-Соран кантоны составына инде. 1918 йылда кантон эргәһендә халыҡ мәғарифы бүлеге ойошторолдо. 1919 йылдың 18 февралендә Башҡортостан Советтар яғына күскәс, крәҫтиәндәр һәм



М.Буранғолов ғаиләһе менән Ырымбурҙа йәшәгән осорҙа. 1921 йыл.

ҡыҙылармеецтар депутаттарының 1 съезында мине Туҡ - Соран кантоны башҡарма комитеты ағзаһы һәм район мәғариф бүлеге мөдире итеп һайлап ҡуйҙылар. Унда 1921 йылға тиклем эшләнем. 1921 - 1922 уҡыу йылында педагогия техникумында, шунан төрлө райондарҙа тулы булмаған урта мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыттым. 1938 йылға тиклем шулай дауам итте был».

М. Буранғолов ошо осорҙағы тормошон 1939 йылда яҙған биографияһында тулыландыра:

«1930 - 1935 йылдарҙа Мәләүез ауылы урта мәктәбендә уҡыттым. 1935 - 1936 йылдарҙа Шишмә районының Йоматау ауыл хужалығы техникумында, 1936 - 1937 йылдарҙа Әлшәй районында эшләнем. 1937 йылдын 25 авгусында Абызбаевтың ялыуы буйынса эштән бушатылдым һәм 23 декабрҙә НКВД органдары тарафынан ҡулға алындым...»

«...Уҡытыусылыҡ эше менән бергә мин фольклор материалдары йыйыуҙы алып барҙым, ошо нигеҙҙә башҡорт телендә «Ашҡаҙар» драмаһын яҙҙым - ул 1917 йылда Өфөлә һәм Ырымбурҙа сәхнәгә ҡуйылды. 1930 йылға тиклем Башҡорт театрының репертуарынан төшмәне.

Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң түбәндәге пьесалар яҙылып, Башҡорт театры репертуарына инде: 1914 - 1930 йылдарҙа - «Ялан Йәркәй»,

«Шәүрәкәй», «Әбйәлил шайкаһы»;   1927 - 1935   йылдарҙа - «Башҡорт туйы» (1930 йылда баҫылып сыҡты);  1920 - 1927 йылдарҙа - «Буранбай», «Алпамыша батыр», «Ҡара юрға», «Ҡаһарман кантон», «Сәлим кантон». 1927 йылдан 1930 йылға хәтлем колхоз театрында «Прокурор» пьесаһы барҙы (1930 йылда «Октябрь» журналында баҫылып сыҡты).

1938 йылдан бирле Башҡорт академия драма театры репертуарында «Гөлсәсәк» пьесаһы, Опера театры репертуарында «Мәргән» операһы тора (композиторы - А. Эйхенвальд).




Үҙемдең архив материалдарынан башҡорт батырҙары (Ҡараһаҡал, Мәргән, Аҡбуҙат, Салауат) тураһында героик эпостар (күләме - 10 табаҡ бит) яҙылды. Ике варианттағы «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпостары өсөн материалдар йыйылды, ул 1940 йылда «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитенең төрлө һандарында һәм «Октябрь» журналында баҫылды (күләме - 12 табаҡ бит).

1938 йылдың 10 сентябренән алып 1941 йылдың 21 июленә тиклем Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булдым, бер туҡтауһыҙ фольклор йыйыу менән шөғөлләндем. Йыйылған фольклор материалдарынан хикәйәләр, эпостар, пьеса һәм либреттолар яҙылды.

1918 - 1950 йылдарҙа театр өсөн 15 әҫәр ижад ителде.

Хәҙерге көндә Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы һәм Башҡортостандың 1919 йылда Советтар яғына сығыуы тураһында һөйләгән драмалар өҫтөндә эшләйем.

М. Буранғолов  1964 йылдың 9 декабре».

**3. Мөхәммәтша Буранғол (1888-1966) [Текст]: арҙаҡлы башҡорттар. / рубриканы Рәшит Шәкүр алып бара // Шоңҡар. - 1994. - №1. - Б. 97 - 100.**

XX быуат башҡорт рухи донъяһында иң күренекле, үҙәк урында торған шәхестәрҙең береһе. Башҡорт әҙәбиәтенең классигы, шағир, драматург, фольклорсы, Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов 1888 йылдың 15 декабрендә элекке Һамар губернаһының Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосы (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы) Үрге Ильяс (Тәңес) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Туғыҙ йәшкә еткәндә атаһыҙ, ун икенсе йәшендә әсәһеҙ ҡалып, үкһеҙ етемлектә ағалары тәрбиәһендә үҫә. Күршеләге Иҫке Юлдаш ауылында земство мәктәбен тамамлай. 1901 йылда Ырымбур ҡалаһына сығып китә, йәйге каникул көндәрендә төрлө эштәрҙә йөрөп, ҡыштарын Ҡарғалының 7-се мәсет янындағы мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. Бер йәйҙә Ырымбурҙа Баязит байҙың сәйханаһында официант булып эшләй, 1903, 1904, 1905 йылдарҙың йәйге айҙарында Ҡаҙағстандың Актүбә талаһында Фәтҡулла Зәбиров тигән кешенең тирмәнендә иген ҡабул итеүсе булып эшләй. 1906 йылдың йәйендә Аҡтүбә өйәҙенең ҡаҙаҡ ауылында балалар уҡыта. 1907, 1908 йылдың йәйге айҙарында тәржемәсе сифатында башҡорттар араһында өҫтәмә иҫәп-хисап эштәрендә ҡатнашып, Башҡортостан буйлап оҙон юлдар үтә. Был эште ул башҡорт фольклорын йыйыу маҡсатында ла файҙалана. Ошо ваҡытта, 1908 йылда, ул Башҡортостандың Урал аръяғында башҡорттоң атаҡлы сәсәне һәм ҡурайсыһы Ғәбит Арғынбаев менән таныша. Меңәр йыллыҡ ҡобайырҙарҙы яттан һөйләүсе Ғәбит сәсән менән осрашыу М. Буранғоловҡа, тәрән йоғонто яһай, унын артабанғы эшмәкәрлегенә өр-яңы йүнәлеш бирә. 1908 йылда Ғәбит Арғынбаевтан яҙып алынған фольклор материалдарын Ырымбурҙа Риза Фәхретдиновҡа күрһәтеп, ихлас күңелдән әйтелгән бик ҙур баһаға лайыҡ була. 1910 йылда иһә Ырымбурҙағы «Хөсәиниә» мәҙрәсәһенең шәкерте, 22 йәшлек Мөхәммәтша Буранғол башҡорт рухиәте тарихында мәңгелек урын алырҙай хеҙмәт күрһәтә –

Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтов сәсәндәрҙән ул бөйөк «Урал батыр» эпосын яҙып ала. 1911 йылда «Хөсәиниә» мәҙрәсәһен тамамлап, 1916 йылға тиклем үҙенең тыуған яғы – Туҡ буйы башҡорт ауылдарында балалар уҡыта. 1914 йылда, беренсе бөтөн донья һуғышы башланыу менән, М. Буранғолов уҡытыусы булып эшләгән Ҡайыпҡол ауылы халҡы, мобилизациянан алып ҡалыу ниәте менән, сходҡа йыйылып, уны мулла итеп тәғәйенләү тураһында ҡарар сығара һәм, хәрби хеҙмәткә алмауҙы һорап, хөкүмәт органдарына хат менән мөрәжәғәт ҡабул итә. М. Буранғолов бер аҙ ваҡыт мулла булып тора. Үкенескә ҡаршы, аҙаҡ, тоталитар режим осоронда, быны, элекке мулла, тип, уға ҡаршы ғәйепләү факты итеп файзалананалар.



1916 йылда М. Буранғолов, үҙ төйәгенең өйәҙ үҙәге Быҙаулыҡ - ҡалаһына күсеп, халыҡ мәғарифы бүлегенең милли мәктәптәр инспекторы булып урынлаша. 1917 йылдың 18-20 декабрендә М. Буранғолов Быҙаулыҡ өйәҙе башҡорттарының вәкиле сифатында Ырымбурҙа бөтөн башҡорт халыҡ ҡоролтайының (съезының) эшендә ҡатнаша. Ҡоролтайҙан һуң Быҙаулыҡ өйәҙе Туҡ-Соран кантоны составына индерелә. М. Буранғолов кантон башҡарма комитетының мәгариф бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың февраленән 1920 йылдың декабренә тиклем ул – Туҡ-Соран кантон башҡарма комитетының рәйесе. 1921 йылдан 1937 йылға тиклем Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә мәктәптәрҙә һәм техникумдарҙа уҡытыусы булып эшләй. Ситтән тороп, К. А Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый, 1937 йылда уҡыуҙан сығарылғанға тиклем дүртенсе курсты тамамлап өлгөрә. 1938 йылда Өфөгә килеп, бер нисә йыл буйы Башҡортостан Тел һәм әҙәбиәт (хәҙерге Тарих,

тел һәм әҙәбиәт) ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр, бер аҙ ваҡыт Башҡорт дәүләт драма театрында әҙәби консультант вазифаһын башҡара. Был осор эсендә фольклорсы ғалим булараҡ та, шағир һәм драматург сифатында ла ғәйәт ҙур эштәр башҡара: ошоғаса йыйнап килгән бихисап фольклор материалдарын барлап, системаға килтереп, төрлө йыйынтыҡтар төҙөй, пьесалар, либреттолар яҙа, күләмле поэтик әҫәрҙәр ижад итә. 1944 йылда уға Башҡортостандың халыҡ сәсәне тигән юғары исем бирелә. Әммә ВКП(б) Үҙәк Комитетының «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» 1945 йылдың 27 ғануарында ҡабул иткән -ҡарарында нахаҡҡа буржуаз милләтселектә ғәйепләнгәндән һуң быға тиклем дә эҙәрлекләүгә дусар ителгән әҙиптең исеме лә, ижады ла оҙаҡ ваҡыттар буйы тыйылып  һәм быуылып тора. Үҙ ғүмерендә ул биш тапҡыр ҡулға алына. Беренсе мәртәбә 1918 йылдын майында Ҡазанда үткәрелгән Бөтә Россия педагогия йыйынында ҡатнашҡан өсөн аҡтар тарафынан ҡулға алына һәм, күп тә үтмәй, ҡыҙыл партизан отрядтары менән тимер юлсылар дружинниктары тарафынан ҡотҡарып сығарыла. Артабан, 1920 йылда ул, Әхмәтзәки Вәлидиҙең эштәрен хуплаусы булараҡ, Ильяс Алкин, Ғариф Хужаев, Хәлим Әмиров менән бергә Мәскәүҙең Бутырка төрмәһенә ябыла. Бынан улар Совет хөкүмәтенең етәксеһе В. И. Ленинға дүртәүләшеп хат яҙғандан һуң азат ителә. 1929 йылда йәнә ҡулға алынып, бер аҙ ваҡыт һаҡ аҫтында тотоп сығарыла. 1937 йылдың 23 декабренән башлап был юлы ете ай буйы Өфө төрмәһендә тотҡонлоҡта, ятып сыға. Ошонан һуң уға бер аҙ ваҡыт теймәй торалар. Ләкин, алда әйткәнебеҙсә, 1945 йылдың ғинуарынан әҙиптең баш осонда ҡара болоттар торған һайын нығыраҡ ҡуйыра. 1946 йылдың 25 октябрендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының М. Буранғол һәм Б. Бикбай ижадын тикшереүгә арналған киңәйтелгән ултырышы М. Буранғолдоң, йәнәһе, «бөтөн ижади эшмәкәрлеге осоронда идея яғынан тотанаҡлы бер генә әҫәр ҙә тыуҙыра алмауын» билдәләп үтә һәм әлеге шул милләтселектә ғәйепләй. Башҡорт халҡының дошмандары атаҡлы әҙипте, ялған ғәйептәр тағып, Яҙыусылар союзынан сығарыуға,

халыҡ сәсәне исеменән мәхрүм итеүгә, ниһәйәт, 1950 йылда һөргөнгә оҙаттырыуға өлгәшәләр. М. Буранғолов СССР Дәүләт именлеге министерствоһы эргәһендәге Особый кәңәшмәнең ҡарары менән халыҡ дошманы тип ғәйепләнеп, ун йылға алыҫ Себерҙәге Тайшет лагерына оҙатыла. Айырым китап булып сыҡҡан әҫәрҙәре юҡ ителә, пьесаларын сәхнәгә ҡуйыу тыйыла. 6 йылдан һуң, СССР Юғары Советы Президиумының 1955 йыл 3 сентябрь Указы нигеҙендә 1956 йылдың 12 майында иреккә сығарылып, Башҡортостанға ҡайта. Әммә ғәҙелһеҙлек, шәхесте быуып тотоу быны менән дә бөтмәй әле. М. Буранғоловҡа, иреккә сыҡҡан хәлдә лә, ысын ижад ирке менән йәшәү насип булмай. Уға ғүмеренең һунғы йылдарына ҡәҙәр үҙ-үҙен яҡлап, гражданлыҡ һәм яҙыусылыҡ хоҡуҡтары өсөн ауыр көрәш алып барырға тура килә. Дөрөҫ, уның Яҙыусылар союзы ағзалығын һәм Башҡортостандың халыҡ сәсәне тигән исемен тергеҙмәйенсә булдыра алмайҙар. Әммә Башҡортостанда ул йылдарҙа иң элек республиканың төп халҡына ҡаршы алып барылған сәйәсәтте М. Буранғолов бөтөн тулылығында үҙ башынан үткәрергә тура килә. Халыҡ яҙыусыһы, 78 йәшкә етеп, 1966 йылдың мартында Өфөлә вафат була. Уға үҙе иҫән саҡта әҫәрҙәренең бер генә тулыраҡ басмаһын да, хатта йәш сағында, быуат башында яҙып алған «Урал батыр» эпосының да донъяға сығыу бәхетен күрергә насип булмай. («Урал батыр» тәү башлап бары тик 1968 йылда, ниһәйәт, «Ағиҙел» журналы биттәрендә донъя күрә).

Мөхәммәтша Буранғолдоң ижади эшмәкәрлеге айырыуса фольклористика һәм драматургия өлкәһендә оло ҡаҙаныштар менән билдәләнә. Ул 18 - 20 йәштәрҙәге егет ҡоронан алып бөтөн ғүмере буйы алһыҙ-ялһыҙ башҡорттоң йыр-моң байлыҡтарын, йыр-риүәйәттәрен, легендаларҙы, туй йолаларын, эпик ҡомартҡыларҙы йыйыу, пропагандалау, сәсәндәр ижадын һәм торомошон өйрәнеү менән шөғөлләнә. М. Буранғолдоң ҡулъяҙма мираҫындағы «Башҡорт халыҡ поэзияһы», «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәттәр, йырҙар йыйынтыҡтары башҡорт фольклористикаһының ғәйәт ҡиммәтле сығанаҡтары һанала. Фәҡәт уның хәстәрлеге арҡаһында рухи мәҙәниәтебеҙ тарихы өсөн уҙған быуаттарҙа

йәшәгән бик күп атаҡлы башҡорт сәсәндәренең биографияһына ҡараған мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған.

Драматург булараҡ, М. Буранғол иң элек башҡорт тарихы, фольклоры, башҡорттоң рухи донъяһы менән бәйле. Уның пьесаларының күбеһе – башҡорт йыр-көй тарихтарына нигеҙләнгән фольклор-этнографик пландағы әҫәрҙәр. Бында әҙиптең фольклорсылыҡ эшмәкәрлеге менән драматургик ижады араһында хатта тышҡы бәйләнештәр ҙә күҙәтелә. Мәсәлән, 1915 йылда ул «Шура» журналының 13-сө һанында «Ашҡаҙар» көйөнөң тарихын баҫтырып сығара. 1917 йылда иһә М. Буранғол «Ашҡаҙар» исемле пьесаһы менән драматургияла тәүге аҙымын яһай. Әйткәндәй, 1919 йылда тәү башлап ошо пьесаны сәхнәгә ҡуйып, Башҡорт драма театры үҙ тарихының тәүге битен асып ебәрә.

М. Буранғол үҙ ғүмерендә утыҙҙан артыҡ ҙур күләмле сәхнә әҫәре ижад итә. Шулар араһында «Шәүрәкәй» (1925, 1948), «Башҡорт туйы» (1926 - 43) театр сәхнәләрендә айырыуса ҙур уңыш ҡаҙана. М. Буранғолдоң ижади мираҫында «Караһаҡал» (1930 - 39) драмаһы, «Иҙеүкәй һәм Мораҙым» трагедияһы (1940 - 43) мөһим урында тора. Уның йәнә «Зәңгәр шәл» (1918), «Буранбай» (1920), «Тәфтиләү» (1921), «Алпамыша» (1922), «Сәлим-кантун» (1923), «Ялан-Йәркәй» (1923 - 26), «Ҡара юрға» (1924), «Әбйәлилдәр шайкаһы» (1926 - 29) «Гөлсәсәк» (1939), «Таштуғай» (1938 - 59) исемле һ.б. пьесалары булғанлығы билдәле. Драматург тәүге башҡорт опералары өсөн либреттолар ижад итә («Мәргән» (1939), «Туҡтар менән Гөлнур» (1944 - 47) .

М. Буранғолдоң сәсәнлек-шағирлыҡ ижады башҡорт поэзияһында боронғо ҡобайыр традицияһын дауам итеү йәһәтенән ғәйәт ҡыҙыклы. Был йәһәттән уның 1942 йылда айырым китап булып баҫылып сыҡҡан «Ватан һуғышы» ҡобайыры айырылыш тора. Әҙиптең шәхси архивында проза әҫәре - «Сәлимә» исемле повесть һаҡланған булып сыҡты. М. Буранғол ижадының тәүге осоронан уҡ публицистика менән дә шөғөлләнә.

1988 йылда Башҡортостан йәмәғәтселеге халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғолдоң тыуыуына 100 йыл тулыу көнөн тантаналы билдәләп үтте.

Юбилей айҡанлы уҙғарылған ғилми конференция ҡарары нигеҙендә унның күп яҡлы ижади мираҫынан ике томда әҫәрҙәр йыйынтыҡтары әҙерләнде.

М. Буранғол әҙип һәм шәхес буларaҡ башҡорт халҡының иң уҙаман, иң бөйөк улдарының береһе, үҙ милләтенең рухи ныҡлыҡ сағылышы.

**Әҫәрҫәр:** Ашҡаҙар: пьеса. Ырымбур, 1923; Башкорт туйы: пьеса. Өфө, 1929; Батырҙар тураһында эпос, Өфө, 1943.

**Әҙәбиәт:** История башкирской советской литературы. М., Наука, 1977; Мөхәммәтша Буранғоловтың сәсәнлек һәм әҙәби эшмәкәрлеге. Өфө, 1992, 121 бит. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда, 4-се том. Өфө, 1993, 75 - 94-се биттәр.

**4. Сәсән яҙмышы [Текст] : Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранголовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға ҡарата // Шәрипова, Зәйтүнә. Әҙәбиәт ғилеме һәм заман. - Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2001. - Б. 216 - 241.**

Ҡулланышта шундай һүҙ бар - табу. Унның мәғәнәһе, ябай ғына әйткәндә, тыйыу тигәнде аңлата. Әлбиттә, «табу һалыу», ҡәтғи тыйыу кеше-лек таңында, әҙәм балаһы әле уҙен тәбигәт стихияһынан айырып ҡарай алмаған дәуерҙә ук тыуған. Рөхсәт ителмәгән эшкә тотонған, тыйылған урын-ергә аяҡ баҫҡан, йә булмаһа ҡағылырға ярамаған әйбергә йоғонған кешегә ниндәйҙер илаһи көстәр килтерер бәлә-ҡаза, улем ҡурҡынысы менән янаған табу. Тәуҙәрәк ундай шомло кәртәне бер генә нәҫелгә, хатта бер генә затка әйтеу ҙә еткән, моғайын, ә ҡалған кешеләр, бигерәк тә йәш быуың, шул улемесле ҡурҡыуҙы йөрәк төптәрендә йөрөтөп, шул хәуефте ҡанына һеңдереп уҫкәндер. Ҡат - ҡат туҡып, киҫәтеп тороу ҙа кәрәкмәгән уларҙы – тыйыуҙың магик ҡөҙрәте лә шунда.

Эйе, борон-борон аҙ һанлы ырыу - ҡәбиләләрҙә табу ҡанундарын үтәү әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырмаған. Ә бына егерменсе быуат уртаһында, беҙҙең кеуек төрлө милләтле, төрлө телле, арҡырыһы - буйы иңләп сыҡҡыһыҙ ҙур илдә утыҙынсы - илленсе йылдар тарихына нисек итеп табу урынлаштырып булды икән? Уйлап ҡараһаң, асылда табу хөкөм һөргән бит. Рәсми рәүештә,

ҙур трибуналарҙа түгел, хатта шәхси аралашыуҙарҙа ла булдымы икән был турала һөйләшеүҙәр - өҙөп кенә әйтеү ҡыйын.

Шунда ла беҙҙен быуын сағыштырғыһыҙ бәхетле: мәктәп йылдарынан уҡ «Ырғыҙ», «Ҡан» романдарын ҡосаҡлап, батыр йөрәкле бәләкәй Ҡотоштоң көрәшсе булып үҫеүенә һоҡланып, Бабичтың «ап-аҡ алтын йырҙарын» ятлап үҫтек. Ул китаптарҙың авторҙары – күренекле башҡорт яҙыусыларының яҙмыштары хаҡында өйрәнәбеҙ, аҙмы-күпме беләбеҙ кеүек ине. Инде асыҡ күренә: бар белгәнебеҙ тормоштарының ҡоро схемаһы булған. Ә күпме әҙиптәр хаҡында һүҙ бутҡаһы бешереүҙән ары кителмәгән...

Таныш та, таныш түгел дә шундай шәхестәрҙең береһе - фольклорсы-ғалим, драматург Мөхәммәтша Буранғолов. Мин уны күреп белмәйем, бары уның менән аралашҡан кешеләр менән генә һөйләшкәнем бар. Уларҙың хәтерендә Буранғолов образы төрлөсәрәк уйылып ҡалған. Берәүҙәрҙең иҫенә йомоҡ, ҡараңғы сырайлы, өндәшмәҫ кеүегерәк төшә, икенселәргә ул тәкәббер, һауалы тойолған, өсөнсөләр иһә, уның барлыҡ эшмәкәрлеге - тарихта үҙенең исемен ҡалдырыу өсөн генә, тип һығымта яһағандай. Бәғзе берәүҙәр уны тура һүҙле, намыҫлы, үҙ принциптарына тоғро ине тип хәтерләй. Һуңғылары күберәк. Берәү менән дә бәхәсләшмәйем. Уның ғүмер юлын күҙ аллайым да, исемен тарихта М. Буранғолов һымаҡ ҡалдырырға тырышҡандар күберәк булһа икән, тип уйлайым.

Сәсәндең тормош һәм ижад юлын, быға тиклем сыға килгән белешмәләрҙәге күнегелгән ҡалыпҡа һалһаң, бер нисә юлға ла һыйҙырырға мөмкин. 1888 йылдың 15 декабрендә Быҙаулыҡ өйәҙе (хәҙерге Ырымбур өлкәһе) Йомран-Табын волосының Үрге Ильяс ауылында Абдрахман атлы урта хәлле башҡорт ғаиләһендә тыуа. 12 йәш тигәндә үкһеҙ етем ҡалған үҫмер Ырымбурға бара, йәйҙәрен төрлө кәсепкә ялланып, аҡса йыя, ҡыштарын тәүҙә Ҡарғалыла, аҙаҡ Ырымбурҙа уҡый. «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен тамамлай. Төрлө урында тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы,

күпмелер ваҡыт ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1966 йылда 78 йәшендә вафат була.

Оҙон ғүмер... Нисек йәшәгән һуң ике быуатты ҡоласлаған, ике донъяның – Октябргә тиклемге һәм унан һуңғыһының - ҡаҙанында ҡайнаған был тормош йылдары?

Мөхәммәтшаның ысынбарлыҡ менән күҙгә – күҙ осрашыуы кешеләр араһында башлана. Сәйханала йомошсо булып йүгерһенме, йә иһә Аҡтүбәлә тирмәндә тир түкһенме, ҡаҙаҡ далаларында һабаҡ бирһенме, ҡыҙыҡһыныусан, күҙәтеүсән тәбиғәтле үҫмергә төрлө милләт вәкилдәре - рус, ҡаҙаҡ, татар һәм башҡалар менән аралашырға тура килә. Кеше күп ерҙә һүҙ ҙә күп, тигәндәй, эш араларында көләмәстәр ҙә һөйләнә, төрлө тарихтар ҙа бәйән ителә, йырҙар ҙа көйләнә. Үҙе лә йор, тапҡыр телле Мөхәммәтша һәр мәҙәккә, һәр хикәйәгә ҡолаҡ һала, оҡшағандарыш күңеленә һеңдерә, хатта форсат тейгәндә ҡағыҙға теркәргә тырыша.

1907 йыл халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында тәржемәсе булып йөрөгән Мөхәммәтша Ғәбит сәсән менән осраша. Талантлы халыҡ ҡурайсыһының «Урал батыр» кеүек оҙон-оҙон эпостарҙы хәтерендә тотоуы, өҫтәүенә, иҫ китмәле үҙенсәлекле, үҙен-үҙе оҫта башҡарыуы уны таң ҡалдыра, әсир итә. Күп йылдар үткәс тә, М. Буранғолов «уның кеүек сәсәнде мин һис ҡасан осратҡаным булманы», тип һоҡланып та, ғорурланып та яҙа. Башҡорт халҡының бай тарихына, гүзәл ауыҙ-тел сәнғәтенә, ил аҡылын, ил хәтерен быуындарҙан быуынға ялғар сәсәндәргә мөкиббән ғашик була егет. Ошо һөйөү уның яҙмышына әүерелә, ниндәй хәтәр ҡыйынлыҡтарға, ғәйепләүҙәргә тарыһа ла, халыҡ ижадына ғүмере буйы тоғро ҡала.

Ирек өсөн, ил-ер өсөн тарих һуҙымында күпме ҡан ҡойолғанын, күпме батыр баштары ҡыйылғанын белеп, көнө-төнө байҙарға бил бөккән ярлы-ябағаның ҡуңалтаҡ көнитмешен күреп, аһ-зарын ишетеп үҫкән Мөхәммәтша Октябрь революцияһынан һуң яңы йәмғиәт төҙөүгә актив ҡушыла. Быҙаулыҡ өйәҙенең мәғариф бүлегендә, һуңынан Туҡ-Соран канткомында эшләгәндә ул ябай халыҡ араһында үҙенең ғәҙеллеге, бер

һүҙлелеге менән ышаныс, ихтирам яулап өлгөрә. Шуғалыр ҙа, Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғас, бының сәбәптәрен асыҡлау өсөй төҙөлгән комиссияға Буранғоловты Байбурин менән халыҡ вәкиле итеп индерәләр. Әйтергә кәрәк, халыҡ массалары Башҡорт шураһының асылын баштан уҡ белеп, аңлап эйәргәндәр тип раҫлаһаҡ (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп хеҙмәттәрҙә был хәл шулайыраҡ тасуирлана), ул фекер хәҡиҡәткә тап килмәҫ ине. Халыҡтың күпселеге өсөн быуаттар буйы көтөлгән ирекле тормош, сәйәси азатлыҡ өмөтө Октябрҙең тәүге көндәрендә үк һайланған Башҡорт хөкүмәте эшмәкәрлегенә бәйләнгән була. Хөкүмәт башлыҡтарын ҡулға алыу халыҡ араһында борсолоу, ризаһыҙлыҡ тыуҙыра, хатта уларҙы ҡотҡарыу өсөн ҡорал күтәрергә лә, башҡаларын үс алырға саҡырыуҙар ҙа яңғырай ул буталсыҡ көндәрҙә. Үҙ-ара, бигерәк тә башҡорт, татар араһында, үлемесле ыҙғыш тоҡанып китмәүендә, һис шикһеҙ, халыҡ вәкиле булараҡ үрҙә телгә алынған комиссия эшендә ҡатнашҡан М. Буранғоловтың роле ҙур. 1 март көнө «Башҡортостан» гәзитендә БВРС исеменән Б. Шәфиевтың «Арест Башкирского областного совета» мәҡәләһе сыға, 8 мартта «Яңы ваҡыт» гәзитендә М. Буранғоловтың «Башҡорт туғандарға» тигән мөрәжәғәте баҫыла. Унда автор ҡулға алыныуға ҡағылышлы тулы, дөрөҫ информация биреп кенә ҡалмай, ә халыҡты айныҡ аҡыл һәм сабырлыҡ менән эш итергә, кешелекле булырға, дуҫлыҡты һаҡһыҙ емермәҫкә саҡыра.

Әгәр уның шәхси яҙмышы ошо Башҡорт хөкүмәте мәсьәләләре менән бергә төйнәлмәһә, быларҙы оҙон-оҙаҡ һөйләп тороуҙың кәрәге лә булмаҫ ине. 1920 йылда Башҡорт хөкүмәте етәксеһе Зәки Вәлиди сит яҡтарға киткәс һәм хөкүмәт таралғас, уның көндәлек эшмәкәрлеген хуплаусылары тип иҫәпләнгән Ильяс Алкин, Ғариф Ходжаев, Хәлим Әмиров һәм Мөхәммәтша Буранғолов ҡулға алынып, Мәскәүҙәге Бутырка төрмәһенә оҙатыла. Төрмәнән улар дүртәүләшеп В.И. Ленинға хат яҙалар һәм, әгәр дөрөҫ булһа, юлбашсы менән осрашыуға саҡырылалар, тотҡонлоҡтан азат ителәләр. Алкин Мәскәүҙә уҡытырға тороп ҡала, Ходжаев Үзбәкстанға юллана, Әмиров менән Буранғолов Өфөгә ҡайталар.

1922-1928 йылдарҙа Мөхәммәтша Буранғолов Стәрлетамаҡҡа ойошторолған «Башҡортостан шуралар йөмһүриәте мәғариф комиссариаты янындағы ғилми-фәнни вә тарихи ойошма»ға ағза булла һәм халыҡ тарихына ҡағылышлы материалдарҙы йыйыу, өйрәнеү һәм баҫтырыу эшенә ең һыҙғанып тотона. Ошо осорҙа ул драматург та булып таныла. 1923 йылда айырым китап итеп баҫылған «Ашҡаҙар» исемле пьесаһы, һуңынан «Ялан Йәркәй», «Тәфтиләү», «Шәүрәкәй», «Айһылыу» һәм башҡа сәхнә әҫәрҙәре, бигерәк тә «Башҡорт туйы» милли театрҙар репетуарында һиммәтле урын ала, тамашасылар тарафынан яратып ҡабул ителә.

1929 йылда М. Буранғолов тағы ла күпмелер ваҡыт һаҡ аҫтында тотола. Бынан Мәләүез, Шишмә, Әлшәй районында башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта, ситтән тороп пединституттың дүрт курсын тамамлай. 1937 йылдың августында эштән бушатыла һәм 23 декабрендә, ВКП (б)-ның Башҡорт Өлкә комитетының Октябрь пленумынан һуң массовый репрессиялар башланғас, йәнә Өфө төрмәһенә ябыла. «Буранғолов менән мине «әңгәмәгә» алмаш-тилмәш йөрөттөләр» - тип иҫләр ине олоғайһа ла хәтәр шәп хәтерле Ҡасим ағай Аҙнабаев. – Сираттағы осрашыуҙан һуң аптырабыраҡ ҡайтып инде. НКВД начальнигы Медведев миңә «беҙгә элекке милләтселәр кәрәкмәй, беҙгә свежий, яңы милләтселәр кәрәк, һине сығарабыҙ», тип әйтте ти. Ысынлап та, уны шул кисте ҡайтарып ебәрҙеләр».

1938 йыл аҙағында Мөхәммәтша Буранғолов, тәжрибәле фольклор белгесе буларак, Өфөләге тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтына хеҙмәткәр итеп алына. Оҙак йылдар үҙе йыйған, ҡәҙерләп һаҡлаған материалдарын системаға һалыу, фәнни күҙлектән баһалау, матбуғатта баҫтырыу өсөн текстар әҙерләүгә мөмкинлек асыла. «Башҡорт тарихи йырҙары», «Башҡорт тарихи йырҙары һәм легендалары», «Башҡорт халыҡ поэзияһы» тигән хеҙмәттәрен яҙа, туй йолаларының бөтә комплексын үҙ эсенә алған уникаль «Башҡорт туй йолалары» монографияһы өҫтәлгә ята. Эш араһында журнал-газеталарҙа фольклорҙың иң матур өлгөләрен матбуғатта баҫтырып сығара, өҫтәүенә, әҙәбиәттә илһамлы эшләй. «Мәргән» исемле опера либреттоһы яҙа, «Башҡорт туйы» ның яңы вариантын әҙерләй,

«Өлгө», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» драмаларын тамашасы хөкөмөнә тәҡдим итә. Халыҡ героизмын данлаған ҙур күләмле «Ватан һуғышы» ҡобайыры 1942 йылда донъя күрә.

1943 йылда М. Буранғолов төҙөгән «Батырҙар тураһында эпос» китабы нәшер ителә. Көндәлек матбуғатта сыға килгән «Аҡбуҙат», «Мәргән менән Маянһылыу», «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» эпостарының бергә тупланмаһы була ул.

М. Буранғоловтоң был осорҙағы эшмәкәрлеге хаҡлы баһалана: 1940 йылда СССР Яҙыусылар союзына ҡабул ителә, ә БАССР Верховный Советы Президиумының 1944 йылдың 18 апрель указы менән импровизация сәнғәт өлкәһендәге күренекле хеҙмәттәре өсөн Ф. Дәүләтшин, С. Исмәғилев менән бер юлы уға ла БАССР-ҙың халыҡ сәсәне тигән хөрмәтле исем бирелә...

1945 йыл 27 ғинуары ВКП(б) Үҙәк Комитеты «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу буйынса саралар тураһында» ҡарар ҡабул итә. Халыҡты совет, партия кадрҙарын идея-сәйәси тәрбиәләүҙә ебәрелгән хаталар менән бер рәттән, ҡайһы бер тарихи хеҙмәттәрҙә һәм айырым авторҙарҙың әҙәби әҫәрҙәрендә, атап әйткәндә, «Башҡортостан тарихы буйынса очерктар»ҙа, «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Батырҙар тураһында эпос», «Ҡаһым түрә» әҫәрҙәрендә, башҡорт халҡының тарихы боҙоп күрһәтелеүе, милли азатлыҡ хәрәкәте менән баҫҡынсы яуҙар араһында айырма юҡлығы, башҡорттарҙың татар һәм башҡорт феодалдарынан иҙелеүе етерлек дәрәжәлә сағылдырылмауы билдәләнә.

Был ҡарарҙың яралғыһы ҡайҙан морон төрткән, әлегә әйтеүе ҡыйыныраҡ. Уйланырға, эҙләнергә кәрәк, архивтарҙағы ете йоҙаҡ аҫтындағы документтар, әгәр һаҡланған булһа, киләсәктә мотлаҡ асыҡлыҡ индерер. Тик шуныһы шикләндермәй: утыҙ етенсе йылдар фажиғәһе лә, ҡырҡ бишенсе йылдарҙан һуң илдәге ижади көстәрҙең ҙур төркөмөнә йән тетрәткес яңы һөжүм дә юғарынан ойошторолған хәлдә лә, ҡайһы ғына республикала йә өлкәлә булмаһын, конкрет шәхестәрҙе эҙәрлекләү

урындарҙа ғәмәлгә ашырылған. Репрессияның көйләнгән аяуһыҙ машинаһын әйләндергән ҡара көстәр бар ерҙә лә бер төҫлө. Талантлан, белемленән, аҡыллынан үлеп көнләшеүсе һәләтһеҙ наҙандар, ысын интернационалистарҙың рухи азатлылығын, ихласлығын күрә алмаған, үҙҙәренең ысын йөҙҙәрен йәшерергә мәжбүр булғанға һарыуҙары ҡайнаған шовинистар, шау-шыуҙан файҙаланып, дан-дәрәжә яулап ҡалырға атлығыусылар, ҡулындағы власҡа арҡаланып, кешеләрҙе дер ҡалтырауҙан тәм тапҡан бәндәләр, үҙ йәне өсөн ҡото осҡан ҡурҡаҡтар өйрөлткән ул машина тоткаһын.

1946 йыл ВКП(б) Үҙәк Комитеты тарафынан 14, 26 августа, 4 сентябрҙә бер-бер артлы «Звезда» һәм «Ленинград» журналдары тураһында», «Драма театрҙарының репертуары һәм уны яҡшыртыу тураһында , «Ҙур тормош» кинофильмы тураһында» ҡарарҙар ҡабул ителә. Ҡарарҙарҙа күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса урындарҙа кампания башлана.

19-20 сентябрҙә Өфөлә Башҡортостан союзы идараһы, ВКП(б)-ның ҡала комитеты менән берлектә үткәрелгән яҙыусыларҙың, сәнғәт эшмәкәрҙәренең, журналистарҙың дөйөм йыйылышында башҡорт совет әҙәбиәтендәге хаталар тураһында һөйләшеү ойошторола. Тәнҡиттең төп уғы, билдәле, ҡарарҙа атап әйтелгән әҫәрҙәрҙең авторҙары - М. Буранғоловҡа, Б. Бикбайға йүнәлтелә. Уларҙың сығыштары тыңлаусылар тарафынан бөтөнләй иғтибарға алынмай.

25 октябрҙә Башҡортостан яҙыусылары партия ойошмаһының асыҡ йыйылышында «Жданов иптәштең «Звезда» һәм «Ленинград» журналдары тураһында доклады» буйынса фекер алышыуҙар, башҡорт әҙәбиәтен нисек итеп  М. Буранғолов ижадынан ҡотҡарырға, тигән юҫыҡтараҡ бара.

26 октябрҙә Яҙыусылар союзы идараның киңәйтелгән ултырышында (ҡатнашыусылар - идара рәйесе С. Ҡудаш, сәркәтибе - Ғ. Зөлҡәрнәев, ағзалар - Х. Кәрим, Ғ. Әмири, Р. Ниғмәти, С. Агиш, яҙыусылар Ә. Харисов, Ә. Вәли, С. Кулибай, М. Буранғолов, Б. Бикбай, Ә. Кирәев, Ғ. Ғөзәйеров) М. Буранғолов һәм Б. Бикбай ижадтары махсус ҡарала. Йәнәһе, «бөтә ижади

эшмәкәрлеге осоронда идея яғынан тотанаҡлы бер генә әҫәр ҙә тыуҙыра алмаған, тарихи темаға яҙылған әҫәрҙәре («Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Башҡорт туйы», «Гөлсәсәк» пьесалары), патриархаль-феодаль ҡоролошто идеаллаштырыу һәм милләтселек рухында һуғарылған, башҡорт халҡының телдән ижадын милләтселек йүнәлешендә боҙған («Батырҙар эпосы»), хәҙерге заман темаһына яҙылған әҫәрҙәрендә («Сәрби әбейҙең балалары», «Өлгө» һ.б.) ысынбарлыҡты насарайтып күрһәткән булып сыға халыҡ сәсәне. Ултырышта бер тауыштан Совет яҙыусылар союзының 2 һәм 5 параграфтар нигеҙендә М. Буранғоловты союз ағзалығынан сығарырға һәм БАССР Верховный Советы Президиумына «халыҡ сәсәне» исеменән мәхрүм итеүҙе һорарға тигән ҡарар ҡабул ителә. Б. Бикбай ҡаты иҫкәртелә. СССР Яҙыусылар союзы секретариаты был ҡарарҙы ҡапыл ғына раҫламай, М. Буранғоловҡа яҙыусы исемен эше менән аҡлаһын өсөн, һынау срогы бирә.

Колхоз-совхоз театрҙарына тәғәйенләнгән бер нисә драма ижад итә ошо арала яҙыусы. Тағы ла «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналы редакцияһына, баҫып сығарыуҙы үтенеп, асыҡ хат яҙа. Халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәшенә бәйле фольклор нигеҙендә яҙылған үҙенең «Иҙеүкәй менән Мораҙым» пьесаһында идея-сәйәси хаталар ебәреүенең сәбәптәрен аңлатмаҡсы була автор. Ул үҙе яҙып алған эпосҡа, башҡа материалдарға, эпостың Радлов, Семенов, Ә. Дибаев, шулай уҡ Татарстан һәм Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт институттарында һаҡланған егермеләп варианттарына таяныуын белдерә. Пьесаны яҙған мәлдәрҙә матбуғатта «Иҙеүкәй – халыҡ батыры» тигән идеяны алға һөргән ғалимдарҙың (Л. Зәләй - Красная Татария, 1940, №231, Ә. Усманов - Литературная газета, 1940, №13) мәҡәләләренән өҙөктәр килтереп: «Ана шул материалдар булғас, шуға нигеҙләнеп яҙырға ярай тип таянырға мөмкин булғанмы?» - тип риторик һорау ҡуя.

Драматург эпос сюжетын интерпретациялауҙа үҙенең ғәйебен ҡабартып, хаталарын таныуын ҡат-ҡат ҡабатлап, ышандырырға тырыша. Әммә «яҙып алған материалдарҙың күбеһе иҙеүсе синыф вәкилдәре тарафынан яҙылған булһа, улар Иҙеүкәйҙе ниңә йәберләгән бала булһа ла, халыҡ батыры итеп күрһәтергә тырышырҙар инеме» тигән һорауы менән ул ҡомарткыға

тағылған «феодаль-хан эпосы» тигән атама менән дә, үҙенә өйөлгән гәйеп менән дә килешмәүен иҫбатлай.

Хат баҫылмай.

Халыҡ театрҙарында барған «Шәүрә», «Ысын мөхәббәт» пьесалары 1949 йылдын 6 февралендә булып үткән яҙыусылар йыйылышында репертуарҙарҙан алып ташлатыла. 13 апрелдә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе һәм сәркәтибе (Ә.Харисов, Х. Кәрим) ҡултамғалары менән Мәскәүгә, Яҙыусылар союзының милли комиссия бюроһына, рәсми хат яҙыла. Унда М. Буранғоловтың совет яҙыусыһы исемен аҡламауы, яңы пьесаларының идея йөкмәткеһе боҙоҡ булыуын, өҫтәүенә, үҙ гәйебен ихлас күңелдән танымай, «һынау» срогы бөтөр саҡта журнал редакцияһына хат яҙыуы, «мог ли один я не ошибиться, если историки и литераторы, вооруженные теорией больше, чем я, ошибались в освещении исторического прошлого», тип, ғәйебен башҡалар өҫтөнә япһарырға маташыуы хәбәр ителә һәм уны союзда ҡалдырыу- ҡалдырмау мәсьәләһе яңынан күтәрелә.

М. Буранғолов Яҙыусылар союзынан ҡыуылып, халыҡ сәсәне исеменән мәхрүм ителеп кенә ҡалмай, 1950 йылдың 18 октябрендә суд ҡарары менән мәңгелеккә Себерҙәге Тайшет лагерына оҙатыла.

* * *

Өфөгә алты йылдан һуң ғына әйләнеп ҡайтыу бәхетенә ирешә ул. Рәсми реабилитациялана - 1959 йылдың 30 октябрендә СССР-ҙың Генеральный прокуроры протесы буйынса БАССР Верховный суды Президиумы М. Буранғоловтың эшен яңынан ҡарай. 1960 йыл башында уға сәсән, яҙыусы танытмаһы кайтарыла.

Гражданлыҡ хоҡуғы аяҡҡа баҫтырыла, ләкин ғәмәлдә уның ижади йөҙө, егәрле эшмәкәрлеге үҙ хоҡуғына инәме һуң? Сәсәнгә 75 йәш тулыу айҡанлы кисә уҙғарыла – төп докладсы Кирәй Мәргән тантанаға килмәй, ахырҙа залдан С.Агиш сығып һүҙ ала. Тере сағында юбилейы айҡанлы яҙған «Рәхмәт хаты» нан башҡа бер әҫәре лә баҫылмай, 20-се, 30-сы йылдарҙағы әҙәби процесты байҡаған хеҙмәттәрҙә сәсәндең исеме лә осрамай. Тормош

һәм ижад юлын сағыштырмаса тулыраҡ сағылдырған тәүге мәҡәлә (авторҙары - филология фәндәре кандидаттары И. Бүләков, М. Сәғитов) «Ағиҙел» биттәрендә ни бары бынан ун йыл элек, 1978 йылда донъя күрә. «Башҡорт халыҡ ижады» серияһында сәсәндәр ижадына арналған томда (1982) «Ватан һуғышы», «Рәхмәт хаты» ҡобайырҙары, 8-се класс өсөн әҙәбиәттән уҡыу китабында (төҙөүсеһе Ғ. Хөсәйенов) «Рәхмәт хаты» баҫыла.

Йәмғиәтебеҙҙә үҙгәртеп ҡороу карабы елкәндәрен киргән бер мәлдә лә, М. Буранғолов эшмәкэрлеге тейешенсә бапаланманы эле. Уйлап ҡарайыҡ: мэшһүр «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарынан, Аҡмырҙа менән Ҡобағош, Байыҡ Айҙар, Мәхмүт сәсән әйтештәренән, «Ете ырыу» ҡобайырынан, тарихи йырҙарҙан башҡа халҡыбыҙ фольклорын күҙ алдына килтереү мөмкинме! Ғөмүмән, 18 томлыҡ серияға иң аҫыл ҡомарҡыларҙың байтағы М. Буранғолов ҡәләме аша барып ингән. Томдарҙы төҙөүсе авторҙар республикабыҙҙың әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге юғары премияға лайыҡ булды. Наградланыусылар араһында М. Буранғоловтың да исеме мотлаҡан булырға тейеш ине, минеңсә. Был гәҙел булыр ине!

Ошо урында минең күңелдә әлеге лә баяғы сетерекле һорау яңынан тыуа: ул тиклем хөкөм итерлек ниндәй ғәйептәр өйөлгән һуң Мөхәммәтша Буранғоловҡа? Яуап эҙләп, йәнә үткәндәргә әйләнәм. «Октябрь» журналының 1946 йылгы 11-12-се һандарында «Башҡорт совет әҙәбиәтенең юғары идеялығы өсөн» тип исемләнгән баш мәҡәлә бирелә. Унда М. Буранғоловтың союздан сығарылыуы һәм ижадындағы хаталар хаҡында шаҡтай ентекле хәбәр ителә: …ҡанлы ҡуллы бысраҡ шәхес Иҙеүкәйҙе популярлаштыра... «Башҡорт туйында ырыусылыҡты һәм феодаль ҡоролошто идеаллаштыра».

Ә инде «Батырҙар эпосы»на килгәндә, бында бөтөнләй мәҙәнәһеҙлек: мәҡәлә әтмәләүселәр, М. Буранғолов китапты яҙыусы түгел, ә төҙөүсеһе икәнен күҙгә лә элмәй, эпостарҙың халыҡ ижады емештәре булыуын да онотоп, хатта фальсификацияға тотоналар:

«...М. Буранғол башҡорт халҡының милли азатлыҡ көрәшен рус халҡына ҡарты йүнәлтелгән көрәше итеп яҡтырта, батша самодержавиеһына ҡаршы башҡорт халҡының рус халҡы менән көрәшен буяп күрһәтә..»

«Салауат менән Юлай» эпосында ла Салауат етәкселегендәге хәрәкәтте рустарға ҡаршы көрәш итеп күрһәтә...»

Хәйер, М. Буранғолов баҡсаһына ташланған таштарҙың иң бай «коллекцияһы», уның ижадына ҡарата асыҡтан-асыҡ билдәләмәләр – беҙҙеңсә, шул ук «Октябрь» журналында сыҡҡан К. Мәргәндең «Башҡорт совет драматургияһы торошона ҡарата» мәҡәләһендә.

Башҡорт әҙәбиәтенең үткәненә байҡау ташлап, К. Мәргән йәҙитселек хәрәкәтенә туҡтала, уны ул М. Өмөтбаевтан һуңғы осорҙан алып икегә бүлә: башында М. Ғафури торған революцион-демократик әҙәбиәт һәм буржуаз милләтселәр (былар иҫәбенә репрессияланған бөтә яҙыусылар инә - З.Ш.) тыуҙырған әҙәбиәт. М. Буранғолов ижадын да ул «бына ошо группа тарафынан алға һөрөлгән идеология нигеҙендә башлап киткән кешеләрҙең береһе» тип, икеләнмәйенсә һуңғы төркөмгә индерә. «Дөрөҫ, Буранғолов был группаның актив тарафтары түгел, уның асыҡтан-асыҡ ниндәйҙер ойошмала тороуы, актив политик көрәш алып барыуы ла беҙгә билдәле түгел,- тип дауам итә автор. – Ләкин шуныһы асыҡ: Буранғол ошо ерле милләтселек идеологияһы менән аҙыҡланған хәлдә килеп тыуған драматург». Артабан сәсәнде характерлай торған өс әҫәре - «Ашҡаҙар», «Башҡорт туйы», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» пьесаларының фольклор, этнографияға ҡоролған уртаҡ яғы менән бер рәттән етешһеҙлектәрен дә асып бирергә ынтыла: «Ашҡаҙар»ҙа синфи көрәш юҡ, байы ла хәйерсе, хәйерсеһе лә бай; «Башҡорт туйы»нда социаль көрәш юҡ, енси мөнәсәбәттәр урынлаштыра алмауға нигеҙләнгән ырыу көрәше генә бар; «Иҙеүкәй менән Мораҙым» да - хан ыҙғышы...

Драматургтың әҙәби оҫталығына, сюжет һайлауына ниндәйҙер талаптар ҡуйылһасы! Буранғолов идеологияһының ағыуы, уның фекеренсә, Ҡ. Даян,

Б. Бикбайҙарға ла тамып өлгөргән: «…Таңсулпан» да социаль бәрелештәр бар, ләкин улар бөтәһе лә биологик мөнәсәбәттәр нигеҙендә килеп сыға... «Ҡарлуғас» - ҡыҙ алыш-бирешенә ҡоролған ғауға...

Мәҡәләлә «буржуаз милләтселәр» тип нарыҡланғандарҙың да драматургик йөҙө шаҡтай тулы кәүҙәләндерелә. «Ватан каһармандары», «Салауат», «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», «Ҡарағол» һ.б. шундай пьесаларҙа үҙәк урынды, автор раҫлауынса, башҡорт халҡын артҡа, патриархаль тормошҡа саҡырыу алып тора, сөнки, тип дәлилләнә артабан, «улар һөйрәп килгән идеология башҡорт халҡын изоляциялауҙы, башҡа халыҡтарҙан өҫтөн бер раса яһауҙы маҡсат итеп ҡуя».

Һуңғы фраза нығырак уйландыра. Ни өсөн башҡорт халҡының үткән тарихына мөрәжәғәт итеү, ысынбарлыҡҡа мәғлүм факттарҙы барлау, билдәһеҙҙәрен табырға, айышына төшөнөргә ынтылыу бынан илле йыл элек тә, йәшерен-батырыны юҡ, хәҙерге көндә лә ҡайһы берәүҙәрҙә оло ризаһыҙлыҡ тыуҙыра һәм тик «башҡорт милләтселеге» тигән мөһөр баҫыла? Дөрөҫ, хәҙерге ғәйепләүҙәр асыҡтан-асыҡ түгел, ә заманса терминдарға төрөлөп, яңы концепцияларға үрелеп бирелә: әгәр элек «патриархаль тормошто идеаллаштырыу, башҡорт халҡын артҡа, феодаль ханлыҡҡа саҡырыу» тип әйтелһә, хәҙер «башҡорт халҡының тарихын боронғораҡ итеү, халыҡта булмағанды шәп итеп, фәстереп күрһәтергә ынтылыу» рәүешендәрәк яңғырай.

Буранғолов мәсьәләһенә килгәндә – хәҙерге беребеҙ ҙә уға шаһит түгелбеҙ – беҙҙең ҡарамаҡҡа тик боронғо яҙма сығанаҡтар ҡала. Ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн Фадлан (X б.) үҙенең сәйәхәтнамәһендә «башҡорт иле», атаҡлы ғалим М. Ҡашғари (XI б.) һүҙлегендә «башҡорт ҡәбиләләре», тарихсы Идриси (XII б.) үҙенең картаһында «башҡорт ерҙәре» тип теркәп ҡалдырған икән, нишләп беҙ уларҙың башҡа халыҡтарға ҡараған мәғлүмәттәрен фәнни яҡтан хатта шиккә лә алмайбыҙ, ә башҡортҡа ҡағылғанын уйҙырма, әҙәби образ сифатында ҡабул итергә тейешбеҙ? Шулай булғас, тәғәйен территориялы, этник атамаһы, аралашырға үҙ теле булған меңйыллыҡ тарихлы халыҡты беҙ, теләһәк тә, теләмәһәк тә,

боронғолар рәтенә индерергә, уның тарихы һәм культураһы хаҡында ошо юҫыҡта фекер йөрөтөргә бурыслыбыҙ. Халыҡтың боронғолоғон таныу һис кенә лә «ул ваҡытта ер йөҙөндә тик башҡорттар ғына йәшәгән», тип лаф ороп, башҡаларға кәмһетеп ҡарау, йә иһә, боронғолоҡҡа һылтанып, ҡояш аҫтында йылыраҡ урынға, махсус шарттарға дәғүә итеү түгел бит. Йә иһә бөгөнгө быуындың, боронғо ата-бабаларыбыҙ беҙгә мәрмәр һарайҙар, биҙәкле мавзолейҙар мираҫ итмәгән, бик булмаһа биләмә сиктәрен бейек ҡойма менән уратып, ҡәлғә-крепостар төҙөп ҡалдырмаған, һис юғында мөһәбәт курган өйөп, ҡашығаяҡтары менән бергә «бында башҡорт ята» тигән яҙыулы алтын пластинка күмеп ҡалдырырға ла баштарына килмәгән, тип үпкәләргә, ғәйепләргә хаҡы бармы?

Быуаттар һуҙымында күпме яуҙар, тетрәүҙәр, ҡырылыш, афәттәр үткәреп, күпме ҡәбилә менән аралашып, ҡушылып, берегеп бөткән хәлдә лә этник булмыш, милли тарих, культура-традициялары ла һаҡланып килә - был халыҡтың рухи көсөнөң кимәлен күрһәтмәйме ни! Әйткәндәй, М. Ҡашғари һанап киткән тиҫтәләгән төрки телдәрҙән бары алты тел, шул иҫәптән башҡорт теле, үҙенең атамаһын һәм асылын бөгөнгә тиклем юғалтмаған.

Әлеге көндә, туған тел онотолоп, милли һыҙаттар юҡҡа сыға барған мәлдә, башҡорттарҙа элек ниҙәр булмағанын асыҡларға тырышҡан булып фәлсәфәләр ойоштороғансы, мең йыл буйына халыҡты халыҡ итеп тотҡан факторҙарҙы, уларҙың күсәгилешлек принциптарын һәм механизмын өйрәнергә ваҡыттыр. Рухи тәжрибәне быуындан-быуынға тапшырыу механизмы бер-береһенә беркетелгән өс ҡулса һымаҡ күҙ алдына килә: ижадсы, унан отоп алып башҡарыусы, бүтәндәргә таратыусы. Өсөһө лә берҙәй мөһим. Ҡулсаның береһе генә төшөп ҡалһын - тарихи күсәгилешлек, быуындар бәйләнеше өҙөлә.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын һыу кеүек эскән, уны тейешенсә баһалай белгән, һүҙ бәҫен нескә тойған, үҙе лә сәсән-шағир Мөхәммәтша Буранғолов ҡарамаҡҡа ябай ғына, тышҡы героикаһыҙ ғына хеҙмәте менән үткәндәрҙе бөгөнгә тоташтыра, бөгөнгөнән киләсәккә күпер һала. «Аҫар»

китабын яҙыу процесында регионда йәшәүсе күп шәхестәрҙең эшен һәлмәкләп тәжрибә туплаған Риза Фәхретдинов «Башҡорт халҡының тарихын ҡәбергә индермәй килеүсе шундай кешеләр генә буласаҡ» тип әйткәндә, Мөхәммәтшаға бары егерме йәш кенә була. Йөрәк ҡушыуы буйынса ул арымай-талмай рухи гәүһәрҙәребеҙҙе йыйып тарихҡа яҙып ҡалдыра, һәм уның үҙенең дә яҙмышы халыҡ тарихының матур сәхифәһенә әүерелә бара. Шәхес өсөн бәхет шул түгелме ни!

Тарих һәм шәхес... Ошо йәһәттән ҡараш ташлаһаң, сталинщина катаклизмының һөҙөмтәләре тағы ла ҡурҡынысыраҡ булып кәүҙәләнә. Талантлы яҙыусыларыбыҙҙан, ғалимдарыбыҙҙан, сәнғәт эшмәкәрҙәребеҙҙән - айырым шәхестәрҙән генә мәхрүм булмағанбыҙ беҙ. Улар йөҙөндә милли культурабыҙҙың быуаттар һуҙымында ҡәҙерләп тапшырыла килер сәсәнлек традициялары һымаҡ ҙур-ҙур күренештәрен, аҫыл биҙәктәрен юғалтҡанбыҙ.

Хәҙер бына халыҡты беректерер, «ил тигәндә ни яман» тип, хаталарыбыҙҙың айышына төшөндөрөр, яңы үҫеш баҫҡыстарына әйҙәр трибун-сәсәндәр заманы килде - тик ҡайҙа улар? Индивидуаль оҫталыҡ мәктәптәре һуңғы сәсәәндәр менән юкка сыҡҡан, хатта хәҙер баҫмаларҙа күбәйтелгән эпос, ҡобайырҙарҙан тулыһынса эстетик ләззәт ала алмайбыҙ. Хәҙер беҙ уларҙың тексын уҡыйбыҙ ғына, ә бит улар моноспектакль рәүешендә башҡарылған тамаша булған. Ғәбит ҡурайсы ише «илар ерҙә илап, көлөр ерҙә көлөп» күрһәтерлек башҡарыусы ла, башҡарыу тәртибен аңлатырлыҡ кешеләр ҙә юҡ тиерлек.

Драма театры артистарының «Совет Башҡортостаны» биттәрендә яҙыуынса, «Аҫылйәр», «Зәңгәр шәл» ише сәхнә әҫәрҙәре һаман да халыҡ ихтыяжынан китмәгән - элеккене генә түгел, хәҙерге тормошто сағылдырған, уйын-көлкө, юморға бай музыкаль-этнографик пьесалар ҡайҙа? «Ынйыҡай менән Юлдыҡай», «Ашҡаҙар» ҙар юҡҡа сығарылған заманда халыҡ тамашаларын ижад итеүҙең тамырына ла балта сабылған. Кем белә, хәҙерге көндә хатта милли опералар ҡуйылғанда залда тамашасы бармаҡ менән генә һанарлыҡ була икән - ғилләһе ошо яманаты сыҡҡан этнографик, көнкүреш,

музыкаль драмаларҙың традицияһын онотоуҙа, уларҙы иҫәпкә алып еткермәүҙә түгелме икән?

Ваҡыт толпарында халыҡтың тарихын, культураһын ҡәҙерләп үҫтерер заман елә - ҡайҙа беҙҙең эрудициялы, халыҡтың киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойоп янып йөрөгән яҙыусылар, ғалимдар, рәссамдар, музыканттар, уҡытыусылар? Уларҙың да сафы һирәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, милләтсе даны йәбештереүҙән өркөп, күптәре С. Айтматов һынландырған «милли нигилистар» ҡабығына кейенгән. Әсә телен, халыҡтың әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләрен һанға һуҡмаған, хатта милли теленән баш тартыуға яҡынлашҡан тотош бер быуын тәрбиәләнгән. Рухи манҡортлоҡ башланған.

Былар барыһы ла, минеңсә, утыҙ етенең ҡайлы шаңдағы. Уның һөҙөмтәләрен ентекле һәм бөтә тулылығында өйрәнеү һәм киләсәктә ҡабатланмаҫлыҡ шарттар тыуҙырыу – беҙҙең иңдә.

Һүҙҙе табуҙан башлағайным. Ҡайһылай ҙа ҡатлы-ҡатлы мәғәнәле булып сыҡты «табу». Башҡорттағы «табыныу» һүҙенә ныҡ оҡшаш, хатта логик яҡтан да бәйләнеш бар кеүек. Тәүҙә табунан ҡурҡалар - ҡурҡалар ҙа, ҡурҡыштарынан, табына башлайҙар. Оҙон-оҙаҡ табына башлайҙар. Оҙон-оҙаҡ табына торғас, табуҙы изгелэштерәләр. Шунан изге тип табынырға тотоналар, яҡшылыҡ, миһырбанлыҡ өмөт итәләр. Парадокс. Ҡурҡып изгеләштереү. Аҡылға һыйҙырыуы ҡыйын - әммә Сталин шәхесе беҙҙен анда ошондай изгеләштереү трансформацияһын кисермәнеме ни? Бына килеп, уның изгелектән алыҫ торғаны асыҡлана...

Алдымда ятҡан һуңғы ҡобайырын ҡабаттан уҡығас, был әсе хәҡиҡәтте Мөхәммәтша Буранғолов сәсән зирәклеге менән үҙе өсөн асып, үҙенсә баһа биреп, үҙ хөкөмөн сығарып киткәндер, тигән фекергә киләм. 75 йыллыҡ юбилейы көндәрендә ижад иткән һәм беҙҙең өсөн таныш булған «Рәхмәт хаты» ның тәүге варианты ла яҙылған булған икән. Ул архивҡа яңы тапшырылған материалдары араһынан килеп сыҡты.

Иҫкә алды мине ил,<br>Исем бирҙе мңә ил.

Халыҡ сәсәне, тине ил.
Хөрмәткә ҡарап рәхмәтте
Кемгә төбәп әйтәйем?
Илгәме рәхмәт әйтәйем,
Иргәме рәхмәт әйтәйем?
Ил эйәртеп яу сапҡан
Салауаттың да атаһы;
Ил бәхетен яулаған
Шәһиттең дә атаһы;
Ил теләген яулаған
Баһауҙың да атаһы;
Ҡара болоттай дошманды
Арыҫландай быуҙыҡ беҙ, тигән
Күсимовтың да атаһы,
Үтәғолдоң да атаһы –
Данлы Башҡортостаным.
Хөрмәткә  ҡаршы рәхмәтте
Һиңәме төбәп әйтәйем?
Ҡашҡа иргә төбәһәм,
Ир тиһәм дә ил булыр,
Ир тиһәм дә ил булыр,
Ил булмаһа, ир тыумаҫ,
Ирҙәр – илдең табышы.
Ир тыумаһа, ил булмаҫ,
Ил – ирҙәрҙең намыҫы.
Хөрмәткә ҡарты рәхмәтте
Һиңәме төбәп әйтәйем,
Бөйөк маршал Сталин?

Эйе, хөкөмдө үҙенсә сығарған сәсән Буранғолов: рәхмәт һүҙен ул Сталинға түгел, ә «Рәхмәт һүҙе» нең өр-яңы тексын яҙып, Тыуған илгә, ленинсы партияға төбәй.

Оло яҙмыш... Оло ғүмер... Сәсән үҙенең граждандлыҡ тәүәкәллеген бына ошолай яһай.

**5. Хәмиҙуллина, Мәҙинә. Халыҡ сәсәне: Имеш-мимештәр һәм ысынбарлыҡ [Текст] // Буранғолов Мөхәммәтша. Һайланма әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. – Б. 452 - 456.**

...Буранғоловтар борон-борондан балаларҙы ғаиләлә тәрбиәләү мәсьәләһенә ҙур әһәмиәт биреп, аталар уландарына үҙҙәре белгәнде бишектән үк һеңдерә килгән. Мөхәммәтша, мәҫәлән, мәҙрәсәгә төшмәҫ борон уҡ урыҫ, ғәрәп, төрки телдәрен апаруҡ һупалаған, «дәүләт», «ил-йорт», «аҫабалыҡ», «ер», «урындағы власть» кеүек һүҙҙәрҙе ишетеп ғәҙәтләнгән, иң мөһиме - үҙ нәҫеле һәм ғаиләһе миҫалында шул төшөнсәләр артында торған хәл-әхүәлдәрҙе күҙаллап үҫкән. Ошо уңайҙан балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең предметлы фекер йөрөтөүен дә иҫтән сығармайык. «Олуғ аталар» ының Тубыл, Иртыш йылғалары буйында донъя көткән еренән башта Миәс яғына ҡыҫырыҡланып, юҡтан Абзан ауылын бар итһен дә, тора-бара ул да туҙҙырылып, Дим буйына, Асылыкул тирәһенә һыйынып, бында бер быуын йәшәгәндән һуң, Туҡ-Соранға күсенһә, шулар хаҡында белмәҫ ереңдән белерһең, уйланмаҫ ереңдән уйланырһың. Үҙҙәре тархандар тоҡомонан булып, ошонда тамырланыр өсөн Мәскәү батшаларына барып етеүҙәрен һәм, шуға өҫтәп, Ғәлиәхмәт олатаһы - йортауай писарь, Абдрахман атаһының волость старшинаһы кимәлендәге дәүләт эшмәкәре булыуҙарын да иҫәпкә алһаң, быға гәжәпләнер урын юҡ. Уларҙың ғаиләһе, һис шикһеҙ, башҡаларҙан күпкә мәғлүмәтле һәм әҙерлекле булған. «Мәғлүмәтле булыу – власҡа эйә булыу» тигән афоризм, моғайын, бөгөн генә тыумағандыр.

Мөхәммәтша Буранғолдоң тыуған ауылы тотошлайы менән Аҡынсыҡ түбәһенән торған. Аҡынсыҡтың бер улы Тынҡай булған - ана шуның тоҡомдары Үрге, Урта, Түбән Ильяс ауылдарына нигеҙ һалғандар ҙа инде.

Аҡынсыҡтың икенсе улы - Имел, Имелдең улы – Буранғол. Мәшһүр сәсәнебеҙҙең исем-шәрифе - ошо заттан. Ырымбур губернаһындағы Имел

волосы (1850 йылдан - Һамар) уның исемен йөрөткәнгә оҡшай (быға тулы асыҡлыҡ индерер өсөн Уральск архивтарында ҡаҙынырға кәрәк, әммә бөгөнгө етешһеҙлек был мөмкинлекте әлегә сикләй). Ундағы Хәсән ауылы - Һәҙиә Дәүләтшинаның тыуған төйәге, һәм ул ябай ауыл булмаған - унда оҙаҡ йылдар волость старшинаһы Янғол Йомағолов йәшәгән. Ул - Зәки Вәлиди менән бер -ҡатарҙан беренсе башҡорт автономияһын яулаусы Харис Йомағоловтың бер туған ағаһы, 1917 йылдың июленән башҡорт ҡатын - ҡыҙҙар хәрәкәтен башлап ебәреүсе Рабиға Йомағолова - Ҡушаеваның атаһы. Ут күршеһе указлы мулла Лотфулла Ильясов иртә донъя ҡуйғас, Янғол Йомағолов уның йәтим -ҡалған Һәҙиә ҡыҙын үҙ ҡанаты аҫтына алған - Һамарҙан көслө урыҫ уҡытыусылары саҡырып, үҙенең ишле балалары ыңғайына Һәҙиәгә лә үҙ өйөндә һабаҡ һәм тәрбиә бирҙерткән. Ҡыҙ үҙ сиратында белә-үҙләштерә барғанын 14 йәшенән үк ауылдағы башҡа балаларға еткергән...

Беренсе быуын башҡорт яҙыусыларының коллектив портретына йәнә бер штрих: Һәҙиә Дәүләтшина менән Рабиға Йомағолова көндәлек тормошта айырылмаҫ әхирәттәр, бер осор хеҙмәттәштәр ҙә булғандар: Һәҙиә, Рабиға һәм Зәки Вәлидиҙең сараһыҙҙан тыуған илдә ҡалған тәүге йәмәғәте Нәфисә Яҡшымбәтова Өфөлә Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге балалар йортонда бергә эшләгәндәр. Был хәл, күрәһең, Мөхәммәтша Буранғол күҙенә лә эләккәндер. Ни өсөн тигәндә, 1950 йылда органдар уның йортонда тентеү үткәреп, байтаҡ яҙыуҙарын алып китеп аҡтарғанда, Нәфисәнең адресы ла килеп сыҡҡан. Быының өсөн М. Буранғоловтың башынан һыйпамағандары көн кеүек асыҡ. Буранғол йортонда Вәлидиҙең фотоһүрәтен шашынып эҙләүҙәре лә тиктәҫтән түгел, әлбиттә. «Өләсәйем уның фотоһын яндырып өлгөргәйне», - тип хәтерләй Ирек Буранғолов...

Йыйып әйткәндә, нигеҙҙә, үҙенең, ҡул һәм аҡыл көсөнә йәшәгән Абдрахман Буранғолов та оҙаҡ йылдар волость старшинаһы булған. Башҡорт АССР-ы Дәүләт именлеге архивында һаҡланған М. Буранғол «дело»һын тулы килеш ҡулымда тотоп танышырға насип булды миңә. Шул мәлдә, үҙ - үҙемә ышанмайынса, түбәндәге юлдарҙы ҡат - ҡат уҡыным:

«Что касается службы отца старшиной волости, то должен сказать следующее: он действительно был избран обществом на должность волостного старшины и прослужил месяца 2 - 3, а не 10 лет, как указывается в справке сельсовета. Шесть лет просидел в Петропавловской крепости за участие в беспорядках при разделе земли. Поэтому земский начальник или губернатор не утвердил его в должности старшины». ДИК рәйесе 1991 йылда күсермә әҙерләгәндә яҙма рәүештә «бындағы мәғлүмәттәр яңынан тикшерелмәгән, һәм файҙаланған осраҡта быны иҫәпкә алыу зарур» тип иҫкәртеүҙе кәрәк тапҡан. М. Хәмиҙуллина, хужалыҡта үҙенең техникаһын киң ҡулланған, өс ҡатынлы Янғол Йомағолов та балаларын йорттарында тәрбиә ҡылған икән, бының սараһыҙҙың көнөнән эшләнгәнен әйтмәй булмай. Сөнки башҡорттар урыҫтар ыңғайына дәүләт ҡазнаһына яһаҡ - һалым түләй килһә лә, үҙҙәренең уҡыу йорттарында унан һуҡыр бер тин алмаған. Улай ғына ла түгел, урыҫтарға бүлгән кеүек, аҡса бүлеүҙе талап итеүселәр Жандармдар идаралығы тарафынан ҡара исемлеккә индерелгән һәм күҙәтеү аҫтына алынған, ҡайһы бер осраҡта ғәмәли саралар ҙа күрелгән...

Ошондай шарттарҙа Абдрахман Буранғолов менән Янғол Йомағолов ни эшләй алған? Ҡулдарынан ни килһә, - шуны. Тәүгеһендә дүрт улан үҫкән – береһенән - береһе уҡымышлы, теше - тырнағы менән эшкә йәбешеп ятыр бәһлеүәндәр, аталары һымаҡ ғорурҙар. «Ауылдаштарынан берәү Абдрахман ҡартатайыма, уның өҫтөндәге тунға ымлап, бүләк иткән һыйырым тиреһенән бит был, тип төрттөргән икән, ҡартатайым, ул тиренән бына нимә сыҡты, тигән дә, алғы яғының яртыһын йыртып алып, тегеңә тотторған», - тип һөйләй Луиза Лотфуллина-Фазылова, ейәнсәрҙәренең береһе. Уға был хаҡта әсәһе Нәккәр, Нәккәргә уның әсәһе Зәйнәп Буранғолова - Баҡаева, йәғни Мөхәммәтша Буранғолдоң йәмәғәте һөйләгән булған. Алма ағасынан алыҫ төшмәгән шикелле, Мөхәммәтша ла тас атаһы булған.

Буранғоловтарҙың ере лә, мал - тыуары ла башҡаларҙыҡынан артыҡ йәки кәм булмаған. Шул уҡ ваҡытта, быуын-быуын дәүләт эшендә

йөрөгәнлектән, хоҡуҡи, иҡтисади, сәйәси һ. б. йәһәттән тирә-йүндәгеләрҙән күпкә хәбәрҙар һәм әҙерлекле булыуҙары хаҡында әйтелгәйне инде. Үтер йылдар, дәүләт ҡоролошо үҙгәреп, яңы режим урынлашҡас, Мөхәммәтша Буранғолдоң ситтән тороп булһа ла педагогия институты менән бер ҡатарҙан хоҡуҡ институтын да тамамлауы күп нәмә тураһында һөйләй.

Икенсенән, туғанлыҡ, ғаилә тойғоһо ла көслө булған уларҙа. 1900 йылда ата - әсәләре бер - бер артлы донъя ҡуйғас, үҙе ун балалы Сәғәҙи, мәҫәлән, ата нигеҙен ҡоротмаҫҡа тырышҡан. Ике бала атаһы булып өлгөргән Дәүләтша – иң ҡыҫҡа ғүмерлеһе - кулак сифатында Ҡаҙағстанға һөрөлгән, һәм һөйәктәре шунда ятып ҡалған. Әммә уның улы Мөҡип, Мөхәммәтша ағаһының хәл өҫтөндә ятҡанын ишетеү менән уҡ, бәхилләшергә Өфөгә килеп еткән. Бәҙри агаһы 12-һе менән барған Мөхәммәтшаны ҡулдан килгәнсә матди, рухи йәһәттән аяҡҡа баҫтырыу бурысын үҙ өҫтөнә алған һәм 1926 йылға тиклем, алты бала атаһы булғансы, гел бергә күсенеп йөрөгән. Бәҙри улы Миниәхмәт, Мөхәммәтша ағаһын атаһы һымаҡ күреп, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Харбиндан хат аша хәбәрләшеп торған.

Мөхәммәтша үҙе әллә нисә тапҡыр ҡулға алынған һәм башы ғүмер баҡый нахаҡ ғәйептән сыҡмаған...

Өсөнсө фажиғәһе 1956 йылда, 68 йәшендә Тайшеттан ҡайтҡас, башланып, ул үлгәнсе, йәнә 10 йыл буйы, дауам иткән. Дөрөҫ, 60-ың менэн 70-ең араһында һөргөнгә һөрөлөп, шунан иҫән ҡотолоуың һәр кемдең өлөшөнә төшкән бәхет түгел. Быңдай хәл бер генә осраҡта, - Хоҙай биргән һаулығың булып, үҙеңдең хаҡлығыңа ныҡ ышанһаң, шуға ла бер ниндәй ауырлыҡ һәм ҡаршылыҡ алдында ҡаушамаһаң ғына – мөмкиндер. Мөхәммәтша Буранғол – тәбиғәте менән нәҡ шундай шәхес.

Ҡасандыр дәү, мөһабәт был зат хәҙер тауыҡ кетәгендәй бүлмәгә иҫке фуфайкала, ныҡ сүккән ҡарт ҡиәфәтендә килеп ингәс, ҡарсығы уны танымаған хатта.

Элекке фатиры менән бергә бай шәхси китапханаһы, затлы йорт йыһаздары ҡала районы прокурорында ҡалып, туҙҙырылып бөтөлгән икән. Ләкин нисек кенә булмаһын, донъя малы – дуңғыҙ ҡаны, бөгөн бар – иртәгә юҡ, иң ҡәҙерлеһе – иҫәнлегем, үҙ тупрағыма тулы хоҡуҡлы граж-дан булараҡ ҡайтыуым тип, дәртләнеп йәшәгән башта. Ысынлап та, төрлө ҡаршылыҡтарға осрай-осрай, үҙенең граждандыҡ хоҡуҡтарын, Яҙыусылар союзында һәм Әҙәби фондта ағзалығын яңынан ҡайтарған, 4 йыл тигәндә фатирлы ла булған. Тик бер генә моратына ирешә алмаған ул - союз тормошона яҡын юлатмағандар, әҫәрҙәрен баҫмағандар.

Үҙенең ижад фажиғәһенең серен аңлағанмы ул, тигән һорау тыуа. Икеләнмәйенсә әйтә алабыҙ: нисек әле аңлаған! Башҡорт АССР-ы Верховный суды, унан һуң Рәсәй Федерацияһыныҡы ла уның мәсьәләһен кире ҡаҡҡас, ул юғалып ҡалмаған - КПСС Үҙәк Комитетының беренсе секретары, бер үк ваҡытта СССР Министрҙар Советы рәйесе Н. С. Хрущевҡа (иғтибар итегеҙ: СССР Юғары Советына, йәғни декоратив органға түгел) мөрәжәғәт иткән һәм өс йыл тигәндә үҙенең хоҡуҡтарын барыбер ҡайтарған.



М.Буранғолов (артта уңдан 3-сө) бер төркөм туғандары. Ғөбәй һәм Һәҙиә Дәүләтшиндар (артта уңдан 2-се һәм уртала уңдан 2-се) менән. 1920 йыл

Ижад өлкәһендәге аҡланырға ынтылышы улай уҡ уңышлы барып сыҡмаған. Буранғол тора – бара ул хоҡуҡтарҙың ҡағыҙҙға ғына

ҡайтарылыуын да төшөнгән. Быға тамам ышаныр өсөн башта Үҙәк Комитет ағзаһы Михаил Сусловҡа, аҙаҡ Өлкә комитеттың секретары Зыя Нуриевҡа мөрәжәғәт итмәйенсә булдыра алмаған. Тәүгеһе уның мәсьәләһен Өфөгә Таһир Ахунйәнов ҡарамағына ҡайтарған булһа, икенсеһе яуап биреп тә тормаған.

**6. Шәкүр, Рәшит. Мөхәмәтша Буранғол [Текст] / Р. Шәкүр әҙерләне // Йәшлек. - 2001. - 8 февраль. - Б. 3.**

• Мөхәмәтша Абдрахман улы Буранғолов 1888 йылдың 15 декабрендә элекке Һамар губернаһының Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран - Табын улусы (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы) Үрге Ильяс (Тәңес) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1900 йылда үкһеҙ етем ҡалып, ағалары тәрбиәһендә үҫә.



• 1901 йылда - Иҫке Юлдаш земство мәктәбен тамамлай һәм Сәйет биҫтәһендәге Ҡарғалы мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. Бер үк ваҡытта, 1903, 1904, 1905, 1906 йылдарҙын йәйендә, Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өйәҙендәге ҡаҙак ауылдарында балалар уҡыта. 1907, 1908 йылдарҙа тәржемәсе сифатында башҡорттар араһында халыҡ һанын алыу эштәрендә ҡатнаша.

• 1909, 1911 йылдарҙын йәйендә йәнә ҡаҙаҡтар араһында мөғәллимлек итеү менән шөғөлләнә, ҡыштарын Ырымбурҙың «Хөсәйениә» мәҙрәсәһендә уҡый.

• 1910 йылда халыҡ сәсәндәре Ғәбит Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтовтан башҡорттарҙың бөйөк «Урал батыр» эпосын яҙып ала.

• 1912 - 1916 йылдарҙа - Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ҡайыпҡол ауылында уҡытыусы.

• 1916 - 1917 йылдарҙа Быҙаулыҡ өйәҙ халыҡ мәғарифы бүлегенең милли мәктәптәр инспекторы вазифаһын атҡара. 1917 йылдың декабренән алып 1919 йылдың февраленә тиклем М. Буранғолов – Туҡ - Соран кантоны халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире, артабан, 1920 йылдың декабренә ҡәҙәр, Туҡ-Соран кантоны башҡарма комитетының рәйесе була.

• 1921 - 1924 йылдарҙа тыуған ауылы Үрге Ильяста балалар уҡыта. 1924-1937 йылдарҙа Башҡортостандың төрлө мәктәптәр һәм техникумдарында башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡыта.

• 1938 йылда Өфөгә килеп урынлаша һәм күп йылдар буйы Башҡортостан Тел һәм әҙәбиәт (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт) ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр, бер аҙ ваҡыт Башҡорт дәүләт драма театрында әҙәби консультант булып эшләй.

• 1940 йылда СССР Яҙыусылар союзына ағза итеп алына, 1944 йылда уға Башҡортостандың халыҡ сәсәне тигән юғары исем бирелә.

• Мөхәмәтша Буранғолов совет власы йылдарында күп тапҡырҙар нахаҡҡа иркенән мәхрүм ителә. Иң элек 1918 йылда, Ҡазанда үткәрелгән Бөтөн Рәсәй педагогия йыйынында ҡатнашҡан өсөн аҡтар тарафынан ҡулға алынып, хибестә ултырып сыҡһа, артабан, вәлидовсылыҡта һәм милләтселектә ғәйепләнеп, 1920, 1929, 1937 йылдарҙа йәнә өс тапҡыр төрмәлә ултырып сыға. 1950 йылда халыҡ сәсәне исеменән мәхрүм ителә. Яҙыусылар союзы ағзалығынан сығарылып, 10 йылға холоҡ теҙәтеү лагерына оҙатыла. 1956 йылда иреккә сығарыла, 1959 йылдың 31 октябрендә Яҙыусылар союзында ағзалығы һәм халыҡ сәсәне исеме кире ҡайтарыла.

• М. А. Буранғолов 1966 йылдың 9 мартында Өфө ҡалаһында 78-се йәшендә донъя ҡуя.

Мөхәмәтша Буранғол XX быуат башҡорт рухи доньяһында иң күренекле, үҙәк урында торған шәхестәрҙең береһе. Фәндә һәм әҙәбиәттә ул арҙаҡлы фольклорсы, драматург һәм сәсән-шағир булараҡ киң танылыу таба.

Арҙаҡлы һүҙ оҫталары - сәсәндәр менән осрашып, уларҙың тормошо һәм ижады хаҡында киммәтле мәғлүмәттәрҙе теркәп ҡуя. Уҙған

быуаттарҙағы башҡорт сәсәндәренең ижадына һәм биографияһына ҡараған бик күп материалдар фәҡәт уның хәстәрлеге арҡаһында һаҡланып ҡалған. Был йәһәттән М. Буранғолдоң ҡульяҙма мираҫындағы «Башҡорт халыҡ поэзияһы», «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәттәре, халыҡ йырҙары йыйынтыҡтары ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Ә инде уның донья халыҡтары фольклорында һәм мифологияһында ҡабатланмаҫ урында торған «Урал батыр» эпик ҡобайырын яҙып алыуы ысын мәғәнәһендә ижади ҡаһарманлыҡҡа тиң.

XX быуат башҡорт драматургияһы үҫешендә М. Буранғол ижады тотош бер осорҙо билдәләй. Әҙиптең ижади мираҫында «Ҡараһаҡал» (1930 - 1939) драмаһы, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» трагедияһы (1940 - 1943) мөһим урында тора. Уның күпселек драма әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының героик тарихы, көнкүреше, йола һәм традициялары үҙенсәлекле сағылыш таба. Уның йәнә «Зәңгәр шәл» (1918), «Буранбай» (1920), «Тәфтиләү» (1921), «Алпамыша» (1922) «Сәлим-кантун» (1923), «Ялан – Йәркәй» (1923-1926), «Ҡара юрға» (1924),«Әбйәлилдәр шайкаһы» (1936-1939), «Гөлсәсәк» (1939), «Таштуғай» (1939-1959) һ.б. пьесалары булған. Дөйөм алғанда, ул утыҙҙан артыҡ сәхнә әҫәре, шул иҫәптән тәүге башҡорт опералары өсөн либреттолар («Мәргән», 1939), «Туҡтар менән Гөлнур», (1944-1947) ижад итә. Үкенескә күра, өҙиптең драматургия мираҫы беҙгә тулы көйөнсә килеп етмагән.

1942 йылда М. Буранғолдоң башҡорт халҡының хәрби традицияларын данлаған патриотик рухлы «Ватан һуғышы» ҡобайыры айырым китап булараҡ нәшер ителде. Ижадының башланғыс осоронан уҡ ул шулай уҡ публицистика менән дә шөғөлләнә.

Яҙыусының шәхси архивында йәнә проза әҫәре - «Сәлимә» исемле повесы һаҡланып ҡалған.

Күренекле әҙиптең үҙе иҫән саҡта ни бары өс кенә китабы донъя күрә. Ниһәйәт, 1994 һәм 1995 йылдарҙа уның һайланма әҫәрҙәре «Таштуғай» һәм «Сәсән аманаты» тигән айырым томдар итеп баҫып сығарылды.

7. **Әбдрәхимов, Т. Ул рухи хазиналар йыйҙы [Текст] / Т. Әдрәхимов, А.Яворский фотолары**
**// Октябрь юлы. - 1998. - 23 декабрь. - Б. 3.**

Ул 110 йыл элек хәҙерге Ырымбур өлкәһе Красногвардейск районының Үрге Ильяс ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 9 йәшендә - атайһыҙ, 12 йәшендә әсәйһеҙ ҡалған. Таҙа, һәләтле һәм маҡсатҡа ынтылыусан егет заманына күрә һәйбәт белем ала, Ҡарғалыла - мәҙрәсә, ә 1911 йылда Ырымбурҙағы киң танылған «Хөсәиниә» мәҙрәсәһен тамамлаған. Дини белемдән тыш, ул Өфө педагогия институтының әҙәби бүлегендә донъяуи белем ала, шунан тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй.

Тик талант һәм белем генә кешене бөйөк итә алмай, быға кеше өсөн, үҙ халҡы өсөн дөрләп янған йөрәк кәрәк. М. Буранғолов йәшләй ҡәләм тирбәтеп ҡарай, шулай уҡ халыҡ рухы хазиналарын, туған халҡының әйтемдәрен, мәҡәлдәрен, легендаларын, риүәйәттәрен һәм эпосын йыйыу менән мөкиббән шөғөлләнә. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Алпамыша» кеүек күренекле халыҡ ижады ҡомартҡыларын башҡорт халҡы өсөн генә түгел, бар кешелек өсөн тап ул һаклап алып ҡалды.

Был йәһәттән Буранғоловтың исеме рус халыҡ әкиәттәрен йыйыусы А. Н. Афанасьев, карел-фин эпосы «Калевала»ны ижад итеусе Элиас Леннорт, ҡырғыҙ «Манас»ы авторы Сағымбай Оразбәков кеүек фольклорсылар менән сағыштырырлыҡ.

1924 - 1938 йылдарҙа М. Буранғолов Мәләүез ерендә, шуның һигеҙ йылын Түләк ауылында йәшәй, һуңынан йортон Мәләүез ауылына (Смоленск урамы, 2) күсерә. Йорт хәҙер ҙә шул урында. Буранғоловтарҙың ғаиләһе ауыр шарттарҙа йәшәй, ә хужаның фольклор «походтары» сығым талап итә. Улы Нәжип иҫләүенсә, 1926 йылда Мөхәммәтша ағай, ҡатыны

ҡаршы булыуға ҡарамаҫтан, берҙән-бер танаһын Мәләүез баҙарында


Мохәммәтша Буранғоловтың Мәләүездә йәшәгән йорты

һатып, Башҡортостандың төпкөл ауылдарына фольклор йыйырға сығып

китә. Бәхеттән, ғаиләлә ниндәй шәхес менән йәшәгәндәрен аңлайҙар һәм уға төрлөсә ярҙамлашалар.

ВКП(б) өлкә комитетында һәм республиканың яҙыусылар ойошмаһында бөтөнләй икенсе хәл күҙәтелә. Уға иң таралған һәм ҙур зыян килтергән «милләтсе» йәрлеге мөһөрө һәм 1946 йылдын, 26 октябрендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының киңәйтелгән ултырышында уның халыҡ сәсәне тигән маҡтаулы исемен алалар һәм СССР Яҙыусылар союзы ағзалығынан сығаралар. Ул - һоҡланғыс яҙыусылар Михаил Зощенко менән Анна Ахматованы мәсхәрәләгән шул йылдағы көйөнөслө ВКП (б) ҡарары «стрелочниктарының» береһе. Ышаныуы ҡыйын, әммә М. Буранғолов дүрт тапҡыр ҡулға алына, төрмәгә ябыла һәм бөтәһе ун йылдан артыҡ ултырып сыға. Ә уның пьесаларын тәнкитләүселәр, фольклор әҫәрҙәре халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән тип хурлаусылар, халыҡ сәсәненең ифрат бай фольклор материалдарын оятһыҙ рәүештә файҙаланып, диссертациялар яҡлай һәм китаптар сығара.

КПСС Үҙәк Комитетының беренсе секретары Н. С. Хрущевҡа үҙе хат яҙғас ҡына 1959 йылдың 30 октябрендә ул, енәйәт составы булмау сәбәпле,

Башҡорт АССР-ы Юғары Суды ҡарары нигеҙендә гәйепһеҙ тип таныла. «Суд ҡарары буйынса миңә Яҙыусылар союзы ағзаһы һәм Башҡортостандың халыҡ сәсәне исемен ҡайтарып бирҙеләр. Хәҙер миңә ни эшләйһе ҡала? 72 йәштә булһам да, үҙемде һәйбәт тоям, шуға ҡалған ғүмеремде үҙемдең туған халҡым хаҡына эшкә арнағым килә. Әммә мине күрә алмаусылар мине лә, минең ижадымды ла тереләй ерләргә, мине халҡымдан айырырға теләйҙәр, фатирымды тартып алдылар һәм хәҙер мин түҙеп торғоһоҙ шарттарҙа йәшәйем. Шуға ҡарамаҫтан, мин эшемде дауам итәм», - тип яҙған М. А. Буранғолов КПСС өлкә комитетының ул саҡтағы беренсе секретаре З. Н. Нуриевҡа.

Ә хәҙер ошо мәҡәләнең башына әйләнеп ҡайтайыҡ һәм Мөхәммәтша Буранғоловтың хәтер кисәһе барған Балалар ижады үҙәгенең иркен һәм яҡты залдарынан йөрөп сығайык.

Халыҡ ижады хазиналарын йыйыусы хөрмәтенә Ижад үҙәгенең бихисап түңәрәктәре ағзаларының эштәренән күргәҙмә ойошторолған. Бай буяуҙар, формаларҙың нәфислеге һәм төп фекерҙең тәрәнлеге профессиональ оҫталыҡтың юғары кимәле менән берләшә. Бер нисә стендта




«Модельер – бесеүсе» (Г. Г. Ғәйнетдинова), «Макраме» (О. И. Григорьева), «Бәйләү» (Н. А. Полторыхина), «Йәш тегенсе» (В. И. Посашкова), «Оҫталар» (Р. А. Челышева), «Ағасты һырлап биҙәү» (Н. Ғ. Йәнтурина) түңәрәктәренән иң яҡшы өлгөләр. Акттар залында Г. М. Асҡарова етәкселегендәге йәш тамашасы театрының йәш таланттары М. Буранғоловтың «Таштуғай» пьесаһынан өҙөк күрһәтә. Балалар китапханаһы китапханасыһы З. З. Моталлапова тамашасылар менән халыҡ сәсәненең ижады һәм биографияһы буйынса мауыҡтырғыс викторина үткәрә. Иң ҙур бүләк -

фотоальбом - 9-сы башҡорт мәктәп-гимназияһының 9 класс уҡыусыһы Илнур Сәлиховҡа эләкте. Ошо уҡ мәктәп-гимназиянан З. Ишҡолова, Р. Абдулова, Р. Иҫәкәева, Э. Бикбирҙина ла приздар алды.

М. Буранғолов яҙып алған башҡорт халыҡ йырҙары «Ашҡаҙар» ҙы һәм «Шәүрә» не Ф. Сәхәүетдинова тәьҫирләнеп башҡарҙы, ә халыҡ сәсәне итеп кейенгән Т. Нуриев думбыраға ҡушылып уның ҡобайырын йырланы. С. Күҙәшевтың ҡурайсылар ансамбле һәм М. Бәширова етәкләгән «Ләйсән» бейеү коллективы ла алҡыштарға лайык булды.

Т. Минһажеваның «Майҙан» фольклор театры көс йыя - улар М. Буранғоловтың «Башҡорт туйы» пьесаһынан өҙөк уйнап курһәттеләр. Сәсән менән таныш булған яҙыусылар С. Иманғолов һәм З. Рафиҡов йыйылыусыларға теләктәр менән сығыш яһаны.

М. Буранғолов ғүмер буйы йыйған халыҡ рухы хазиналары башҡорт халҡына, шулай уҡ Рәсәйҙең һәм бөтә донъяның барлыҡ халыҡтарына хеҙмәт итә һәм хеҙмәт итәсәк.



*2 – се бүлек*

Сәсән булған ерҙә һүҙ ҡала

# Сәсән булған ерҙә һүҙ ҡала

Ил гиҙеүсе сәсән,

Халыҡ күңеленә өмөт сәсеп,

Йыр игеүсе сәсән.

Мостай Кәрим

**8. Биишева, Зәйнәб. Оло йөрәкле кеше [Текст] / З.Биишева, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты // М.Буранғолов. Һайланма әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. - б. 478 - 480.**

Башҡорт халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғоловты мин 1925 - 1929 йылдарҙан уҡ ишетеп-уҡып беләм. Был ваҡыттарҙа мин Ырымбурҙа Каруанһарайҙа асылған Башҡорт халыҡ институтында уҡый инем. Беҙҙе әҙәбиәттән Ғәлим Айҙаров тигән бик ҙур ғалим уҡыта, үҙенең лекцияларында башҡорт, татар әҙәбиәте менән генә сикләнмәй, бөйөк рус әҙәбиәтенең һәм бөтә донъя әҙәбиәте классиктарының әҫәрҙәре хаҡында ла иҫ киткес мауыҡтырғыс дәрестәр бирә ине.

Ә инде башҡорт әҙәбиәте, уның тарихы, фольклор байлығы хаҡында һөйләй башлаһа, ул иң элек Мөхәммәтша Буранғолдоң был өлкәләге хеҙмәтен телгә ала. Халыҡ ижадын алтын хазиналар тип атай. Ошо хазинаны һис кисекмәҫтән йыйып алырға кәрәклек хаҡында һөйләгәндә, бына уның кеүек эшләгеҙ, ти. Башҡорт халыҡ ижады ифрат бай, уны юғалтмай, түкмәй-сәсмәй йыйып, һаҡлап ҡалырға кәрәк. Юҡһа, ул хазиналар өлкәндәр менән бергә ҡәбергә кереп бөтөр, уны яҙып, йыйып алыу һәр кемдең, бигерәк тә киләсәктә уҡытыусы булаһы, халыҡ араһында эшләйһе кешеләрҙең - һеҙҙең мөҡәддәс бурыс, ти. Шулай итеп, ғалим яҙыусы Мөхәммәтша Буранғолдоң революцияға хәтлем үк быны яҡшы аңлауы, бөтә Башҡортостанда, йәйәүләп тигәндәй, фольклор йыйып йөрөүе, революциянан һуң был эшкә тағы ла дәртләнеп, ең һыҙғанып тотоноуы хаҡында һөйләй. Уны был изге эш өсөн ваҡытын да, һаулығын да, йәшлеген дә йәлләмәгән, ысын мәғәнәһендә халыҡ улы итеп күҙ алдына баҫтыра, беҙҙе – студенттарҙы - унан өлгө алып, был эшкә тотонорға саҡыра.

Мөхәммәтша Буранғол был йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә, бигерәк тә драма өлкәһендә, иң күп һәм уңышлы эшләгән яҙыусыларҙың береһе булды. Халҡыбыҙҙың үлемһеҙ «Ашҡаҙар» йырына нигеҙләнеп яҙылған «Ашҡаҙар» драмаһы тап бына ошо йылдарҙа Өфө, Ырымбур, Стәрле һәм

башҡа ҡалалар театрҙарында ҙур уңыш менән барҙы. Айырым китап булып та сыҡты. Шул йылдарҙа уның «Ялан Йәркәй», «Шәүрәкәй», «Башҡорт туйы» һәм башҡа драмалары бер-бер артлы донъя күрә. Был әҫәрҙәр үҙҙәренең халыҡсанлығы, тормош дөрөҫлөгө, йыры-моңо, тел байлығы менәндер, моғайын, башҡорт, татар донъяһында бик йылы ҡаршы алынды. «Башҡорт туйы» драмаһы айырата ҙур уңыш ҡаҙана. Ул ҡуйылғанда, хәҙерге Опера һәм балет театры бинаһында, һәр саҡ тамашасылар шығырым тулы була. Халыҡ уны алҡышлап ҡаршы ала, алҡышлап оҙата. Айырыуса йәштәр, уҡыусылар, студенттар ябырылып ҡарай уны.

Минең үҙемә М. Буранғолдоң «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тигән тарихи драмаһын ғына ҡарарға тура килде. Был әҫәр шул ук Опера һәм балет театры бинаһында барҙы. Башҡорт драматургияһының иң уңышлы, классик әҫәре тип атар инем мин уны. Тамашасы күңелендә ысын мәғәнәһендә руки уяныш, илһамлы уйланыш, яҡты ҡыуаныс балҡыта, бер кемде лә битараф ҡалдырмай ине был әҫәр. Әммә, үкенескә ҡарты, М. Буранғолдоң тәрән халыҡсанлыҡ, тормошсан дөрөҫлөк рухы менән һуғарылған был һоҡланғыс драмаһының да ғүмере ҡыҫҡа булды. Үрмәксе шикелле, үҙенең керле ауына йәшенеп көтөп ятҡан йәлләттәр уны ла быуып һалдылар...

Ләкин кеше, бигерәк тә ижад кешеһе, үҙенең изге хеҙмәте өсөн гел ҡыуылып, туҡмалып йәшәү өсөн тыуамы ни?! Уйлап ҡарайыҡ, Мөхәммәтша Буранғол үҙенең бөтә ғүмерен ҡорбан итеп, халыҡ ижадын йыймаһа, ошо көндө Башҡортостан Тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми институты тиҫтәләгән томдарҙан торған халыҡ ижады йәүһәрҙәрен китап итеп сығара алыр инеме?! Халыҡ ижадын йыйыу утыҙ етенсе йылдан һуң күпме йылдарғаса онотолдо?!

Ваҡытында кем күрҙе, кем баһаланы М. Буранғолдоң был оло хеҙмәтен?!

М. Буранғол йыйған халыҡ ижады байлығында анһат ҡына йөҙөп, кемдәр генә ғалим да, әҙип тә, фән докторы ла булып бөтмәне?! Ә халыҡтың үҙ улы, тауҙай хеҙмәте менән туҙандай хөрмәт күрмәй, ташландыҡ хәлдә

тип әйтерлек донъя ҡуйҙы. Был бит, ысынлап уйлап ҡараһаң - ҡот осҡос хәл!

Шулай ҙа, ауыр йәшәһә лә, туған халҡына мәңгелек хөрмәт ҡалдырған Мөхәммәтша Буранғолов ағайҙы иң бәхетле кеше булды, тип әйтер инем мин. Халыҡҡа, илгә хеҙмәт итер өсөн тыуҙы - шул изге юлында ҡорбан булды.

Шулай итеп, тиҫтәләрсә йылдар үтте. Әммә яҡшылыҡ ерҙә ятып ҡалманы. Илебеҙҙә хәҙер хаҡлыҡҡа, ғәҙеллеккә, демократияға нигеҙләнгән яңы осор башланды. Кеше күңелендә һаҡланған изге тойғолар ҡайтанан терелә, намыҫ, выждан уяна, күңелдәр сафлана торған заман еңеүле аҙымдар менән оло юлға сыҡты һәм башҡорт әҙәбиәтенең ғорурлығы, классигы булып йәшәрлек тауҙай хеҙмәт ҡалдырған ғалим, яҙыусы, халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғоловтың йөҙ йыллығын ҡыуанып уҙғарырға, хөрмәтләп иҫкә алырға мөмкинлек тыуҙы.

Мөхәммәтша Буранғоловтың йөҙ йыллығы, ул – хаҡлыҡ, ғәҙеллек тантанаһы, оло йөрәкле классик яҙыусыбыҙға тейешле баһа биреү, уның изге хеҙмәте алдында, халыҡсан түбәнселек менән баш эйеү байрамы булып, халыҡ йөрәгендә йәшәп ҡаласаҡ. Сөнки ул - тотош халыҡ байрамы. Башҡорт совет әҙәбиәте байрамы. Был – илебеҙҙә барған революцион үҙгәрештәрҙең еңеү байрамы. Ышанам: оло йөрәкле, талантлы драматургтың торғонлоҡ йылдарында быуылып ятҡан бөтә драматик әҫәрҙәре лә Башҡорт академия драма театры сәхнәһенә ҡайтанан күтәрелер, сәхнәгә йән, йәм өҫтәр, тамашасыны уйландырыр, ҡыуандырыр, рухи аҙыҡҡа булған һыуһынын ҡандырыр. Тик уларҙы аңлап, яратып ҡуйырҙай режиссерҙар ғына булһын.

**9. Бүләков, Илдус. Исемдәре ҡайтыр иленә [Текст] / И. Бүләков // Ватандаш. - 1998. - №7. - Б. 77 - 83**.

Хәбибулла Ғәбитов, Мөхәмәтша Буранғолов, Ғабдулла Иҙрисов...

Был исемдәр республикабыҙ халҡының оло йәштәге кешеләр хәтерендә эле булһа ла һаҡлана. Уларҙың берәүҙәрен ижтимағи тормоштағы роле, эшмәкәрлеге буйынса хәтерләһәләр, икенселәрен яҙған художестволы әҫәрҙәре аша иҫләйҙәр, өсөнсөләрен үҙҙәре осрашып йәки яҡындан аралашып йәшәүҙәре яғынан беләләр. Хәҙерге йәш һәм хатта урта быуын, мәктәп уҡыусылары иһә улар тураһындағы мәғлүмәттәр менән үтә аҙ таныш йәки бөтөнләй таныш түгел. Сөнки был исемдәр һикләненсе йылдарҙың урталарына тиклем тыйылып, фәҡәт тәнҡит күҙлегенән сығып ҡына аталды. Ғәмәлдә иһә улар халыҡ күңелендә, республика тормошонда һәм тарихында билдәле эҙ ҡалдырған, үҙ ваҡытында киң танылған, ҙур абруйлы шәхестәр.

Беҙ был мәҡәләлә ошо шәхестәрҙең драматургия өлкәһендәге эшмәкәрлегенә генә туҡталмаҡсыбыҙ.

Хәбибулла Ғәбитовтың халыҡ хикәйәтенә нигеҙләнеп яҙылған «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» тигән пьесаһы 20-се йылдарҙа әҙәбиәт һәм театр тарихында ҙур ғына урын алған әҫәрҙәрҙең береһе булды, башҡорт театры сәхнәһендә шаулап барҙы.

Дөрөҫ, 1924 йылдың 10 майында тәүләп сәхнәгә сығарылған был спектаклде беренсе тапҡыр Башҡорт дәүләт театрында ҡарағас, үҙ дәүеренең театр тәнҡитсеһе Нәҡи Иҫәнбәт тамашала һәм әҫәрҙә байтаҡ ҡына кәмселектәрҙе тапҡан.

«Ынйыҡай менән Юлдыҡай» пьесаһын тамашасыларҙың ыңғай баһалауы, спектаклде яратып ҡарауы хаҡында матбуғатта заманында байтаҡ ҡыҙыҡлы хәбәрҙәр баҫылған, әҫәрҙең 1926 йылда Центриздат тарафынан Мәскәүҙә айырым китап итеп баҫып сығарылыуы ла юғары баһаланған.

Билдәле булыуынса, Башҡорт дәүләт театры үҙенең спектаклдәрен Мәскәүҙә тулы килеш тәүге тапҡыр 1927 йылдың мартында, Советтарҙың Дүртенсе Бөтә Союз съезы барған көндәрҙә һәм уның делегаттарына курһәтә.

Пьеса халыҡ йыры һәм уның легендаһы мотивтарына ҡоролған сюжетты үҙ эсенә ала. Унда бер-береһен яратышҡан ярлы егет менән бей ҡыҙының, синфи ҡаршылыҡтар аша үтеп, үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәштә бәхет

табыуҙары һүрәтләнә. Әҫәрҙә бәрелешкә инеүсе көстәрҙең бер яғында - ярлы Ишбулды ҡарт, уның ҡарсығы Аҡбикә, уларҙың улдары Юлдыҡай, уның дуҫы Ҡурташ һәм ауылдаштары һиңрән, Ҡалҡамыш, Буранбай, Байым, тула баҫыусы ҡатындар торһа, уларға ҡаршы яҡта - феодалдар Ҡарамырҙа бей, Айсыуаҡ, Тоҡан байҙар тупланған.

Юлдыҡай, ярлылыҡтың ауыр шарттарында үҫеп, ямандан яҡшыны айырырға өйрәнә, халыҡтың хәйерселектә йәшәүенә тәрән әсенә, уның сәбәбен иһә байҙарҙың ғәҙелһеҙлегендә күрә. Ҡыйыу һәм тәүәккәл егет ярлыларҙы йәберләүселәргә ҡаршы яу аса, тиҫтерҙәрен «йыртҡыс байҙарҙан асыуҙарын ала башларға" өндәй, үҙе иһә, бүтәндәргә батырлыҡ, ҡыйыулыҡ өлгөһө күрһәтеп, Тойғон байҙы ҡылысы менән сабып үлтерә, бейҙе зинданға яба һәм уларҙың мал-мөлкәтен ярлыларға өләшеп бирергә ҡарар сығара. «Без таламайбыҙ, бәлки байҙар талаған малдарыбыҙҙы ҡайтарып алабыҙ... Беҙ уны һорамайбыҙ - тартып алабыҙ!» - ти ул халыҡҡа.

Шулай ҙа драматург, тарихилыҡ принцибын боҙобораҡ, бейҙәр дәүерендә йәшәүсе Юлдыҡайҙы кәрәгенән артыҡ синфи аңлы кеше итеп һүрәтләй. Революциянан һуң, уның йоғонтоһонда яҙылған агитация рухындағы әҫәрҙәрҙәге кеүек, Юлдыҡай ҙа, күберәк "агитатор" өгөт-нәсихәтсе төҫөндәрәк, кешеләрҙең хаталарын күрһәтә, революцион хәрәкәткә өндәй.

Был пьесаның һәр шаршауына үҙенсәлекле бер стиль биҙәге хас. Беренсе шаршауҙа тула баҫыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың йырлашыуы, Ынйыҡай менән Юлдыҡайҙың әйтеш аша аңлашыуы мелодраматик төҫтә һынландырыла, егет менән ҡыҙҙың һөйләшеүе йыр-әйтеш рәүешендә бирелә.

Икенсе яҡтан, тәүге ике шаршау көнкүреш-этнографик картиналарҙан тора. Шул уҡ ваҡытта икенсе шаршауҙағы һәм артабанғы күренештәргә яңы заман һулышы ныҡ тәьҫир иткәнлеге тойола. Бында бей ғаиләһенең тарҡалыуына баҫым яһала, революцион осорға хас ҡырҡыу мөнәсәбәттәр йоғонтоһо персонаждар характерында һәм ҡылығында асыҡ беленә.

Нисек кенә булмаһын, Хәбибулла Ғәбитовтың «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» тигән сәхнә әҫәре егерменсе йылдарҙағы башҡорт драматургияһының формалашыу осоронда киң танылыу алған фольклор-

этнографик пьесалар рәтендә унының үçешенә ыңғай йоғонто яһаны. Тамашасылар ҙа спектаклде һәр ваҡыт яратып ҡараны, йылы ҡабул итте.

Ғабдулла Иҙрисовтың (Ғабдулла Иҙрис) исеме әҙәбиәт тарихында мәғлүм булһа ла, унының тормош юлы, ижады һәм эшмәхәрлеге тулы ғына билдәле түгел. Әҙәби ижад өлкәһендә күренә башлаған 30-сы йылдарында

Унының «Яңы ауыл» гәзите редакцияһында эшләгәнлеге, сығышы менән Учалы районының Ураҙ ауылынан булыуы һәм 1959 йылда фажиғәле вафаты хаҡында ғына хәбәрҙәр билдәле.

Утыҙынсы йылдар башы башҡорт драматургияһында ауыл тормошондағы иçкелек менән яңылыҡ бәрелешен, кешеләр аңындары үҙгәрештәрҙе асығыраҡ һүрәтләүҙәре яғынан Ғабдулла Иҙристең «Ҡыҙыл таңда ҡара шәүләләр», «Яҙ йыры» (1931), «Ҡаһарман Павлик» (1934), «Өҙөлгән тамыр» (1935), «Гөлкәйҙең мөхәббәте» (1936), «Бөркөтлөтау итәгендә» (1937) тигән драмалары иғтибарға лайыҡ.

Драматургия тарихынан күренеүенсә, әгәр 20-се һәм 30-сы йылдар башындағы сәхнә әçәрҙәрендә яңылыҡ йыш ҡына декларатив рәүештә раçланһа, Ғабдулла Иҙрис пьесаларында һүрәтләнгән ваҡиға менән хәл-шарттарҙың ҡатмарлылығын күрһәтергә, төрлө мөһим мәсьәләләрҙе һәр яҡлап яҡтыртырға, конфликтты төрлө аспектта ҡарарға, персонаждарҙы индивидуаль айырмалыҡтарында һынландырырға ынтылыш көслөрәк тойола.

Пьесалағы колхозсылар ҙа бер генә төçтәге масса түгел. Мәçәлән, «Яҙ йыры» драмаһында колхозлашыу йылдарындағы көрәш, төрлө тартыштар шаҡтай ҡырҡыу һәм төрлө яҡлыраҡ итеп бирелгән.

Яңылыҡтың хәрәкәте Ғабдулла Иҙристең «Өзелгән тамыр» исемле драмаһының дөйөм рухын, төп йөкмәткеһен билдәләгән. Колхоз рәйесе Юлдыбай, ауыл советы рәйесе һәм партия ойошмаһы сәркәтибе Йомағол, тырыш колхозсылар Батыргәрәй, Йәнтүҙмәс, Көсәпҡол, бригадир Гөлсабира образдары ауылдың үҙ заманы активистары итеп күрһәтелә. Яңғыҙак Ғәйнетдин, үҙенең улы һәм ейәне йоғонтоһонда ғына колхозға ағза булып ингән оло йәштәге Аһылгирәй ише крәçтиәндәр аңындағы шәхси

милекселек психологияһының тамырҙары ныҡлығы, уларҙы яңылыҡҡа ылыҡтырыу өсөн көрәштең ҡатмарлылығы реаль кәүҙәләндерелә.

Пьесала колхозға инеүҙән баш тартҡан хеҙмәтсән ауыл кешеләренең өс тибы үҙәктә тора. Был образдар социаль һәм психологик йәһәттән диҡҡәтте биләй әле лә Гөлсабира образы яҙмышы күңел драмалары менән хәтерҙә ҡала.

Аһылгирәй ҡарт характерындағы шәхси милекселек психологияһы һалған эҙҙәр уның һаҡсыл хужалыҡ итеү, дөйөм милек өсөй бер тиң шәхси яуаплылыҡ тойоу принцибын яҡлауға нигеҙләнгән реаль ынтылыштарынан, ғәмһеҙлек, яуапһыҙлыҡ, хужаһыҙлыҡ менән килешә алмауынан килә тип ҡарарға ныҡлы ерлек бар. Хәҙерге колхоз һәм совхоздар торошо, иҡтисади ысынбарлыҡ колхозлашыуҙың тәүге көндәрендә үк шик-шөбһәгә төшкән тәжрибәле, алдан һиҙенеүсән ер, хеҙмәт кешеләренең, ҡайғыртыусан аһылгирәйҙәрҙең аҡылы алтын булғанлыҡты тулыһынса ҡеүәтләй. Ғабдулла Иҙристең «Яҙ йыры», «Өҙөлгән тамыр» тигән пьесалары ойошоу дәүерен кисереүсе колхоз тормошон, уның кешеләре характерын, уларҙың формалашыуын социаль-психологик аныҡлыҡта, ярайһы уҡ тәрән сағылдырыуҙары менән башҡорт драматургияһының заман темаһын уңышлы хәл итеүтә ынтылышын таныҡлайҙар. «Өҙөлгән тамыр» драмаһы, «башҡорт совет әҙәбиәтенең боронғо (30-сы йылдар - И. Б.) үҫеш баҫҡысында иң күренекле әҫәрҙәр» (Ә. Чаныш. - «Октябрь», 1935, 3-4 һан) рәтендә әҙәби тәнҡиттең хаҡлы юғары баһаһын алды. Әммә, драматургтың 30-сы йылдар аҙағында репрессияға юлығыуы аркаһында, уның пьесалары хаҡында артабан ниндәй ҙә булһа фекер әйтеү мөмкин булманы.

Ғабдулла Иҙрис хаҡындағы һүҙҙең аҙағында шул үкенесте белдереү ҙә фарыздыр: һәләтле һәм өмөтлө йәш драматургтың баҫылып өлгөргән ошо өс пьесаһынан тыш ҡульяҙмала ҡалған бүтән сәхнә әҫәрҙәре әлегә табылғаны юҡ.

Ә бына реабилитацияланған күренекле фольклорсы, сәсән һәм драматург Мөхәмәтша Буранғоловтың исеме һәм әҫәрҙәре халыҡҡа кире ҡайтарылып, үҙе вафат булғандан һуң, тыуыуына 100 йыл тулыҙзы киң

билдәләгән көндәрҙә әҙәбиәт һәм театр сәнғәте тарихына таныш йәки әлегәсә тексы күптәргә таныш булмаған пьесаларының, барыһы булмаһа ла, байтағы ҡульъяҙма хәлендә күренекле әҙиптең улы Нәжип Буранғолов аша Рәсәй академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивына килеп инде. Шулар araһындары иң күренекле һәм айырыуса үҙенсәлекле сәхнә әҫәрҙәренән минең тарафтан төҙөлгән ике тиҫтә ярым табаҡ күләмле «Таштуғай» тип аталған бер йыйынтығы, «Китап» нәшриәтендә 1994 йылда баҫылып сыҡты. Мөхәмәтша Буранғоловтың был йыйынтығына драматургтың тормошондағы ҡара көндәрендә икмәк-тоҙлоҡ өсөн колхоз-совхоз театрҙарына тәғәйенләп яҙған, ятраҡан темаһынан баҫым менән ситләштерелгәнлектән, идеология талаптарына яраҡлаштырып, үҙ дәүере мәсьәләләренә арналған күп һандағы пьесаларынан бер нисәһе генә тәҡдим ителгәйне. Табылмаған ҡульъяҙмаларҙа ҡалғандары ла байтаҡ.

Мөхәмәтша Буранғолов үҙенең тәүге сәхнә әҫәрҙәренән «Ашҡаҙар» (1917) исемендәге пьесаһын шул уҡ исемдәге риүәйткә нигеҙләнеп яҙған. Унда төп иғтибар башҡортса фольклор-этнографик күренештәрҙе – халыҡтың әүәлге тормош-көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәтен, ҡыҙ яусылау һәм туйлау йолаһы элементтарын, халыҡ араһында киң таралған үтә нескә моңһағышлы «Ашҡаҙар» йырының тыуыу тарихын – сағылдырыуға йүнәлтелгән. Мөхәмәтша Буранғолов был типтағы тарихи-этнографик пьесаларҙы, ғөмүмән, бик күп яҙған. Улар башҡорт совет драматургияһы формалашыуының тәүге йылдарында тотош бер тематик-стиль йүнәлешен барлыҡҡа килтерешә. Мәҫәлән, ул яҙып ҡалдырған, ләкин күбеһе бөгөнгө көндәргә килеп етмәгән «Зәңгәр шәл» (1918), «Буранбай» (1920), «Тәфтиләү» (1921), «Алпамыша» (1922), «Ҡара юрға» (1924), «Шәүрәкәй» (1925, 1948), «Мөфти ҡыҙы Фатима» (1926), «Башҡорт туйы» (1926, 1943), «Гөлсәсәк» (1939), «Таштуғай» (1938, 1959) тигән пьесалары шундайҙарҙан. Был әҫәрҙәрҙең һәр ҡайһыһы үҙ дәүерендә төрлө яҙмышҡа юлыҡҡан, күбеһе, ҡульъяҙмала йөрөп, туҙып-юғалып бөткән.

Драматургтың фәҡәт «Ашҡаҙар», «Башҡорт туйы» тигән мелодрамалары ғына баҫма рәүештә әүәле донъя күргән. Уларҙың тәүгеһе -

1923 йылда Ырымбурҙа, икенсеһе 1929 йылда Өфөлә айырым китап булып баҫылған.

Мөхәмәтша Буранғоловтың үрҙә аталғандары араһындағы баҫылып сыҡҡан ошо ике әҫәренән ҡала йәнә дүрт драмаһы ҡульяҙма хәлендә бөгөнгө көндәргә килеп еткән. Улар – «Ялан Йәркәй», «Шәүрәкәй», «Гөлсәсәк» һәм «Таштуғай» драмалары. Шуларҙың да «Гөлсәсәк» исемендәгеһе күп кенә вариантлы (1926, 1929, 1930-1933, 1941, 1942, 1943) мәшһүр «Башҡорт туйы» тигән пьесаһының яңы исемдәге бер вариантынан ғибәрәт.

Әлегесә табылмаған ҡульяҙма пьесаларынан «Буранбай», «Тәфтиләү» тигән драмаларының «Ҡара юрға» исемендәге комедияһының шул исемдәрҙәге халыҡ йырҙары тарихына (риүәйәтенә) нигеҙләнеп яҙылғанлығы, «Алпамыша» тип аталған пьесаһының – төрки телле халыҡтар араһында киң билдәле әкиәткә, «Сәлим кантон», «Мөфти ҡыҙы Фатима» тип исемләнгән сәхнә әҫәрҙәренең рийәүәттәргә таянып ижад ителгәнлеге генә яҡшы мәғлүм.

Фольклорсы-яҙыусының ошо тиклем әҫәрҙәре араһынан «Зәңгәр шәл» (үҙенең шул исемдәге пьесаһынын ҡульяҙмаһын 1918 йылда Ҡазан дәүләт театрының директоры Ғабдулла Ҡарыевҡа биргәндән һуң, тегеһенең уны «юғалтып ҡуйыуы» тураһында Мөхәмәтша Буранғоловтың яҙып ҡалдырған юлдары бар ), «Буранбай», «Тәфтиләү», «Башҡорт туйы» (һәм унық «Гөлсәсәк» исемендәге варианты) тигәндәрен үҙ ҡулы менән музыкаль драма жанрына айырып ҡуйыуы ла иғтибарға лайыҡ, һәм, ысындан да, был пьесаларҙа йыр-музыка киң генә урын алған.

«Ялан Йәркәй» пьесаһының фольклор материалы нигеҙендә яҙылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, автор ҡульяҙманың титул битенә «башҡорттарҙың моңло «Ялан Йәрҡәй», «Ҡара урман», «Бөҙрә тал» исемле көй-йырҙарынан алып яҙылған өс бүлемле, биш һүрәтле (картиналы - И. Б.), «ҡайғылы ваҡиға" тип күрһәтеп ҡуйған.

Был йырҙарҙың тыуыу тарихы халыҡ хәтерендә мәшһүр ҡурайсы һәм йырсы-сәсән Йәрхәй-Буранбай яҙмышы менән тығыҙ бәйле. М. Буранғолов

шуға ла ошо өс йыр тарихының һәр ҡайһыһын айырым-айырым шаршауҙарға бүлеп бирә һәм уларҙың һәр береһенең үҙәгендә шул уҡ бер герой хәрәкәт иткән тотош әҫәргә берләштерә. Шулай итеп, драмалағы күренештәрҙең ваҡиғаларҙың логик бәйләнеше хасил була.

Пьесаның ике күренешле беренсе шаршауы Йәркәй яҙмышына бәйле риүәйәттең мотивтарын дөрөҫ сағылдырыуы, хәл-ваҡиғаларҙың тормош-санлығы, геройҙар характерының асыҡ һыҙатланышы, кисерештәр реаллеге, эш-ҡылыҡтарҙың нигеҙле булыуы менән иғтибарҙы тарта.

Икенсе һәм өсөнсө шаршауҙарҙа ҡасҡынлыҡта йөрөргә мәжбүр ителгән Йәркәйҙең аяныс яҙмышы әлеге йырҙар тарихында билдәләнгән фажигәле ваҡиғалар менән тығыҙ бәйләнештә күрһәтелә. Мөхәмәтша Буранғолов бында ла, «Ашҡаҙар» драмаһындағы кеүек уҡ, тарихи ысынбарлыҡҡа, тормош-көнкүреш үҙенсәлектәренә социаль анализ яһауҙы маҡсат итеп ҡуймай, төп иғтибарын кешеләрҙең ауыр хәлен фольклор материалы нигеҙендә сағылдырыуға йүнәлтә. Уның өсөн был осраҡта ла халыҡ ижады ерлеген үҙгәртмәй, тарихи сығанаҡтың демократик асылына, гуманистик рухына тоғролоҡ һаҡлау ҙурыраҡ, мөһимерәк әһәмиәткә эйә.

Тәрән һәм саф һөйөү тойғоһон сағылдырған һағышлы «Шәүрә килен» йырының тыуыу тарихындағы ваҡиғалар үҙәгенә ҡуйылған ҡатын-ҡыҙ ирке, кешенең уҙаллылығы, шәхестең рухи азатлығы мотивтарында ла ул дөйөм кешелек ынтылыштарына хас күркәм сифаттарҙы күрә һәм уларҙы үҙенең «Шәүрәкәй» тигән пьесаһында һүрәтләргә тырыша.

Драматургтың «Шәүрәкәй» пьесаһы 1990 йылда Салауат башҡорт дәүләт театры схнәһендә ҡайтанан ҡуйылды, әммә бында ул режиссер Фәрҙүнә Ҡасимова редакцияһында комедия жанрына бороп уйналды.

Мөхәмәтша Буранғоловтың фольклор материалдарына нигеҙләнгән тарихи-этнографик пьесаларынан «Башҡорт туйы» тигән музыкаль драмаһы милли драматургия һәм театр сәнғәте тарихында айырыуса шаушыулы яҙмыш кисергән, бер нисә хат эшкәртелеп, үҙгәртелеп, Башҡорт дәүләт театры репертуарында тиҫтәләгән йылдар буйынса һаҡланған (1990 йылда

уны Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия театры режиссер Рифҡәт Исрафилов ҡуйылышында ҡайтанан сәхнәгә сығарҙы), тамашасылар тарафынан яратып ҡаралған сәхнә әҫәрҙәренән.

«Башҡорт туйы» пьесаһы беренсе тапҡыр 1927 йылда Өфө сәнғәт техникумының театр бүлеге талиптары тарафынан уйнала, һәм был спектакль матбуғатта ыңғай баһа ала. Режиссер-педагог Вәлиулла Мортазин киләһе йылда уны Башҡорт дәүләт театрында ла сәхнәгә ҡуя. Бындағы спектаклгә ул үҙенән хореографик сәхнә күренештәрен дә (балет элементтары) өҫтәп ебәрә. Шуға пьеса 1929 йылда ике автор исеме менән китап итеп баҫтырып сығарыла, һәм ул Башҡорт дәүләт театрының ун йыллыҡ юбилейына арнала.

«Башҡорт туйы» спектаклен шул дәүер тамашасылары «тормош уйыны», ысынбарлыҡтың күркәм кәүҙәләнеше итеп, һәр ваҡыт яратып караһа һәм ихлас ҡабул итһә, айырым әҙәбиәтсе һәм тәнҡитселәр уны драматургияның традицион, классик тәбиғәтенән ситләшеүе, билдәле ҡанундарҙы тотмауы, көнкүреш-этнографик элементтарҙың күберәк урын алғанлығы һәм көн талаптарынан «алыҫ булыуы» өсөн оҡшатып еткермәне, пролеткультсылыҡ талаптарынан сығып, пьесаны иҫке рухлы, һөрһөгән әҫәр тип аяуһыҙ тәңҡитләне.

Мөхәмәтша Буранғолов иһә үҙе режиссер Вәлиулла Мортазиндың спектаклгә уйын, бейеү, хатта классик балет элементтарын күп индереүе менән килешеп бөтмәй. Шуға утыҙынсы йылдар башында ул «Башҡорт туйы» пьесаһынң йәнә бер үҙгәртелгән вариантын яҙа. Автор бында ваҡиғаларҙың социаль ойоткоһон анығыраҡ билдәләүгә, геройҙарҙың эске рухын, күңел кисерештәрен сағыуыраҡ күрһәтеүгә өлгәшә. Унда үҙәктәге геройҙың исеме лә «Юлдыбай» итеп үҙгәртелеп, ул әҫәрҙең беренсе вариантындағы Буранбайҙан тәүәккәллеге, ҡыйыулығы, аңлы рәүештә эш йөрөтөү һәләтлелеге менән айырыла. Юлдыбай характеры хәҙер һиҙелерлек динамикала һүрәтләнә.

Ҡаршылыҡлы ике синыф көстәренең киҫкен бәрелешен автор һәр ваҡыт күмәк кешеләр, халыҡ ҡатнашлығында күрһәтә. Шуның менән бәйле драманың социаль-синфи конфликты ла туҡтауһыҙ киҫкенләшә бара.

Ошо яҡтан ҡарағанда, пьесаның был, 1930-1933 йылдарҙағы, варианты реалистик драма талаптарына тулыраҡ яуап бирә. Әммә, пьесаның атамаһына сығарылған идея йүнәлешенә һәм алынған фольклор, этнография материалының үҙенсәлегенә тоғролоҡ һаҡлап, автор «Башҡорт туйы» ның һәр яңы редакцияһында ла ғөрөф - ғәҙәт, көнкүреш-йола элементтарын сағылдырыуҙы күҙ уңында ныҡ тота.

Әҫәрҙең яңы варианты буйынса сәхнәләштерелгән спектакль 1990 йылда Сибай башҡорт дәүләт театрында уңышлы уйналды, пьеса 1991 йылда Башҡорт дәүләт ахадемия театрында яңынан сәхнәгә ҡуйылды, 1992 йылдың ғинуарында бөтә республика тамашасылары ла ошо әҫәр буйынса төшөрөлгән телеспектаклде яратып ҡараны.

Мөхәмәтша Буранғолов 1939 йылда был пьесаның «Гөлсәсәх» тигән йәнә бер вариантын яҙған. Унда «Башҡорт туйы» пьесаһының бүтән варианттарында сағылдырылған социаль-синфи конфликттың киҫкенләшә барыуы һәм, ҡыпсаҡтарҙың ырыу батырҙарынан Йәркәй-Буранбай, Айсыуаҡ, Йәғфәр етәкселегендә, бөрйәндәр ҡаһарманы Сәйет булышлығында, Таймаҫ тархан менән Үҫәргән ырыуы мырҙаларын ҡыйратып, ғәҙеллекте, ҡәбиләләр татыулығын, хоҡуҡтар тиңлеген һәм дөйөм халыҡтар азатлығын яҡлау көрәшенә күтәрелеүе һүрәтләнә.

Ошо уҡ йөкмәткеләге «Таштуғай» тигән драмаһын да автор төрлө жанрҙарҙа һәм редакцияларында ижад итә. Ул, мәҫәлән, 1938 йылда, халыҡ араһында киң билдәле риүәйәткә таянып, «Таштуғай» тигән проза әҫәрен яҙа, 1946 йылда уны опера өсөн либреттоға әйләндерә, 1958 йылда шул уҡ нигеҙҙә «Таштуғай» исемендәге драмаһын яҙа һәм 1959 йылда уның төҙәтелгән тексын әҙерләп ҡалдыра.

Мөхәмәтша Буранғолов, фольклор материалдарына таянып, тарихи-революцион йөкмәткеле пьесалар ҙа яҙған. Уның «Ҡараһаҡал" (1930 -1939) драмаһы, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» (1940 - 1943) трагедияһы, «Мәргән»

(1939), «Туҡтар менән Гөлнур» (1944 - 1947) тигән либреттолары (уларҙың барыһы ла шул уҡ исемдәрендәге халыҡ эпостары буйынса яҙылған) башҡорт халҡының боронғо тормошонда булып үткән реаль ваҡиғаларҙы сағылдырыуҙары менән хәҙерге уҡыусылар өсөн айырыуса ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс.

Мөхәмәтша Буранғоловтың халыҡ хәтерендә әҙме-күпме кимәлдә һаҡланып ҡалған эпостың билдәле варианттары, айырым фрагменттары һәм тарихи мәғлүмәттәр нигеҙендә яҙылған «Иҙеүкәй менән Мораҙым» трагедияһы үҙ дәүерендә йәнә күп шау-шыу тыуҙырған, әҫәрҙең дөйөм ерлеген, идея йүнәлешен асыҡ абайламаҫтан, төп герой исеменә таянып ҡына, фәҡәт кире мәғәнә һалынған һәм билдәле тарихи ҡарарҙарға ҡаты тәнҡит күҙлегенән индерелгән, ғәмәлдә иһә драматург ижадының айырата уңышын кәүҙәләндергән, милли драматургияның, әҙәби жанрҙың шул осорҙағы ҡаҙанышын билдәләгән әҫәрҙәрҙән.

Драматургтың Башҡортостан яҙыусылар берләшмәһе идараһында һаҡланған "шәхси эш" ҡағыҙҙары араһында ошо пьесаның яҙылыу тарихына ҡағылышлы аңлатмалары бар. Автор унда был әҫәрен шул уҡ исемдәге эпоска һәм документаль сынағаҡтарға таянып яҙғанлығын күрһәтә.

Пьесаның прологында уҡ, шулай итеп, ваҡиғаларҙың героик йөкмәткелелегенә ишара ителә. Шуға ла автор әҫәрҙәге ваҡиғаларҙы урыны-урыны менән хатта туранан-тура ҡобайыр стилендә һүрәтләүгә күсеп тә китә.

Ул азатлыҡ яуына күтәрелгән көрәшселәрҙең тәүәккәллеген, Иҙеүкәй батырҙың нәфрәттән ярһыуын, Туҡтамыш хан ғәскәре менән үлемесле алышҡа ингән яугирҙәрҙең ҡаһарманлығын, халыҡ рухының бөйөхлөгөн, уның тәбиғи көс-ҡеүәтен, еңеүгә ышанысын тасуирлағанда, халыҡ һәм ил яҙмышы өсөн иң көсөргәнешле, һынаулы мәлдәрҙә Иҙел ҡаяһында бөтә башҡорттарҙың аҡыл-зиһенен һынландырыусы аҡ һаҡаллы, сал сәсле мөһабәт һабрау сәсәндең пәйҙә булыуы һәм ялҡынлы телмәр тотоуы менән бәйле күренештәрҙе һүрәтләгәндә айырыуса асыҡ тойола.

Эпос йоғонтоһо, ҡобайыр элементтары әҫәр геройҙарының телмәрендә лә, эш-ҡылыҡында ла һиҙелә.

Батырҙарҙың халыҡ, ил азатлығы өсөн көрәше, хан һарайында хөкөм һөргән мәкерлектән өҫтөн сығыуы, Урҙа һанаттары, иҫәпһеҙ ғәскәре менән ҡаһармандарса алышыуы һәм, халыҡ, ил бойондороҡһоҙлоғо хаҡына үҙ ғүмерҙәрен биреп, еңеү яулауы – йәғни батырҙарҙың, ил улдарының ҡаһарманлығы бөтә һүрәтләнгәндең төп лейтмотивын билдәләй, идея йөкмәткеһен сағылдыра.

Халыҡтың үткәненә бәйле тарихи тема һәм халыҡ, ил яҙмышынан айырылғыһыҙ мәсьәлә, ҙур масштабтағы конфликт һәм уны ыңғай хәл итә алырҙай монументаль геройҙар, оло характерҙар менән аяуһыҙ ҡырҡыу хәл - шарттар бирелеше «Иҙеүкәй менән Мораҙым» әҫәрен классик трагедия жанры традицияларына ярашлы иткән. Шуға ла ул башҡорт драматургияһындағы милли үҙенсәлектәргә эйә булған тәүге трагедиялар рәтендә ҡаралыуға лайыҡ.

**10. Бүләков, Илдус. Сәсән драматургияһы [Тест] / И. Бүләков, филология фәндәре кандидаты**
**//Ағиҙел. - 1988. - №11. - Б. 106 - 114.**

Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов (1888 - 1966), халыҡтың ауыҙ-тел ижады мирасын йыйыу (1906 - 1941), халыҡ мәғарифы өлкәһендә эшләү (1912— 1937), Әҙәбиәт һәм тел ғилми-тикшеренеү институтында фольклорҙы фәнни өйрәнеү (1938 -1941) менән бер рәттән, башҡорт совет драматургияһын нигеҙләүгә һәм шуның аша профессиональ башҡорт театр сәнғәте формалашыуға ҡиммәтле өлөш индергән культура эшмәкәрҙәренән ине.

Төрлө матбуғатта теркәлгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1919 йылда Стәрлетамаҡта асылған Башҡорт дәүләт театры спектаклдәренең иң тәүгеләре рәтендә Мөхәммәтша Буранғоловтың (ҡулъяҙмаларында яҙыусы үҙен Мөхәммәтша Буранғол тип йөрөтә) «Ашҡаҙар» тигән пьесаһы атала. Шунан башлап М. Буранғол исеме театрыбыҙ репертуарында бер нисә тиҫтә йыл буйына һаҡланған әҫәрҙәр авторы булараҡ тарихҡа ингән. Йәғни

профессиональ башҡорт театры сәңғәтенең формалашыуы һәм нығыныуы (20 -30-сы йылдар), халыҡ араһында киң танылыу алыуы М. Буранғол пьесаларынан айырылғыһыҙ.

Уҡытыусы һәм үҙешмәкәр фольклорсы М. Буранғолов «Ашҡаҙар» пьесаһы менән башҡорт драматургияһына һәм театр сәнғәтенә тәүге нигеҙ ташын һалышты һәм шуға бар ғүмерен бирҙе. Әммә бөгөнгә тиклем М. Буранғолов драматургияһы һәм, ғөмүмән, уның ижады, эшмәкәрлеге, билдәле сәбәптәр арҡаһында, махсус рәүештә өйрәнелмәне, уларҙың байтағы үҙ ваҡытында сәхнәләрҙә ҡуйылыуына һәм уңыш менән барыуына ҡарамаҫтан, яҙған өс тиҫтәләп пьесаларына дөйөм баһа биреү генә түгел, күҙәтеү ҙә яһалманы - тыйылды.

Яҙыусының тыуыуына 100 йыл тулыу уңайы менән М. Буранғолов драматургияһын бөгөн беренсе тапҡыр тулы килеш, идея-тематик яҡтан булһа ла, байҡау мөмкинлеге тыуҙы.

Уҡытыусы булараҡ, М. Буранғолов халыҡты аң-белем, әхләҡ-әҙәп, әҙәби художество һәм культура-эстетик яҡтан тәрбиәләүҙе лә үҙ бурысынан күрә һәм театр сәнғәтен ошо йүнәлештәге мөһим саралар рәтенә ҡуя. Әммә был мәлдәге театр менән драматургия әлегә формалшыу, революцион яңы ысынбарлыҡты үҙләштереү һәм уны профессиональ кимәлдә сағылдырыу эшен башлап ҡына тора ине. Быуаттар һуҙымында шымара, ҡалыплаша, конкрет-тарихи төҫ ала килгән фольклор материалы революция дәүерендәге ҡатмарлы шарттарҙа эҙләнеү юлына аяҡ баҫҡан башҡорт драматургияһына үҫешен тәьмин итерлек ныҡлы ерлек бирҙе. Әҙәбиәт менән сәнғәттә яңы традицияларҙың барлыҡҡа килеүендә был тәбиғи, хатта законлы бер күренеш булды.

Халыҡтың ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәренә, үлемһеҙ тарихи әҫәрҙәренең тормошсан рухына һәм халыҡсан характерына, фекер тәрәнлегенә, гуманлылығына һәм тәьҫир көсөнә бөтә күңеленән ғашиҡ фольклорсы шуға күрә тәүге драма әҫәрҙәрен ижад иткәндә уның нигеҙенә фольклор материалын һала. Бының өсөн М. Буранғолов 1910 йылда Стәрлетамаҡ

районының Ҡарасай ауылынан Яхъя йырсы һөйләгәндән яҙып алған мәшһүр «Ашҡаҙар» йырының һағышлы, тәьҫирле тарихын файҙалана.

Киң билдәле был легендала һүҙ, яратышып, яңы ғына өйләнешкән егет менән ҡыҙҙың бәхетһеҙ яҙмышы һунарға сыҡҡанда, йәш ирҙең, һыуға батып, вафат булыуы, ҡатынының ошо фажиғәгә ҡарата йыр сығарыуы тураһында бара.

М. Буранғолов ошо ҡыҫҡа ғына ваҡиға нигеҙендә «Ашҡаҙар» исемендәге тәүге пьесаһын яҙа. Традицион жанр талаптарына тап килтерергә тырышып, ул әҫәргә, уның сюжет һыҙығына ярашлы, характерҙар үҫешен асырҙай өҫтәлмә күренештәр индерә, төп ваҡиғаның экспозиция өлөшөн байтаҡҡа киңәйтә.

М. Буранғолов фольклор материалына нигеҙләнгән тарихи-этнографик пьесаларҙы артабан да күп кенә яҙҙы. Улар башҡорт совет драматургияһы формалашыуҙың тәүге йылдарында тотош бер тематик-стиль йүнәлешен барлыҡҡа килтерҙе. Ул яҙған «Зәнгәр шәл» (1918), «Буранбай» (1920), «Тәфтиләү» (1921), «Алпамыша» (1922), «Сәлим кантон» (1923), «Ялан Йәркәй» (1923 - 1926), «Ҡара юрға» (1924), «Шәүрәкәй» (1925 - 1948), «Мөфти ҡыҙы Фатима» (1926), «Башҡорт туйы» (1926 - 1943), «Гөлсәсәк» (1939), «Таштуғай» (1938 - 1959) пьесалары шул типтағы әҫәрҙәргә ҡарай. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ дәүерендә төрлө яҙмышҡа юлыҡты.

М. Буранғоловтың Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһында һаҡланған шәхси делоһындағы бер ҡағыҙҙа ул үҙ ҡулы менән яҙған: «1918 йылда Ҡазан театры директоры Ғ. Ҡарыевҡа «Ашҡаҙар», «Зәңгәр шәл» пьесаларының ҡулъяҙмаларын тапшырҙым», - тигән юлдар бар. «Ашҡаҙар» пьесаһын татар театры шул уҡ йылда сәхнәгә ҡуя. Ул Өфөлә лә, Ырымбурҙа ла сәхнәләштерелә.

М. Буранғоловтың был типтағы әҫәрҙәренән «Ашҡаҙар», «Башҡорт туйы» тигән драмалары ғына баҫма рәүештә донъя күрә алған. Уларҙың тәүгеһе - 1923 йылда Ырымбурҙа, икенсеһе 1929 йылда Өфөлә айырым китап итеп баҫтырылып сығарылған.

Драматургтың ошо бер типҡа ҡараған ун өс пьесаһының баҫылып сыҡҡан үрҙәге икеһенән ҡала бөгөнгө көнгә ҡулъяҙма хәлендәге дүрт әҫәре килеп еткән. Улар - «Ялан Йәркәй», 1948 йылғы ике варианттағы «Шәүрәкәй», «Гөлсәсәк» һәм «Таштуғай» драмалары. Уларҙың да «Гөлсәсәк» исемендәгеһе бөтәһе алты вариантлы «Башҡорт туйы» пьесаһының өсөнсө вариантынан ғибәрәт.

Бөгөнгәсә йөкмәткеләре билдәһеҙ булған «Буранбай», «Тәфтиләү» драмаларының, «Ҡара юрға» комедияһының, шул уҡ исемдәрҙә хәҙер ҙә киң билдәле халыҡ йырҙарының тыуыу тарихына, легендаларына нигеҙләнеп, уларҙағы төп мотивтарҙың драматургик ҡалыптарға күсереп яҙылыуы, «Алпамыша» пьесаһының - популяр әкиәткә, «Сәлим кантон», «Мөфти ҡыҙы Фатима» драмаларының халыҡ риүәйәттәренә таянып ижад ителеүе генә мәғлүм.

Яҙыусының шул әҫәрҙәре араһынан «Зәңгәр шәл», «Буранбай», «Тәфтиләү», «Башҡорт туйы» (һәм «Гөлсәсәк») тигәндәрен музыкаль драма жанрына айырып ҡуйыуы ла иғтибарға лайыҡ. Йәғни был пьесаларҙа, ғөрөф -ғәҙәт, йола, тарихи-көнкүреш элементтарынан тыш, йыр-музыка, уйын-көлкө күренештәре лә киң генә урын алған.

Ошо үҙенсәлекте һыҙыҡ өҫтөнә алып, драматург үҙенең нәүбәттәге сәхнә әҫәренән «Ялан Йәркәй» драмаһының титул битенә «башҡорттарҙың – моңло «Ялан Йәркәй», «Ҡара урман», «Бөҙрә тал» исемле көй-йырҙарынан алып яҙылған өс бүлемле, биш һүрәтле ҡайғылы ваҡиға» тип күрһәтеп тә ҡуйған.

Үрҙә аталған өс йырҙың да тыуыу тарихы халыҡ хәтерендә мәшһүр - ҡурайсы һәм йырсы Йәркәй - Буранбай яҙмышы менән бәйле. М. Буранғолов шуға ла уларҙың өсөһөн дә һәр ҡайһыһы айырым-айырым өс шаршауға бүлеп күрһәтелгән һәм һәр ваҡиға үҙәгендә бер үк герой хәрәкәт иткән «Ялан Йәркәй» тигән сәхнә әҫәренә берләштерә. Шулай итеп, драмалағы күренештәрҙең логик бәйләнеше барлыҡҡа килә.

М. Буранғолов «Ялан Йәркәй» пьесаһында ла, «Ашҡаҙар» драмаһындағы кеүек үк, тарихи ысынбарлыҡҡа, тормош күренештәренә социаль анализ яһауҙы маҡсат итмәй, төп иғтибарын аяныс хәлдәрҙе драматургик формала сағылдырыуға ғына йүнәлтә. Уның өсөн фольклор ерлеген һәм сығанаҡтарҙы боҙмау, уның демократик, гуманистик рухын һаҡлау ҙурыраҡ әһәмиәткә эйә. М. Буранғолов өсөн ижадының яңы сәнғәтте үҫтереүгә йүнәлтелгән эстетик әһәмиәте түгел, ошо яңы сәнғәтте тыуҙырыуҙа актив ҡатнашыуы ҙурыраҡ мәғәнәгә эйә булды. Шуға ла ул халыҡ ижадындағы тормошсан мотивтарҙы пьесаларында бер яҡлы файҙаланды, ундағы хәл-шарттарҙы сәхнә әҫәренә механик рәүештә күсереп, профессиональ драматургия үҙенсәлектәрен һаҡлап еткермәне.

М. Буранғолов тәрән һәм саф һөйөү тойғоһон сағылдырыусы «Шәүрә килен» йырының да тыуыу тарихындағы ваҡиғалар үҙәгенә ҡуйылған ҡатын-ҡыҙ ирке, кеше үҙ аллылығы, рухи азатлыҡ мотивтарында дөйөм кешелек тәбиғәтенә хас күркәм сифаттарҙы күрә һәм шул тарихты тулы килеш «Шәүрәкәй» тигән пьесаһында файҙалана.

М. Буранғоловтың үҙ ҡулы менән яҙып ҡалдырылған «Шәүрәкәй» йырының легендаһында (автограф ошо юлдар авторында һаҡлана) түбәндәге юлдар бар: «Малыбай ҡарттың өлкән улы үлгәс, килене һәм малдарыятҡа китмәһен өсөн, ул ун йәшлек улы Сураҡайға ҡырҡ йәшлек тол ҡалған еңгәһе Аҫылбикәне ҡатынлыҡҡа алып бирә. Аҫылбикәнең утыҙ биш йәшлек Юлғотло исемле үгәй улы ла була. (Тимәк, үҙенән егерме биш йәшкә оло Юлғотло хәҙер Сураҡайҙың да үгәй улы булып сыға. - И. Б.).

Ошо хәлдән һуң һигеҙ йыл үткәс, Малыбай ҡатынын айырған Юлғотлоға ун һигеҙ йәшлек Шәүрәне йәрәшә. Килен төшөрөүҙән алда бер-береһен күрмәгән һәм белмәгән Сураҡай менән Шәүрә, яланда көтмәгәндә осрашып, ғашик булышалар. Килен булып килгәс тә, Шәүрә менән Сураҡай мөхәббәте һүрелмәй. Йола, гөрөф-ғәҙәттәрҙең ҡаршылығына ҡарамайынса, юлын табып, былар һуңғараҡ ҡауыша һәм үҙ бәхетен таба».

М. Буранғолов пьесаһына был персонаждарҙың барыһы ла легендалағыса яҙмыштары менән индерелгән. Бында ла өйләнешеү эшен Малыбай яйлай, Юлғотло менән Сураҡай ҙа, Шәүрә лә әлегәсә бер-береһен күреп белмәйҙәр. Шуға әҫәрҙең тәүге шаршауы был өе персонаждың аймылыш тойғо кисереүҙәренә ҡоролған.

М. Буранғоловтың фольклор материалдарынан килгән тарихи-этнографик күренештәр нигеҙендә яҙылған пьесаларынан «Башҡорт туйы» исемендәге музыкаль драмаһы башҡорт театр сәнғәте һәм драматургияһы тарихында айырыуса шау-шыулы яҙмыш кисергән, бер нисә ҡат эшкәртелеп, театр репертуарында тиҫтәләгән йылдар буйы һаҡланған, сәхнәләрҙә ҙур уңыш ҡаҙанған әҫәрҙәрҙән.

«Башҡорт туйы» пьесаһы тәүләп 1926 йылда Өфе театр техникумы студенттары тарафынан уйнала һәм спектакль матбуғат аша киң билдәлелек ала. Режиссер-педагог В. Мортазин уны Башҡорт дәүләт театрында ла сәхнәләштерергә була. Автор менән бергә тексҡа бер аҙ төҙәтмә индереп, ул пьесаны тиҙҙән ҙур сәхнәгә лә сығара.

Башҡорт театрының ун йыллыҡ юбилейына арнап, улар икеһе исеменән пьесаны 1929 йылда айырым китап итеп баҫтырып сығара.

Пьеса йыйын менән башланып китә. Халыҡ Ишкилде байҙың ҡыҙы Гөлғәйшәне байлығы, батырлығы менән даны сыҡҡан Хәнәлигә кейәүгә бирергә йыйылған. Әммә мәсьәләнең икенсе яғы ла билдәле була: бала сағында ҡыҙы ҡаты ауырып киткәс, уны батыр егеткә кейәүгә бирергә нәҙер әйтеп, бай Гөлғәйшәнең ҡолағын тешләткән икән. Ләкин егет ҡапыл ғәйеп булған. Хәҙер иһә нәҙер үтәлергә тейеш. Ҡыҙ үҙе лә: «Мин йүгерек атҡа бирелергә күлдәклек түгел, көрәшеп еңгән батыр ғына мине ала алыр», - тигән шартты тота.

Шул мәлдә майҙанға Һаҡмар буйынан килгән етем, ярлы Буранбай сыға һәм Хәнәлиҙе көрәштә еңә, Гөлғәйшә, вәғәҙәһе буйынса, иптәшлек бүләге итеп, егеткә балдаҡ һуҙа, уның атаһы менән әсәһе лә йәштәргә фатиха бирә. Тап ошо ваҡыт ҡустыһы Хәнәлиҙе икенсе бисәлеккә йәш ҡыҙ алыуы менән ҡотларға тип, стражниктарын эйәрткән кантон килеп төшә.

Хәлде аңлағас, үҙ һүҙенең өҫтөн сыҡмауына ғәрләнеп, ул Буранбайҙы ҡулға алдыра һәм, Ишкилде менән үҙенең алдан килешеүенә ярашлы рәүештә, ҡыҙҙың Хәнәлигә бирелергә тейешлеген талап итә. Кантондың баш-баштаҡлығына, ғәҙелһеҙлегенә риза булмайынса, ярлылар майҙанды ташлап китә, байҙар үҙҙәре генә күңел асырға мәжбүр була.

Артабан пьесала башҡорт халыҡ туй йолаһының айырым элементтары эҙмә-эҙ күрһәтелә. Шул арала Буранбайҙың, паспортһыҙ йөрөгәне өсөн, Себергә ебәрелеүе һәм бер нисә айҙан һуң уның «үлеп» ҡалыуы тураһында хәбәр тарала. Шул юл менән Хәнәли яҡлылар Гөлғәйшәне бай улына кейәүгә сығырға күндерә. Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, халыҡ араһында Буранбайҙың ҡасып ҡотолоуы хаҡында хәбәр ишетелә. Икенсе берәүҙәр Гөлғәйшәнең ҡолағын тешләгән батыр егеттең дә иҫән булыуын белеп һөйләй. Гөлғәйшә иһә Буранбайҙы юкһына. Ул хатта Хәнәлигә: «Ҡотолдор һин мине, минең йәнем, күңелем һиңә бәйләнмәй», - тип тә ҡарай. Шулай ҙа ул яҙмышына, йолаға буйһона.

Буранбай иһә ысынында тотҡонлоҡтан ҡасып ҡотола һәм, Хәнәли йәш килен алып ҡайтыуға, улар йәйләүенә килеп сыға. Һөйгәнен күрергә тип, ул инде бер ай самаһы ошо тирәлә уралған икән. «Ҡыҙҙы Хәнәли ҡулынан ҡотҡарып алмай тороп, мин бер ваҡытта ла тынyслана алмам», - ти ул. Байҙың көтөүселәре ярҙамы менән Буранбай һөйгәнен тегенән тартып алмаҡсы. Ул бар халыҡ алдында үҙенең балдаҡ менән бүләкләнгән батыр көрәшсе Буранбай, ул ғына ла түгел, ҡыҙҙың атаһын ҡараҡтар баҫымынан ҡотҡарып ҡалған, шуның өсөн күптән үк Гөлғәйшәнең буласаҡ кейәүе тип иғлан ителгән Уралбай булыуын асып һала, Ишкилдене ҡотҡарғанда алған яра эҙен, балдағын күрһәтә. Гөлғәйшә лә үҙенең Буранбайҙыҡы булырға һәм уның менән китергә теләүен белдерә.

Әҫәр аҙағында дошманын үлтерергә ынтылған Хәнәлигә үҙ бысағын ҡаҙап, Буранбай менән Гөлғәйшә сығып ҡасалар.

Пьесалағы бөтә ошо ваҡиғалар туй йолаһын үтәү фонында күрһәтелә. Урыны менән йола элементтары, туй күренештәре, уйын-көлкө артыҡ ҙур урын алып та китә, һәм шул процеста Буранбай менән Гөлғәйшәнең үҙ

мөхәббәттәре өсөн көрәш мотивы бөтөнләй онотолғандай итә. Шуның өсөн пьеса үҙ ваҡытында ҡаршылыҡлы баһа алды. Йырлау, ҡурай уйнау, һамаҡ, бәйет, сеңләү, теләк әйтеүҙәр кеүек йола, ғөрөф-ғәҙәт күренештәренән мул ҡоролған спектаклде шул дәүер тамашасылары «тормош уйыны» итеп, һәр ваҡыт яратып ҡараһа һәм ихлас ҡабул итһә, айырым әҙәбиәтсе һәм тәнҡитселәр уның драматургияның традицион, классик тәбиғәтенән ситләшеүе, этнографизм, көнкүреш элементтарының күберәк урын алғанлығы өсөн оҡшатып еткермәне, иске рухлы әҫәр тип тәнҡитләне.

М. Буранғолов үҙе лә режиссер В. Мортазиндың пьесаға уйын, бейеү, балет элементтарын күп индереүе менән килешеп бөтмәй. Шуға 30-сы йылдар башында ул «Башҡорт туйы» пьесаһының йәнә бер, яңы вариантын яҙа һәм унда ваҡиғаларҙың социаль айышын, геройҙар менән улар эш – хәрәкәтенең эске рухын асығыраҡ күрһәтеүгә өлгәшә. Унда байҙар менән ярлылар араһындағы синфи ҡаршылыҡтар, халыҡтың бай һәм түрәләр ғәҙелһеҙлегенә, кешелекһеҙлегенә ҡаршы көрәштә берҙәм көскә әәүерелеүе иғтибар үҙәгенәрәк алына һәм был хәрәкәт шул уҡ туй йолаһын үтәү фонында күрһәтелә.

Феодаль йәмғиәттен ҡапма-ҡаршы ике яҡҡа бүленгән булыуы, байҙар менән ярлыларҙың синфи айырымлығы яңы варианттағы пьесаның башында уҡ һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Ике синыф көстәренең киҫкен бәрелешен автор һәр ваҡыт күмәк кешеләр ҡатнашлығында күрһәтә. Байҙар менән түрәләргә күмәк ярлыларҙы ҡаршы ҡуйыу аша пьесала үҙ яҙмышына хужа булырға, яуыҙлыҡҡа ҡыйыу ҡаршы сығырға һәләтле актив халыҡ массаһы кәүҙәләндерелә. Әҫәрҙә халыҡ массаһының һаман ҡеүәтләнә, ойошҡан төҫ ала барыуы күҙәтелә. Шуның аша драманың социаль конфликты туҡтауһыҙ киҫкенләшә килә, бәрелеш ҡораллы ҡуҙғалышҡа тиклем үҫтерелә.

Ошо яҡтан ҡарағанда, пьесаның был варианты реалистик драма талаптарына тулыраҡ яуап бирә. Әммә, пьесаның исеменә сығарылған идея йүнәлешенә һәм фольклор материалының үҙенсәлегенә тоғролоҡ һаҡлап автор этнография, ғөрөф-ғәҙәт, йола элементтарын сағылдырыуҙы ла күҙ уңында нык тота. Шуға ла ул урыны менән реалистик тормош күренештәрен йә романтик, йә натуралистик һүрәтләүҙәр менән аралаштырып ебәрә, һәм улар пьесаның социаль көрәш мотивын һүрәнәйтә, сюжет динамикаһын һүлпәнәйтә, хатта тарҡатып та ебәрә. «Башҡорт туйы» драмаһы ырыуҙар дәүерендәге синфи мөнәсәбәттәрҙе реаль кәүҙәләндереүе менән әһәмиәтле. Унда, бер яҡтан, төп массаның ауыр яҙмыш, йә бер-золом кисереүе күрһәтелһә, икенсе яҡтан, ҡомһоҙ һәм яуыз уйлы Йәнгилде бай, уҫал Йәнтүрә кантон, байлыҡҡа таянып һәм түрәләргә арҡаланып, халыҡты төрлөсә йәберләүсе, талаусы Тураҡай, Ханнан, Баҙарғолише феодалдарҙың ғәҙелһеҙлеге, йыртҡыслығы киҫкен фаш ителә, һәм ошо тигеҙһеҙлектең азатлыҡ хәрәкәтенә ерлек биреүе кәүҙәләндерелә.

Шулай итеп, 30-сы йылдарҙағы вариантында пьеса – асыҡ драматик һыҙатланыш, әҫәрҙең конфликты - социаль үткерлек һәм тәрәнлек, ҡаршылыҡ тормошсан сиселеш алған.

М. Буранғолов 1939 йылда был пьесаның «Гөлсәсәк» тигән йәнә бер вариантын яҙа. Ә инде «Башҡорт туйы» пьесаһының башҡорт әҙәбиәте менән сәнғәтенең 1941 йылда Мәскәүҙә үткәрелергә тейешле декадаһы репертуарына индерелеү уңайы менән автор уны йәнә бер тапҡыр төҙәтеп сыға. Ҡульяҙма пьесаның рус телендәге тексы ла әҙерләнә. Әммә, һуғыш башланып китеү сәбәпле, пьеса сәхнәгә сығарылмай ҡала. Шулай ҙа драматург «Башҡорт туйы» пьесаһына тағы ла әйләнеп ҡайта һәм 1941, 1942, 1943 йылдарҙа уның йәнә өс вариантын әҙерләп ҡалдыра, Шулай итеп, бер пьесаның алты варианты барлыҡҡа килә. Әммә һәр ҡайһыһының нигеҙендәге социаль-синфи тигеҙһеҙлек мотивы төп урында ҡалдырыла, һәм ярлы халыҡ менән байҙарҙың бәрелеше төп ҡаршылыҡты билдәләй, ә йола, көнкүреш элементтары

торған һайын кәмей һәм күренештәрҙе бер-береһенә бәйләү сараһы ғына булып ҡала бара.

Ошо уҡ характерҙағы «Таштуғай» драмаһын да автор төрлө варианттарҙа яҙа. Ул 1938 йылда, легендаға таянып, «Таштуғай» тигән проза әҫәре яҙа, һуғыш йылдарында уны либреттоға әйләндерә, 1958 йылда инде шул нигеҙҙә «Таштуғай» тигән пьеса яза һәм 1959 йылда уның төҙәтелгән вариантын әҙерләй.

«Таштуғай» пьесаһы ваҡиғалар ағышы, социаль конфликты яғынан «Гөлсәсәк» драмаһына оҡшаш. Әммә ундағы хәл-шарттар бүтәнсә ерлектә сағылдырылып, бәрелеш фажиғәле тамамланһа ла, ғәҙеллек барыбер яуыҙлыҡтан өҫтөн сыға.

Йәғни М. Буранғоловтың фольклор материалы нигеҙендә яҙылған күпселек пьесалары халыҡтың, үҙ иркен яҡлап, социаль көрәшкә аяҡ баҫыуын күрһәтеүгә арналған. Азатлыҡ өсөн көрәш хәрәкәтенең синфи ҡаршылыҡтар нигеҙендә ойошоуы әҫәрҙәрҙә төп мотив итеп алына һәм уның сәбәптәре тарихи дөрөҫлөгөндә яҡтыртыла. Уларҙа һәр ваҡыт ҙур ғына урын алған тормош-көнкүреш, йола-ғәҙәт элементтары ла шул реаллекте көсәйтешә, драмаларҙы милли колоритлы итешә. Тамашасылар был пьесаларҙа үҙенең яҙмышын, тарихи хәкикәтте күрҙе, һәм шуға улар 20 - 30-сы йылдарҙа иң популяр сәхнә әҫәрҙәре булып танылды. Халҡыбыҙҙың, хәҙерге оло быуыны М. Буранғоловтың фольклор-этнографик пьесаларын әле булһа һағынып иҫкә ала, яратып-тулҡынланып һөйләй.

Икенсенән, М. Буранғоловтың ошо характерҙағы пьесалары башҡорт совет драматургияһының барлыҡҡа килеүе осорондағы милли үҙенсәлектәренән береһен айырым-асыҡ билдәләне, һәм фольклор материалына таянған социаль-тарихи драманың тарихи-этнографик биҙәкле төрөн барлыҡҡа килтерҙе.

М. Буранғолов фольклор ерлекле тарихи материалдар нигеҙендә лә байтаҡ пьесалар яҙҙы. «Ҡараһаҡал» (1930- 1939) драмаһы, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» (1940) трагедияһы, «Мәргән» (1939), «Туҡтар менән Гөлнур»

(1944- 1947) либреттолары башҡорт халҡының күптән үткән тормошондағы ваҡиғаларҙы сағылдырыуы менән хәҙер айырыуса әһәмиәтле.

«Ҡараһакал» драмаһы XVIII быуаттың тәүге яртыһында булып үткән халыҡ ҡуҙғалыштарының береһен яҡтыртыуға арнала.

Пьесала дүрт тиҫтә персонаж бар. Автор уларҙың һәр ҡайһыһын үҙ дәүерендәге ижтимағи тормошта үтәгән реаль роленә тап килтереп ҡылыҡһырлай. Ҡараһаҡал (ысын исеме – Миңнеғол), мәҫәлән, башҡорттарҙы батша ҡыҫымына, рус колонизаторҙарына һәм урындағы чуыз түрә-тархандарға ҡаршы яуға күтәреүсе ил батыры итеп кәүҙәләндерелә. Уның атаһы Нияз ҡарт та Күсем, Аҡай, Алдар, Килмәк яуҙары ваҡытында табын, тамъян, юрматы ырыуҙарын батшалыҡҡа ҡарты ҡуҙғатышҡан кеше. Ҡараһаҡалдың төп таяныстарынан береһе булған Айбулат бынан алдағы Аҡай болаһында ҡыпсаҡ, үҫәргән яугирҙәренә етәкселек иткән. Шуның өсөн ҡулға алынған һәм төрмәгә ташланған. Унан ҡасып, яуға ҡушылып китә. Айсыуаҡ менән Алдар ҡарттар ҙа азатлыҡ хәрәкәтенә кәңәш-аҡыл менән ярҙам итергә тырышып ятҡан аҡһаҡалдарҙан. Мырҙа, Йәғфәр, Әптерәй, Йәнбирҙе кеүек Аҡай болаһында ҡатнашҡан ир-егеттәр ҙә, төрмәнән ҡасып, ҡулға ҡорал алған кешеләрҙән.

Башҡорттарҙың ирек өсөн күтәрелешендә ҡыҙы Мария менән бергә ҡасҡын рус крәҫтиәндәренең башлығы Антон да үҙ бәхеттәрен яулап ҡатнаша, уртаҡ маҡсаттар, тиңлек, тигеҙлек өсөн аяуһыҙ һуғыша. Уларҙың иҙелгән бүтән халыҡтар менән теләктәшлеге аша пьесала хеҙмәтсәндәрҙең интернациональ дуҫлыҡ - берҙәмлеге асыҡ кәүҙәләндерелә.

Халыҡ араһында, түрәләрҙең мал-мөлкәт вәғәҙә итеүенә ышанып, рус ҡасаҡтарын тотторорға йөрөүсе Әзүк менән Вәли ише һай, тар ҡарашлы йәки буталып йөрөүсе әҙәмдәр ҙә бар. Әммә, күҙҙәре асылып, ахырҙа ундайҙар ҙа дөйөм хәрәкәткә ылығып китә.

Пьесала ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер ҙә тарихҡа билдәле ике йөҙлөлөгө менән тулы һынландырыла. Уның тоғро башкиҫәр-вәзире Торсонбай менән

башҡорттар яуына изге ниәттән ҡушылған икенсе вәзире Яҡшембәт бер-береһенә киҫкен ҡаршылыҡта асыла.

Өфө губернаторы Урусов, ҡанһыҙ полковник Тәфкилев, офицер-карателдәр Языков, Павлодский йөҙөндә халыҡтың, үҙ хоҡуғын яҡлап, яуға күтәрелешен баҫтырыусы власть вәкилдәре һынландырыла. Улар менән бергә батшаға хеҙмәт итеүсе офицер Максимов халыҡтың азатлыҡ көрәшенә теләктәш демократик ҡарашлы рус интеллигенцияһының алдынғы вәкилдәрен кәүҙәләндерә.

Азатлыҡ хәрәкәтенә хыянат юлына баҫҡан Абдулла, Сөләймән, Ибрай һымаҡ мөртәт әҙәмдәр пьесала күп болаларҙа батша яҡлы булып даны сыҡҡан Таймаҫ, Вәлит тархандарҙың, Байдәүләт, Ҡорамша байҙарҙың әшәкелегенә терәк итеп һүрәтләнә, уларҙың ҡылығы аяуһыҙ фашлана. Пьесаның финалында Ҡараһаҡал әйткән һүҙҙәрҙә азатлыҡ көрәшендә ҡатнашҡан бар халыҡтың оптимистик рухы асыҡ сағыла: «Илдең бер нисә батырының ҡыҙыл телен кисеү менән - ил телен киҫә, илдең ташҡан йөрәген, тулҡынын баҫа алмаҫһығыҙ! Бына ил һеҙҙең телегеҙҙе шундай итеп киҫер - һеҙҙәй тархандар мәңге һөйләй алмаҫ!»

«Иҙеукәй менән Мораҙым» пьесаһына драматург 1943 йылғы ҡулъяҙмаһында (ул 1940 йылда «Октябрь» журналында баҫылған) «халыҡ телендә һаҡланып килгән фольклор материалдарына нигеҙләнеп яҙылған өс шаршаулы, алты картиналы трагик әҫәр» тигән аңлатма биргән.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһында һаҡланған М. Буранғоловтың шәхси эш ҡағыҙҙары араһында яҙыусының ошо пьесаның тыуыу тарихына ҡағылышлы аңлатмалары ла бар. Автор әҫәрен «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосына һәм уға ҡағылышлы өс сығанаҡҡа таяныуын күрһәтә.

Был сығанаҡтарҙың береһе хаҡында «Рухи тамырҙар» (Өфө, 1984) китабында проф. Ә. Харисов Стамбул университеты китапханаһында үҙе уҡыған «ҡулъяҙма материалға таянып, Иҙеүкәйҙең төмән ырыуындағы манғыт ҡәбиләһенән булыуын күрһәтә, уның улы Нуретдин йәки Нурадин

бейҙең ғүмере буйы башҡорттар араһында йәшәүен һәм башҡорттарҙың уны Мораҙым тип йөрөткәнлеген» дәлилләй (215-216 б.).

Мораҙымдың ейәне Шихмамай атаһы Муса мырҙа хаҡында түбәндәге ҡобайырҙы сығарған:

*Иҙел башы Ирәмәл тау*
*Минең атам Мусаның*
*Иле ҡунған ере ине;*
*Яйыҡ башы ҡара урман*
*Минең атам Мусаның*
*Яҙ йәйләгән ере ине;*
*Ҡыҙыл, Өйшүҡ,Биштамаҡ*
*Минең атам Мусаның*
*Ҡыш ҡышлаған ере ине…*

*(216 - сы бит)*

Аталған тау һәм йылғаларға ҡарал, Иҙеүкәй менән Мораҙым ул-ейәндәренең хәҙерге Учалы, Әбйәлил, Белорет районы ерҙәрендә көн күргәнлеген асыҡлап була. Учалы районында Муса исемендәге ауыл булыуы ла шуға бер кеүәт. Шуларға ҡарап, Иҙеүкәйҙең дә, Мораҙымдың да, Шихмамай (йәки Мамайҙың) да башҡорт кешеләре икәнлеге асыҡлана. Йәғни М. Буранғолов пьесаһынын төп геройы Алтын Урҙа ханлығының тоғро яугире Идете (йәки Еҙеге) түгел, ә Уралдағы ырыу кешеләренән булып сыға. Быны пьесаһын «халыҡ телендә һаҡланып килгән фольклор материалдарына нигеҙләнеп» яҙған автор әҫәрҙең прологында асыҡ билдәләп үтә. Трагедиялағы Иҙеүкәй үрҙәге эпоста күрһәтелгән урындарҙа йәйләүсе ырыу батырҙарынан. Прологта уларҙың йәйләүе әлеге Ирәмәл тауы тирәһенән баш алыусы Ағиҙел буйында торған бер ваҡиға күрһәтелә. Ул башҡорт ырыуҙарының Алтын Урҙа ханлығы ҡул аҫтында яфа сиккән дәүеренә ҡарай. Пьесаның прологы героик характерҙағы инештән ғибәрәт. Ундағы идея-тематик йүнәлеш тә, халыҡ, ил яҙмышына бәйле проблема ла, ҙур масштабтағы бәрелеш тә, мөһим конфликтты үҙ иңенә күтәрерҙәй монументаль образ-характерҙар ҙа, киҫкен хәл-шарттар ҙа жанр талаптарына

тулы яуап бирерлек үҙенсәлектәрендә сағылдырылған һәм улар әҫәрҙең буйынан-буйына шул һыҙаттарында кәүҙәләндерелгән. Шул яҡтары менән «Иҙеүкәй менән Мораҙым» пьесаһы башҡорт драматургияһындағы милли колоритлы тәүге трагедиялар рәтендә ҡаралырға лайыҡлы әҫәр. М. Буранғоловтың «Мәргән» һәм «Туҡтар менән Гөлнур» тигән либреттоларында ла халыҡтар азатлығы өсөн көрәш мотивы үҙәккә ҡуйылған. Тик уларҙың тәүгеһендә башҡорт һәм нуғай ярлыларының Мәргән етәкселегендә яуыз нуғай ханлығына ҡарты көрәше, Мәргәндең һөйгәне Маянды тотҡонлоҡтан ҡотҡарыу теләге менән тап килтерелеп, шәхси планға ҡайтарыбыраҡ ҡалдырылһа, икенсеһендә башҡорттарҙың XVI быуат баштарында үҙҙәрен аяуһыҙ йәберләүсе тархан, бейҙәр иҙеүенә ҡаршы күтәрелеүе Туҡтар менән Гөлнурҙың үҙ мөхәббәттәре өсөн дә көрәшеүе, тархан ҡустыһы Ишнияз менән яһил яһаҡсы улы Ишҡужаның да шул ҡыҙҙы һәр ҡайһыһы үҙенә алырға тартышыуы фонында яҡтыртыла. Йәғни социаль-синфи бәрелеш уларҙа шәхес азатлығын, һөйөү үҙ аллылығын, мөхәббәт иркен яҡлау мотивы менән үреп бирелә. Бер үк ваҡытта Мәргән менән Маяндың тәүге әҫәрҙәге ярлы Юламан, Сәрсенбай, Һағынбай, Мәхмүт кеүек азатлыҡ көрәшселәре, Туҡтар менән Гөлнурҙың икенсе либреттола үҙ байҙары һәм түрәләре яһиллығына, ғәҙелһеҙлегенә ҡаршы яуға күтәрелгән Иркәбай, Малыбай һымаҡ халыҡты ойоштороусы, ирек даулаусы ир-егеттәр сафында берҙәм хәрәкәт итеүе улар теләк-ынтылышының уртаҡ булыуын дәлилләй, көрәштең дөйөм рухын, социаль-антагонистик характерын билдәләй.

М. Буранғоловтың тарихи пьесалары араһында икенсе төркөмдәге әҫәрҙәр бөгөнгөгә сағыштырмаса яҡын ысынбарлыҡты - Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы ваҡиғаларын сағылдырыуға арналған. Ундайҙарға барыһы ла ҡульяҙмала ҡалған «Йәшерен йөҙҙәр» (1921-1934), «Ирек көрәше» (1927), «Тулҡынлы көндәрҙә» (1929- 1948), «Көтөүсе» (1944) исемендәге пьесалары инә. Ләкин уларҙың күбеһе тулы килеш һаҡланмаған. «Йәшерен йөҙҙәр» пьесаһы тураһында, уның революция көндәрен яҡтыртыуға арналған булыуын белдереп, авторҙың

үҙ ҡулы менән яҙылған юлдарҙан башҡа мәғлүмәт тә, ҡульяҙма үҙе лә юҡ.

«Ирек көрәше» тигән драма 1929 йылда «Тулҡынлы көндәрҙә» исеме менән ҡайтанан үҙгәртеп яҙыла. 1948 йылдың 8 апрелендә Яҙыусылар союзы идараһы ултырышында был пьесаның нәүбәттәге варианты тикшерелә. Унда ҡульяҙма, нигеҙҙә, юғары баһалана, әммә, шәхес культы осороноң рухына эйәреп, авторҙың «етди кәмселектәре» күрһәтелә һәм пьеса хуплау тапмай, яңынан ҡарап сығыу тәҡдим ителә. Ләкин авторҙың шул пьеса йөкмәткеһен тулы, ентекле рәүештә яҙып ҡалдырған тексына ҡарағанда (ул Яҙыусылар союзы идараһында һаҡлана), ҡульяҙма пьесаның идея-тематик, проблематик әһәмиәте, ваҡиғаларҙың реаль, конкрет һүрәтләнеүе, образдарҙың аныҡ һынланышы, социаль-синфи конфликттың үткерлеге, тормош – санлығы һәм киҫкен хәл-шарттар фонында сиселеше яғынан етди иғтибарға лайыҡ булыуы күренә.

1948 йылдың 7 июнендә М. Буранғолов «Тулҡынлы көндәрҙә» драмаһы хаҡында былай тип яҙып ҡуйған: «Әҫәрҙә 1918 йылдың йәйенән 1919 йылдың мартына саҡлы Башҡортостанда булған хәл алына. Советтар төҙөлә, байҙар ере халыҡҡа бирелә. Атаман Дутов менән берлектә хәрәкәт итеүсе милләтселәр хөкүмәте халыҡтың шул теләгенә ҡаршы эш күрә башлай. Ер мәсьәләһенә бәйле халыҡ менән аҡтар хөкүмәте араһында ҡаршылыҡ тыуа. Унда совет кешеләренең формалашыуы ғына түгел, Коммунистар партияһы етәкселегендә көрәшкән халыҡтың теләгенә етеүе курһәтелә».

Пьесалағы ваҡиғалар үҙәгендә бер-береһенә социаль-синфи ҡаршылыҡта торған ике төркөм геройҙар хәрәкәт итә. Уларҙың береһе хеҙмәтсән халыҡты, революцион көрәшселәрҙе кәүҙәләндерһә, икенсеһе байҙар синыфын, контрреволюция элементтарын һынландыра. Төркөмдәрҙең һәр ҡайһыһы үҙенсәлекле типтарҙан тора. Бер шаршаулыҡ «Көтөүсе» пьесаһы идея-тематик йөкмәткеһе буйынса «Ирек көрәше» - «Тулҡынлы көндәрҙә» драмаһына ауаздаш. Бында ла Башҡортостанда 1918-

1919 йылдарҙағы милләтселек хәрәкәте, граждандар һуғышы ваҡиғалары яҡтыртыла.

Пьесала революцион үҙгәрештәр тәьҫирендә ауыл кешеләренең, Вәлиди үткәргән милләтселек идеяһының хеҙмәтсән халыҡ мәнфәғәтен түгел, ә синфи дошмандар ихтыяжын күҙҙәтеүгә ҡоролғанлығын аңлап алып, Советтар, большевиктар һәм Ҡыҙыл Армия тотҡан юлға баҫыуҙары ҡыҫҡа ғына, ләкин тормошсан картиналарҙа һәм ауыл ярлыһы, көтөүсе Ирекбай кисерештәре аша күрһәтелә. «Көтөүсе» пьесаһы тарихи вакиғаларҙы дөрөҫ яҡтыртыуы, кешеләр кисерештәрен тәрән һәм эшҡылылығы менән бәйлелектә, төп герой характерын үҫештә күрһәтеүе, бәрелештең үткерлеге, куренештәрҙең йөкмәткеле, ваҡиғаларҙың тығыҙлығы менән дә әһәмиәтле. Ул яҙыусының драматургик оҫталығы камиллашыуҙы ла дәлилләй. Сөнки әгәр тарихи-көнкүреш тематикаһындағы әҫәрҙәрендә ул фольклор-этнографик материалдан ситләшергә, уның йөкмәткеһен, сюжет һыҙығын, образдар характеристикаһын ижади үҙгәртергә теләмәһә, һуңғыраҡ пьесаларында, айырыуса үҙ дәүеренә хас, үҙе шаһит булған тормош күренештәрен, реаль ваҡиғаларҙы сағылдырған драмаларында художестволы дөйөмләштереүгә, әҙәби жанр законсалыҡтарын, заманса идея-эстетик принциптарҙы күҙәтеүгә нығыраҡ иғтибар ителә, ижади башланғыс тойомлораҡ була бара.

М. Буранғоловтың заман темаһына, актуаль мәсьәләләргә арналған пьесалары ла күп кенә. Шундайҙарға драматургтың «Әбйәлилдәр шайкаһы».(1926-1929), «Прокурор» (1930), «Ысын мөхәббәт» (1947), «Яңы тормошта – яңы кешеләр» (1949), «Наҙлы ҡыҙ» тигән пьесалары ла ҡараған, әммә уларҙың ҡулъяҙмаһы әлегә табылмаған. Ә бына «Колхозсылар» (1930), «Берлек» (1941), «Осрашыуҙар» (1943), «Өлгө» (1944), «Намыҫлы көс» (икенсе варианты - «Ҡыҙыл таш») (1947), «Гөлнур» (1948) тигән һәм бер шаршаулыҡ исемһеҙ бер пьесаһының (1946) ҡулъяҙма текстары яңыраҡ ҡына ҡул аҫтына килеп инде. Текстары беҙҙең көндәргә килеп етмәгән «Әбйәлилдәр шайкаһы» пьесаһының - 20-се йылдар уртаһында ҡоротҡослоҡтары асылған ҙур төркөм кешеләрҙең

реаль эш-ҡлыҡтарын фашлауға, «Прокурор» комедияһының ришүәтсе боҙоклоғон сатирик һүрәтләүгә, «Наҙлы ҡыҙ» әҫәренең - һуғыш осорондағы тыл кешеләренең рухи ынтылыштарын, әхләҡи күркәмлеген күрһәтеүгә, «Ысын мөхәббәт» драма-инсценировкаһының - һуғыш дәүерендәге һәм унан һунғы тыныс тормоштағы совет кешеләренең героик хеҙмәтен, патриотик тойғо юғарылығын, яңыса эшләү ынтылышын яҡтыртыуға, «Яңы тормошта – яңы кешеләр» комедияһының ауыл хужалығы өлкәһендә новаторлыҡ менән консервативлыҡтың бәрелешен асыуға арналғанлыҡтары ғына билдәле.

«Колхозсылар» пьесаһы башҡорт драматургияһында колхозлашыу хәрәкәтенең беренсе көндәрен сағылдырған тәүге әҫәр булыуы, шул процестары төп ҡаршылыҡтарҙы һәм ыңғай яҡтарҙы һүрәтләүе менән иғтибарға лайыҡ.

Пьесаның тәүге картинаһында Вәхит, Иҙелбай кулактарҙың Ғиләж сауҙагәрҙең, Ғәйнүш менән Әйүпише кулак ҡуштандарының синфи дошманлығы, коллективлашыуға ҡаршы йәшерен көрәш алып барыуы, мәкерлеге күрһәтелә. Артабанғы ике шаршауҙа волком секретары Хәсәнов, ауыл ярлылары Арыҫлан, Рәхмәт, Әлифә, Хәнифә, ҡыҙылармеец Мөхәммәт, комсомолка Мәрйәм һымаҡ яңылыҡҡа ынтылыусан, артелгә берләшеү идеяһын яҡлап, кулактарҙың синфи йөҙөн, йәшерен эштәрен фашлаусы тырыш, көр күңелле һәм рухы менән яңырған кешеләрҙенң колхоз ойоштороуҙағы талымһыҙлығы Ьынландырыла. Пьесалағы үһәр күренеш, ваҡиға һәм эшҡылыҡ колхозлашыу осороноң әүәлге ярлы хеҙмәтсәндәрҙең алдынғыға ынтылыу пафосы менән һуғарылған. Ошо дөйөм йәнлелек, күтәренкелек фонында синфи дошмандар мәкерлегенең көсһөҙлөгөн асыуы, яңылыҡтың күпселек кешеләр аңын киңерәк биләй барыуын һәм колхоздарҙьң көндән-көн нығына, үҫә, ауыл халҡы теләгенә тап килеүен пафослы сағылдырыуы менән «Колхозсылар» пьесаһының революцион-романтик әҫәр үҙенсәлектәренә эйә булыуын күрергә мөмкин.

«Берлек» драмаһында Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәре, ауыл кешеләренең шул ваҡиғаға мөнәсәбәте, патриотик тойғо тәрәнлеге һәм тырыш хеҙмәте сағылдырыла. Ундағы мал ҡараусы Төхфәт, һауынсы Фәрхи, комбайнсы Өмөтбай, киң профилле механизатор Сәлимә, колхоз председателе Баныу, ферма мөдире Ғариф, комсомолка Гөлнур, колхозсылар Байморат, Хәйерниса, Биктимер образдары аша совет кешеләренең саф ватансыллығы, идея-политик берҙәмлеге, еңеүгә ышанысы дөйөмләштерелә.

Колхоз хисапсыһы Ҡотлобай йөҙөндә совет иленә афәт килеүен оҙаҡ йылдар буйына көтөп йөрөгән элекке бай балаһының үҙенсә кинәнесе һәм тылда кешеләргә яла яғыу, ҡоротҡослоҡ ҡылыу менән шөғөлләнеүе, әммә намыҫлы ҡатыны Көмөшбикә тарафынан фаш ителеүе күрһәтелә.

Механизаторҙар Өмөтбай менән Сәлимә, колхоз председателе Баныу менән колхозсы Байморат мөнәсәбәттәре аша ике хужалыҡта эшләүсе йәки тиң булмаған вазифаларҙы башҡарыусы бер ғаилә ағзаларының гражданлыҡ бурысы һәм кешелек намыҫы, ир менән ҡатындың татыулығы мәсьәләләре әхләҡи-этик планда яҡтыртыла. Ил, халыҡ алдына килгән ауыр һынауҙың көндәлек ығы-зығыны, ғаиләләге ваҡ аңлашылмаусанлыҡты, тар шәхси кисерештәрҙе артҡы планға күсереүен һүрәтләп, автор социалистик ғаилә мөнәсәбәттәренең яңы принциптарға ҡоролоуына иғтибарҙы йүнәлтә һәм С. Мифтаховтың «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» драмаһында тәүләп күтәрелгән был мәсьәләне һуғыш осоро шарттары менән бәйләй.

Үҙ теләге менән һуғышҡа китергә йөрәкһегән әүәлге партизан Төхфәт, һалдатҡа алынған Өмөтбай, Биктимер, һуғышсыларға тыл бүләге әҙерләүҙе ойошторған Гөлнур, Көмөшбикә, хеҙмәт батырлығы күрһәтеүсе бөтә колхозсылар ынтылышында автор совет патриотизмының бөйөк көс булыуын, кешеләрҙең рухи ныҡлығын, ҡаҡшамаҫ берҙәмлеген һынландыра. Ватансылыҡ тойғоһоноң ныҡлығы, фронт менән тыл берҙәмлеге, колхозсылар менән һуғышсыларҙың хеҙмәттәге һәм яуҙағы ҡаһарманлығы М.

Буранғоловтың «Осрашыуҙар» тигән пьесаһындағы ваҡиғалар нигеҙенә һалынған.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «Осрашыуҙар» пьесаһының ике картиналы һуңғы шаршауы яҙылған текст юғалып ҡалған, әҫәрҙең финалы билдәле түгел. Һуғыш йылдарындағы ауыл кешеләре тормошон, уй-ынтылышын сағылдырған «Өлгө» пьесаһының беренсе шаршауында, артабанғы ваҡиғаларға пролог итеп, үрҙә телгә алынған «Көтөүсе» пьесаһы тулыһынса файҙаланылған. Ундағы геройҙарға драманың прологтан һуң 22 - 23 йыл үткәс булған ваҡиғаларҙы яҡтыртҡан төп өлөшөндә Алтынбай менән Шәмсиәнең врач ҡыҙы Әсмә, Хәпиҙәнең тракторсы улы Кинйәбай, элекке мулла Хафиз, уның ҡыҙы Маһитап, колхоз идаралығында эшләүсе Байрамбикә, һуғыштан яраланып ҡайтып килгән капитан Ҡасимов һәм медсестра Сәрүи образдары өҫтәлгән.

Ошо төркөмдәге әҫәрҙәре менән М. Буранғолов Ватан һуғышы йылдарында үҙендә ил яҙмышын ҡайғыртҡан патриот, аңлы граждан итеп танытты. М. Буранғолов һуғыштан һунғы йылдарҙағы пьесаларында кисәге фронтовиктар менән колхозсыларҙың ауыл хужалығын нығытыу өлкәһендәге тырыш хеҙмәтен, алдынғыға ынтылышын илһамланып һүрәтләне.

Тыныс тормошҡа сыҡҡан ике фронтовик дуҫтың яңы шарттарҙағы үҙ-ара мөнәсәбәтен, тормош иринциптарын ул 1946 йылда яҙылған бер шаршаулыҡ исемһеҙ пьесаһында әхләҡ-этик планда яҡтырта.

«Ҡыҙыл таш» (1947), «Гөлнур» пьесаларында шундай уҡ кешеләрҙең һуғыштан һуңғы колхоз экономикаһын күтәреүгә һалған тырышлығы, консерватив ҡараштарға ҡарты йәштәрҙең ҡыйыу көрәше, алдынғыға ынтылышы һүрәтләнә.

Сәхнә әҫәрҙәре менән М. Буранғолов башҡорт драматургияһында заман темаһын яҡтыртыуға үҙенсәлекле өлөш индерергә тырышты. Әммә уның 30-сы йылдар уртаһынан алып яҙған пьесалары, дәүергә хае бер яҡлы тар -ҡараштар шауҡымында ҡаралып, иғтибарға алынып бөтмәне. Драматург үҙе, нахаҡҡа ғәйепләнеп, ун йылға тотҡонлоҡҡа хөкөм ителгәс,

уның әҫәрҙәре һәм исеме тәнҡитле атамаға әүерелеп китте, уның ижадына иғтибар бөтөнләй һүнде.

1959 йылда аҡланып, исем-хоҡуҡтары тергеҙелгәс тә әле, торғонлоҡ йылдарындағы ғәмһеҙлек уның мираҫына яҡын юларлыҡ мөмкинлекте бирмәне. Фәҡәт хәҙерге яңырыу осоронда ғына М. Буранғоловтың туҙҙырылған архивынан бер мыҫҡал мираҫ менән танышыу мөмкин булды. Унда ла М. Буранғолов яҙған өс тиҫтәнән ашыу сәхнә әҫәрҙәренен яртыһы ғына бар. Ҡалғандарын да табыу, бөтә пьесаларына тулы ғилми баһа биреү – алдағы көндәр бурысы.

**11. Ғиляжев, Хәким. Халыҡ сәсәне аманаты [Текст] / Х.Гиляжев, салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты // Буранғолов, Мөхәммәтша. Һайланма әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. – Б. 476 - 478.**

...Мөхәммәтша ағайҙың биографияһы, тормош юлы һәм ижади яҙмышы Рәсәйҙә тәүге автономия республикаһын төҙөү һәм аяҡҡа баҫтырыр өсөй барған ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы һәм ҡайһы саҡ фажиғәле көрәш тарихын көҙгөләгө кеүек сағылдырҙы.

Ошо көтөлмәгән төрлө ҡыйын хәлдәрҙә ҡатнашыу Мөхәммәтша Буранғолов өсөн ҡиммәткә төшә. Уны Бутырка төрмәһенән Ленин бойороғо буйынса азат итәләр. Владимир Ильич Буранғолов һәм уның иптәштәренән хат ала - унда уларҙы ғәҙел ғәйепләмәүҙәре тураһында һүҙ бара. Уны һуңынан ниндәй гонаһтарҙа ғына ғәйепләмәнеләр: йә буржуаз милләтсе, йә патриархальщинаны таратыусы... Уның һәр пьесаһына шундай ярлыҡтар йәбештерҙеләр, сөнки уларҙың күпселеге ауыҙ-тел халыҡ ижадының мотивтары буйынса йәки шуның нигеҙендә яҙылған ине: «Ашҡаҙар», «Ялан Йәркәй», «Шәүрәкәй», «Аҡбуҙат» һәм башҡалар.

Әҙәбиәттең башланғысы фольклорҙа, тине Горький. Гомерҙың «Илиада»һы, Гетеның «Фауст» ы, Дантеның «Илаһи комедия»һы - былар мифтарҙы, легендаларҙы художество әҙәбиәткә күсереү түгелме? Ә хәҙерге заман әҙәбиәтендә? Әүәзовтың «Абай»ын, Сыңғыҙ Айытматовтың әҫәрҙәрен уҡып ҡарағыҙ. Беҙҙең яҙыусыларҙан Н. Мусин, Г. Ибраһимов, Я.

Хамматовтарҙы атайым. Ә Степан Злобин? Уның «Салауат Юлаев» исемле романы ул замандағы легендаларҙан, йырҙарҙан, риүәйәттәрҙән генә туҡылған бит. Беҙҙең Михаил Воловик фольклор материалдары нигеҙендә «Ерәнсә сәсән тураһында әкиәт» исемле һоҡланғыс китабын яҙып, беҙҙең башҡорт яҙыусыларына яҡшы өлгө күрһәтте. Ю. Әхмәҙиев уны башҡорт теленә уңышлы тәржемә итте.

Беҙ үҙ фольклорыбыҙҙы белмәйбеҙ. Фольклор - ул халыҡ хәтирәһе, уның илаһи тарихы.

Аракчеев, Жданов, Сусловтарҙың идеологияһы күп йыллыҡ тарихты, рухи байлыҡты, үҙенсәлекле традицияларҙы, йәғни бөтөн бер халыҡтарҙың тарихи ҡомартҡыһын онотоуға дуҫар итте. Милли дөйөм кешелек ҡиммәттәрҙе һаҡлаусыларға «милләтсе» тигән ярлыҡ тагылды, уларҙы рәшәткә артына йәшерҙеләр, Сталин лагерҙарының сәнскеле сымдары артына оҙаттылар йәки физик яҡтан юҡ иттеләр.

Беҙҙең культура тарихында үҙенең боронғо халҡының рухи байлығын шундай һөйөү менән бөртөкләп йыйған Мөхәммәтша Буранғолов кеүек эшмәкәр юҡ.

Мөхәммәтша ағай Буранғолов ҡиммәтле рухи ынйыларҙы йыйыусы ғына түгел, ялҡынлы пропагандист, уларҙы фәнни йүнәлешкә һалған мәғрифәтсе лә. Әгәр 18 томлыҡ «Халыҡ ижады» хеҙмәте бөтә халыҡ таныуын яулаһа һәм Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы тарафынан юғары баһаланған икән, беҙ был хеҙмәттә халыҡ сәсәненең бөйөк ҡаҙанышын танырға тейешбеҙ. Һәм ғәҙеллек тантана итһен өсөн, исмаһам, уға үлгәндән һуң лауреат исеме бирелергә тейеш.

Мөхәммәтша ағай Буранғолов тыумыштан фольклорсы, халыҡ мәғарифы офоғонда танылған эшмәкәр генә түгел, уны законлы рәүештә башҡорт милли драматургияһына нигеҙ һалыусы тип иҫәпләргә мөмкин.

Буранғоловтың бөтә пьесалары ла тиерлек фольклор-этнографик материалға нигеҙләнгән булыуы насармы ни? Гаджибековтың ул саҡта танылған «Аршин мал алан»ы шулай уҡ фольклор түгелме? Һәм Б. Бикбай,

Ҡ. Даян, М. Кәрим үҙҙәренең «Ҡарлуғас», «Таңсулпан», «Ай тотолған төндә» исемле әҫәрҙәрен нимәгә нигеҙләнеп яҙған?

Буранғоловтың тормош һәм ижад юлы бөтөнләй өйрәнелмәгән. Беҙҙең культураның тарихында уның изге исемен, пьесаларын, ҡобайырҙарын, шиғырҙарын аяҡҡа баҫтырырға ваҡыт. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уға бирелгән «Башҡорт АССР-ының халыҡ сәсәне» исемен яңынан ҡайтарырға, шулай уҡ ул һуңғы йылдарҙа йәшәгән йортта мемориаль таҡтаташ асырға ваҡыт. Өфөлә һәм

Стәрлетамаҡта урамдарҙың береһен уның исеме менән атау зарур. Һәм, ахыр килеп, Тарих, тел һәм әҙәбиәт фәнни-тикшеренеү институтына уның исемен бирергә кәрәк. Ул быға лайыҡ.

Мөхәммәтша Буранғолов үҙенең бөтә михнәтле, ләкин емешле тормошо буйынса йөрәгендә туған халҡының аманатын һаҡланы – быуындарҙың күсәгилешлелек ебен юғалтмаҫҡа, туған телде һаҡларға, милли дәрәжәне төшөрмәҫкә, хәҡиҡәткә тоғро булырға өйрәтте.

Уның аманатына тоғро булайыҡ, сөнки Мөхәммәтша Буранғолов - ул башҡорт халҡының саф намыҫы һәм изге хәтирәһе.

**12 . Ишбирҙин, Эрнст. Мөхәммәтша Буранғолов әҫәрҙәренең ҡайһы бер тел һәм стиль үҙенсәлектәре [Текст] / Э.Ишбирҙин // Буранғолов Мөхәммәтша. Һайланма әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. – Б. 404 - 406.**

Мөхәммәтша Буранғоловтың ижады менән танышҡанда, иң адда сәсән, фольклор әҫәрҙәрен йыйыусы һәм тикшереүсе, мөғәллим һәм мәғариф эшмәкәре булараҡ, авторҙың әҫәрҙәрендә башҡорт телендәге һүҙ байлыҡтарының нисек сағылдырылыуын, һүрәтләү һәм биҙәкләү сараларының ҡайһылай ҡулланылыуын күҙәтеү маҡсат итеп ҡуйылды. Бынан тыш, халыҡ араһында күп йөрөгән, төрлө башҡорт ерле һөйләштәре менән яҡындан таныш булған яҙыусының әҫәрҙәрендә диалектизмдарҙың нисек сағылыуы ла беҙҙе бик ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Әгәр ҙә М. Буранғоловтың ижадына бөгөнгө көндән түгел, ә шул заман күҙлегенән сығып ҡарағанда, әҫәрҙәрҙә ярылып ятҡан ҙур диалект үҙенсәлектәре бик

күп түгел. Бәҙеңсә, М. Буранғолов аңлы рәүештә өлгөлө әҙәби тел ҡулланырға тырышҡан. Мәҫәлән, ул «Ашҡаҙар» драмаһы ҡулъяҙмаһының титул битенә түбәндәге иҫкәрмәне яҙып ҡуя: «Башҡортостанда дөйөм бер әҙәби тел төҙөлгәнгә саҡлы 1917 йылдан алып сәхнәләрҙә уйналғанда ла, һәм 1923 йыл баҫылып донъяға сыҡҡанда ла юрматы башҡорттарының теле менән яҙылған көйө донъя күрҙе». Был иҫкәрмәне драманың элек юрматы диалектында яҙылып донъя күргән, ә һуңынан башҡорт әҙәби теленә һалынған варианттарының береһенә яҙып ҡуя. Йәғни ул үҙенең әҫәрен башҡорттар өсөн яҙма тел булып Урал - Волга буйы төрки теле сығыш яһаған мәлдә, ә матбуғат теле булып төрки йоғонтоһона ныҡ бирелгән иҫке татар теле йөрөгән осорҙа башҡорт диалекттарының береһендә яҙа, ә хәҙерге башҡорт әҙәби теле формалашҡас, драманы әҙәби тел талаптарына яраштырып, яңынан яҙа. Әҙәби телгә бынан да аңлыраҡ ҡарашты күҙ алдына килтереп булмай.


М.Буранғоловтың шәкерт сағы. 1908 йыл.

М. Буранғоловтың әҫәрҙәрендә айырым төбәктәр өсөн генә хас булған лексик диалект берәмектәр йәки әҙәби тел нормаларынан асыҡтан-асыҡ айырылып торған фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәр осрамай. Шуның менән бергә, әҫәрҙәрҙә башҡорт халыҡ йәнле һөйләү телмәренә хас булған дөйөм күренештәр бик күп... Тел һүрәтләү һәм биҙәкләү сараларына килгәндә, М. Буранғоловтың әҫәрҙәрендә хәҙерге башҡорт әҙәби теленән төшөп ҡалған йәки унда бик һирәк йөрөгән, пассив һүҙлек составына ҡараған ә халыҡ йәнле һөйләү телдәрендә актив ҡулланылған үҙенсәлекле, ынйыға тиң һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, телде биҙәй торған, уға йәм биреүсе бик күп сараларҙы осратырға мөмкин: «Һандыҡты ҡаҡһытып атҡырғансы...», «Ҡыҙылташ йылғаһы тиртеп тә яталыр», «ҡораллы көс эркетеү», «бында

ханы менән намыҫ сайҡаша», «үҙеңдән кесегә сөсө булып, өлкәнде ололап өйрән...» М. Буранғоловтың ҡайһы бер әҫәрҙәрен уҡып сыҡҡас, уларҙың тел үҙенсәлектәрен хәҙерге әҙәби әҫәрҙәрҙең теле менән сағыштырып ҡарайһың да, хәҙерге башҡорт әҙәби теле халыҡ йәнле һөйләү телмәренә хас булған күп кенә сағыу хис-тойғоло, экспрессив йөкмәткеле һүҙҙәрҙән һәм әйтемдәрҙән мәхрүм ителмәй микән, әҙәби телебеҙ ярлыланыуға табан юл алмай микән, тигән уйға киләһең. Был шулай уҡ телде бизәй торған көслө сараларҙың береһе булған фразеологизмдарға ла ҡағыла.

М. Буранғоловтың «Иҙеүкәй менән Мораҙым» трагедияһын уҡығанда, тағы ла бер нәмә иғтибарҙы йәлеп итеп, күңелде тартып тора, әҫәрҙең тел-һүрәтләү сараларын байытыу менән бергә, уның кешегә яһаған йоғонтоһон көсәйтә. Көнкүрештәге ғәҙәти аралашыу барғанда, автор күберәк киң таралған ябай, ләкин бик образлы, күп биҙәкле, эпик фольклор әҫәрҙәренең теленә яҡын торған халыҡ йәнле һөйләү телмәренән файҙалана. Ә бына ил, халыҡ яҙмышы хәл ителә торған ҙур һәм әһәмиәтле ваҡиғалар барғанда, ул поэтик фольклорға хаҫ кинәйәле, эске ритмға, урыны менән рифмаға бай ҡобайыр алымдарына яҡын торған телмәргә күсә. Эске кисерешле һәм ҙур пафосҡа ҡоролған телмәр тик ыңғай образдарға ғына түгел, кире персонаждарға ла хас. Мәҫәлән, Урҙа башы Туҡтамыш яуҙың иң ҡыҙған, хәл иткес осоронда быңдай монолог менән сығыш яһай: «Юҡ! Бер табан да сигенер юҡ! Урҙа башы тыуымды сағыл башына ҡағығыҙ! Ҡараҡ яуын, Иҙеүкәйҙе юлбарыҫтай айҡармын! Мәмерйәгә инһә лә, ҡотола алмаясаҡ - тауын яра сабармын! Китмәйбеҙ! Ир яуҙан ҡасамы? Тау ерҙән ҡубамы? Тауҙың ерҙән ҡупҡаны – селпәрәмә килгәне. Ирҙең яуҙан ҡасҡаны - тас салҡан киткәне!»

Халыҡ ижадына, уның йыр, ҡобайыр, әкиәт, һамаҡ һымаҡ формаларының алымдарына таяныу әҫәрҙәрҙең телен дә, образлылығын да, тәьҫирен дә байыта һәм көсәйтә. Бына «Иҙеүкәй менән Мораҙым» трагедияпһынан сағыу бер миҫал: «Сырур ҡыҙы булһаң, юра, бер төш күрҙем. Төшөмдә ҙур тирәгем бөгөлөп, ергә йығылды. Туҡһан икән япрағы - бары ергә ҡойолдо. Ҡулымдағы ҡара ыласын осто-китте, юғалды.

Саҡырзым  кире ҡайтманы, ҡуныр ерен тапманы. Ул ни булыр, һөйләп бир...»

Мөхәммәтша Буранғоловтѕң ижады – баiҡорт телендә һүҙ һүрәтләү, биҙәкләү сараларының төрләлөгөн һәм байлығын күрһәтеусе ғәжәп ҙур һәм ҡиммәтле хазина ул.

**13. Нәҙерғолов, Миңнегәле. Ҡиммәтле мираҫ [Текст] / М. Нәҙерғолов // Буранғолов Мөхәммәтша. Һайланма  әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. – Б. 444 - 446.**

Халҡыбыҙҙың бөйөк улы Мөхәммәтша Буранғоловтың эшмәкәрлеге ифрат емешле һәм күп яҡлы булған. Ул фольклористика һәм драматургияла ғына түгел, публицистика һәм художестволы проза өлкәләрендә лә шаҡтай ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле яҙма мираҫ ҡалдырған. Атаҡлы «Шура» һәм «Ваҡыт» кеүек гәзит-журналдарҙа донъя күргән тәүге мәҡәләләрендә үк уның ғүмере буйы туған халҡы өсөн янып-көйөп йәшәгән шәхес булғанлығы сағыла.

Тәүге публицистик сығыштарында уҡ М. Буранғолов үҙен халыҡ яҙмышына битараф булмаған, уның мәнфәғәттәрен һәр яҡлап ҡайғыртҡан, бүтән халыҡтарға ҙур ихтирам менән ҡараған, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларының баһаһын һәм ҡиммәтен яҡшы аңлаған кеше итеп таныта. Уның мәҡәләләренән артабанғы йылдарҙа тулыһынса асылып, мул емештәрен биргән ижади эшмәкәрлегенең төп һыҙаттарын һәм йүнәлештәрен асыҡ төҫмөрләргә мөмкин.

Үҙенең ижад ғүмерендә Мөхәммәтша Буранғолов художестволы проза өлкәһендә лә  ҡәләмен һынап ҡараған.

Уның баҫылып сыҡҡан тәүге проза әҫәре - «Айһылыу» хикәйәһе. 1928 йылда «Сәсән» журналы биттәрендә донъя күргән был әҫәр ярайһы уҡ ҙур күләмле була. Шунлыҡтан уны журналдың рәттән биш һанында (1-2, 3, 4-5, 6,7 - 8) нәшер итәләр. Хикәйәнең үҙәгендә - быны атамаһынан уҡ һиҙемләргә мөмкин – Айһылыу исемле ҡыҙҙың яҙмышы ята. Һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар Октябрь революцияһы алды, революция һәм граждандар

һуғышы йылдарында бара. Әҫәрҙең сюжеты шаҡтай ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс.

Ул һығылмалы һәм көсөргәнешле итеп ҡоролған. Унда шул осорҙағы күпселек хикәйәләргә хас булған тура һыҙыҡлылыҡ һәм бер яҡлылыҡ бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә. Автор геройҙарҙы һәм персонаждарҙы индивидуалләштереп, үҙенсәлекле һыҙаттар менән бирергә тырышҡан. Күберәк иғтибары, әлбиттә, Айһылыу образына бүленгән.

Төп геройҙың эске кисерештәрен, рухи донъяһын тәрәнерәк асыу маҡсатында, М. Буранғолов йыш ҡына психологик йәнәшәлек алымын ҡуллана. Йәғни Айһылыуҙың шатлыҡ - ҡыуаныс кисереүе һүрәтләнгән юлдарҙа уны уратып алған мөхитте лә йәнле һәм йәмле итеп кәүҙәләндерә, ҡыҙҙың һағышлы-хәерәтле тормошон биргәндә иһә тирә-йүнде лә ҡараңғы, йәмһеҙ төҫтәргә мансый. Ошо рәүешле автор әҫәрҙең тәьҫир көсөн арттырыуға, уҡыусыла билдәле хис-тойғолар уятыуға ирешә.

Әлбиттә, бөгөнгө талаптар юғарылығынан баһалағанда, «Айһылыу» хикәйәһенә ҡарата байтаҡ тәнҡит һүҙҙәре лә әйтергә мөмкин. Ләкин, сабыйҙан да, оло кешенән дә бер үк эште талап итеп булмағандай, яңы башҡорт прозаһына нигеҙ таштары һалынған дәүерҙә яҙылған әҫәргә лә, бөгөнгө хикәйәгә лә бер үк мөнәсәбәт, бер үк талап булырға тейеш түгелдер, моғайын. Бындай осраҡта әҫәрҙе тарихилыҡ принцибынан сығып өйрәнеү һәм баһалау зарури. Ә «Айһылыу» хикәйәһе үҙ осоро прозаһы фонында күпкә уңышлы әҫәр булып күҙ алдына баҫа.

1929 йылдың декабрендә шул уҡ «Сәсән» журналы биттәрендә М. Буранғоловтың «Көтмәгәндә осрашыу» исемле хикәйәһе баҫылып сыға. Күләме буйынса был әҫәр сағыштырмаса бәләкәйерәк. Унда ла яҙыусы илебеҙ тарихының киҫкен мәленә - революция һәм граждандар һуғышы осорона – мөрәжәғәт иткән.

1938 йылда М. Буранғоловтың халыҡ йыры һәм уның риүәйәте мотивына ҙур күләмле «Таштуғай» тигән хикәйә яҙғанлығы мәғлүм. Ләкин был хикәйә, сәсәндең ошо осорҙа ижад ителгән бүтән әҫәрҙәре кеүек үк,

билдәле сәбәптәр арҡаһында баҫылмай ҡалған. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, уның ҡулъяҙма тексы юғалған һәм әлегәсә табылғаны юҡ.

Мәшһүр сәсәндең 100 йыллыҡ юбилейы алдынан улы Нәжип Буранғолов Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәге архивына атаһына бәйле байтаҡ документтар һәм ҡулъяҙмалар тапшырғайны. Шулар араһынан бер исемһеҙ ҡулъяҙма повесть та табылды. Ул илленсе йылдар аҙағында-алтмышынсы йылдар башында, йәғни яҙыусының ғүмеренең һуңғы йылдарында ижад ителгән. Аҙаҡҡы битендә «Һуңы бар» тип яҙылған булһа ла, ҡулъяҙма бөтөн, тамамланған әҫәр булып ҡабул ителә.

Повесть автобиографик характерҙа булыуы менән ҡыҙыҡлы. Ундағы төп геройҙарҙың береһе – Мәхмүт – күп йәһәттән авторҙы хәтерләтә. Уның атаҡлы Ҡарғалы мәҙрәсәһендә уҡыуы, бер-ике йыл шунда уҡ һабаҡ биреүе, һуңынан ашарына һәм өҫ-башына алырға бер аҙ аҡса табыу ниәте менән халыҡ иҫәбен алыу эшендә ҡатнашыуы - былар барыһы ла Мөхәммәтша Буранғоловтың үҙ башынан үткән хәлдәр. Әммә әҫәрҙең үҙәгендә Мәхмүт түгел, ә Сәлимә исемле ҡыҙ тора. Төп сюжет шул ҡыҙға бәйле үҫтерелә. Ошо үҙенсәлекте иҫәпкә алып, 1988 йылдың декабрендә «Ленинсы» гәзитендә өҙөктәр биргәндә, беҙ повесты шартлы рәүештә «Сәлимә» тип атағайныҡ.

Әҫәрҙә егерменсе быуат башы башҡорт ауылы тормошоноң киң панорамаһы тыуҙырылған. Унда ауыл халҡының социаль хәле, кәсеп-шөғөлө, рухи донъяһы ентекле тасуирлана. Автор Мөслим, Нәғим ише байҙарҙың ярлы-ябағаны аяуһыҙ иҙеүен һәм тәбиғәт байлыҡтарын йыртҡыстарса талауын тәфсирләп асып бирә.

Художество-эстетик сифаттары буйынса повесть сәсәндең элгәрге проза әҫәрҙәренән бер ни тиклем юғары тора. Уның композицияһы сағыштырмаса йыйнаҡ, ыҡсым итеп ҡоролған, сюжетына йылдамлыҡ һәм көсөргәнешлек хас. Әҫәрҙе уҡығанда, авторҙың образлы сағыштырыу, метафора, эпитет кеүек һүрәтләү саралары менән оҫта эш иткәнлеген күрәһең.

Повестың теле бай һәм үҙенсәлекле. Яҙыусы фольклорҙан килгән традицион лексикаға күп урын бирә, геройҙар һәм персонаждар телмәрендә ерле һөйләш материалын киң ҡуллана. Хикәйәләү барышында, урынлы һәм йәтеш итеп, афоризмдар, халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәр индереп ебәрә.

Дөйөм байҡау шуны күрһәтә: М. Буранғолов художестволы проза өлкәһендә лә үтә ҡыҙыҡлы һәм ҡиммәтле мираҫ ҡалдырған. Уның хикәйәләре һәм повесы әҙәбиәтселәр өсөн генә түгел, телселәр, фольклорсылар һәм этнографтар өсөн дә файҙалы сығанаҡ булып хеҙмәт итә ала.

**14. Нәҙерғолов, Миңлеғәли. Оло юлға сыҡҡанда [Текст] / М. Нәҙерғолов, филология фәндәре кандидаты**
**//Ағиҙел. - 1988. - №11. - Б. 114 – 115.**

Сәсән, ғалим һәм әҙип булараҡ туған халҡына баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт күрһәткән Мөхәммәтша Буранғоловтың ҡәләм тибрәтә башлауы Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклемге йылдарға, дөрөҫөрәге, XX быуаттың икенсе тиҫтәһенә тура килә. Был осорҙа йәшәгән һәм ижад иткән күпселек башҡорт яҙыусылары, ғалимдары һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре кеүек уҡ, ул үҙенең яҙмалары менән, башлыса, либераль-демократик йүнәлештә торған «Шура» журналы һәм «Ваҡыт» газетаһы биттәрендә сығыш яһай. Тәүге сығыштарында уҡ М. Буранғолов дөйөм халыҡ тормошона бәйле проблемаларға мөрәжәғәт итә.

Мәҫәлән, 1914 йылдын 20 авгусында «Ваҡыт» газетаһында һәм ошо уҡ йылдың октябрь айында «Шура» журналында баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен ул «Башҡорт ерҙәренең ситтәргә китеүе һәм уның нәтижәләре» тип исемләгән. Исеменән үк күренеүенсә, мәҡәләлә замананың бөтә Башҡортостан һәм башҡорт халҡы өсөн мөһим һәм актуаль булған мәсьәләһе күтәрелә. (Билдәле булыуынса, һуңғы ике быуат киҫешкән дәүерҙә был мәсьәлә бик күп яҙыусылар һәм ғалимдар, шул иҫәптән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Мәжит Ғафури, Ғарифулла Кейеков, Бәхтиәр Бәхтегәрәй улы һәм Сафуан Яҡшығолов ижадтарында ҡуҙғатыла.)

Башҡорт ерҙәренең осһоҙ хаҡҡа һатылыуының йәки тартып алыныуының нимәгә килтереүен М. Буранғолов үҙ ырыуҙаштары – Туҡ-Соран буйы башҡорттары тормошо миҫалында күрһәтә.

Колонизациялау һөҙөмтәләрен автор көтөүлектәрҙең кәмеүе һәм мал иҫәбенең ҡыҫҡарыуы менән генә сикләмәй, ә халыҡ тормошоноң барлыҡ өлкәләрендә лә күҙәтергә ынтыла. Миҫалға, ауылдарҙа мәғариф һәм культура-ағартыу эштәренең үтә насар ҡуйылыуын билдәләй. Әлеге көндә халыҡтың тормош кимәле шул тиклем түбән, тип яҙа ул, хатта тотош ауылға «ун һумлыҡ мөғәллим тоторға ла» хәлдәренән килмәй. Шунлыҡтан күп урындарҙа уҡытыусылыҡ эшен «наҙан мәзиндәр» алып бара. Мәктәп-мәҙрәсәләр емерек йәки ташландыҡ хәлдә, уҡыу әсбаптары етешмәй. Авторҙы ҡатын-ҡыҙҙар араһында наҙанлыҡ һәм томаналыҡтың көслө булыуы айырыуса ныҡ борсой. Сөнки уларҙың яҙыу таныусылары хатта «йөҙгә бер булмаҫ».

Шуныһы ҡыҙыҡлы: мәҡәләлә башҡорт ауылдарындағы хәл-күренештәр күрше-тирә немец ауылдарындағы тормош менән сағыштырып һүрәтләнә. Автор немецтарҙың культура һәм экономика өлкәһендә һиҙелерлек алға китеүе хаҡында әйтә һәм яҡташтарын уларҙан үрнәк алырға саҡыра. «Уларҙа (немецтарҙа) ун-ун биш саҡырымға бер духтыр бар, ә беҙҙең халыҡ ишан төкөрөгө һәм ҡарсыҡ ҡотҡоһо менән генә тора, - ти ул. – Хәҙер, төрлө йоғошло ауырыуҙар таралыу сәбәпле, бының насар нәтижәләре күренә лә башланы инде».

Авторҙың фекеренсә, ауылдарҙағы аяныслы күренештәрҙең һәммәһе лә ахыры сиктә ер мәсьәләһенә килеп бәйләнә. Ә уларҙан тик земство ярҙамында ғына ҡотолорға мөмкин. Әгәр земство эштәре юлға һалынһа, «русса-мосолманса мәктәптәр асылып, агрономдар ебәрелеп, йорт һәм иген эштәре яйланыр ине» ти сәсән. Бында уның, хужалыҡ һәм мәғариф эштәрендә компетентлы булһа ла, политик һәм синфи аң өлкәһендә әлегә сикләнгән булыуын тоймау мөмкин түгел. Ул, мәғрифәтселәр кеүек уҡ, халыҡтың тормошон яҡшыртыу юлын фәҡәт аң-белем таратыуҙа һәм экономик реформалар үткәреүҙә генә күрә.

М. Буранғоловтың «Ваҡыт» газетаһы биттәрендә донъя күргән икенсе мәҡәләһе «Соран вә Туҡ буйы башҡорттары» тип атала. Был хеҙмәтендә сәсән Ырымбур губернаһындағы Соран һәм Туҡ йылғалары буйында йәшәгән башҡорттар тураһында тулы мәғлүмәт биреү маҡсатын ҡуймай, ә уларҙың көнкүреше, шөғөл-кәсептәре менән ҡыҫҡаса таныштырып үтергә теләй. «Хәҙерге көндә ошо ике һыу буйында ултырған башҡорттарҙың иң тырышып иткән кәсептәре иген сәсеү булып бара, - ти ул. - Арала йөҙ-йөҙ илле десятина ер сәскән байҙар бар. Улары үҙ ерҙәрен ситтәргә бирмәйҙәр, хатта фәҡир ҡарындаштарының ерҙәрен арендаға алып торалар». Автор ярлыларҙың хәле тураһында бик зарланып-әсенеп яҙа. Ер өсөн түләнә торған налогтың сиктән тыш ҙур булыуы ярлы-ябаға тормошон ифрат ауыр һәм ғаҙаплы итә, ти. Налогты түләү мөмкинлеге булмағанлыҡтан, улар ерҙәрен арзан хаҡҡа һатып ебәрергә йәки арендара бирергә мәжбүр.

Шуныһы иғтибарҙы тарта, әгәр тәүге мәҡәләһендә автор халыҡты синыфһыҙ бер масса рәүешендәрәк һүрәтләһә, бынныһында уны бай һәм ярлы, иҙеүсе һәм иҙелеүсе кеүек антагонистик синыфтарға бүленгән йәмғиәт итеп күҙ алдына баҫтыра.

1915 йылда «Шура» журналында М. Буранғоловтың тағы бер мәҡәләһе баҫылып сыға. «Ашҡаҙар» тип исемләнгән был хеҙмәт идея-тематикаһы йәһәтенән дә, формаһы буйынса ла тәүгеләренән шаҡтай айырыла. Ул түбәндәге һүҙҙәр менән асыла: «Халыҡ араһында мәшһүр Ғүмәр ахундың ҡулъяҙма бер ҡалын мәжмүғәһендә (йыйынтығында - М. Н.) Тимерғәли исемле бер башҡорттоң Ашҡаҙар ваҡиғаһы хаҡында һөйләгәндәре һәм йырлағандары яҙылған. Ошо хикәйә матбуғатҡа башҡорт ауыҙынан сыҡҡан рәүеше менән кереп ҡалһын, тип «Шура»ға яҙамын».

---

Был мәҡәлә сәсәндең халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыу һәм пропагандалауҙағы беренсе тәжрибәһе булып ҡабул ителә. Әйтергә кәрәк, ул ярайһы уҡ уңышлы сыҡҡан: ауыҙ-тел ижады ҡомарткыһы уҡыусыға урынлы аңлатмалар менән, һис ниндәй үҙгәртеүһеҙ-боҙоуһыҙ, бөтөн килеш

еткерелгән. Шулай итеп, М. Буранғолов үҙенең фольклорсы булараҡ эшмәкәрлеген баштан уҡ фәнни йәһәттән дөрөҫ методологияға ҡора.

«Ашҡаҙар» хикәйәһенең идея-эстетик йөкмәткеһе сәсәндең күңелен ныҡ тетрәткән булһа кәрәк. Бер нисә йыл тәьҫирләнеп йөрөгәндән һуң, уның мотивтарына пьеса ижад итә. Бер уҡ исемдәге был пьеса ҡырҡынсы йылдарҙа республика матбуғатында ҡаты тәнҡитләнә. «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналының 1947 йылғы етенсе һәм 1948 йылғы икенсе һандарында баҫылған мәҡәләләрендә Кирәй Мәргән был әҫәрҙә синфи көрәш сағылдырылмауҙы һәм тормош, тарихта булмағанса боҙоп, ҡабартып күрһәтелеүҙе һыҙыҡ өҫтөнә ала. Эйе, әҫәрҙә синфи көрәш юҡ, һәм төп геройҙар булып, асылда, юғары ҡатлам вәкилдәре сығыш яһай. Был, һис шикһеҙ, уның йомшаҡ яҡтарынан һаналырға тейеш. Ләкин пьеса буржуаз идеологияға һәм реакцион йөкмәткегә ҡоролған, тип әйтергә һис тә нигеҙ юҡ. Унда ике йәш йөрәктең һәләкәтле тамамланған саф, оло мөхәббәте бәйән ителә.

1926 йылдың 9 апрелендә «Башҡортостан» газетаһында донъя күргән мәҡәләһендә М. Буранғолов фольклорсы булараҡ сығыш яһай. Ул унда «Үмәр» (йәки «Йыуасалы») тигән башҡорт халыҡ йырының тарихын, килеп сығышын яҡтырта, тексынан өҙөктәр урынлаштыра һәм аңлатмалар бирә.

Шулай итеп, тәүге публицистик сығыштарында уҡ М. Буранғолов үҙен халыҡ яҙмышына битараф булмаған, уның мәнфәғәттәрен һәр яҡлап ҡайғыртҡан, ауыҙ-тел ижады ынйыларының баһаһын һәм ҡиммәтен яҡшы аңлаған кеше итеп таныта. Уның мәҡәләләренән Совет власы йылдарында тулыһынса асылып, мул емештәрен биргән ижади эшмәкәрлегенең төп һыҙаттары һәм йүнәлештәрен асыҡ төҫмөрләргә мөмкин.

**15. Чаныш, Әмир. Мөхәммәтша Буранғол [Текст] / Ә.Чаныш // Буранғолов Мөхәммәтша. Һайланма әҫәрҙәр. - Өфө: Китап, 2008. – Б. 484 - 485.**

Мөхәммәтша Буранғол, сәсәндәргә хас булғанса, зирәк аҡыллы кеше ине. Күрәһең, халыҡса уйлау, халыҡса образлы фекерләү уға тыумыштан

хас булған. Ысынлап та, Буранғол йыйған, ҡағыҙға күсергән эпостарҙа ҡайҙа халыҡ ижады юлдары, ҡайҙа Буранғолдоҡо икәнен айырыу йыш ҡына бик ҡыйын, сөнки халыҡ ижадына сәсәндең үҙ импровизацияһы шулай ныҡ үрелә, улар береһе икенсеһенән айырылғыһыҙ бер бөтөн. Буранғолдоң хатта әҙәби булмаған яҙмаларында ла фольклор алымдары ныҡ һиҙелә. 1942 йылда ул Сталинға хат яҙҙы. Башҡорт теленән руссаға һүҙмә-һүҙ тәржемәне сәсәндең үтенесе буйынса мин яһаным. Хат тотошлай хәҙер хәтерҙә ҡалмаған әммә характерлы алымдары эле булһа иҫемдә.

Үҙ һүҙҙәрем менән әйткәндә, бына шундай бер алым. «Мине милләтселектә ғәйепләйҙәр. Башҡорт драмтеатры артистары араһында башҡорттар бик һирәк. Әммә мин шулай тип әйткәнем бармы? Юҡ, әйткәнем булманы... Башҡортостандағы етәкселәр араһында башҡорттар бик аҙ, әммә шулай тип әйткәнем бармы минең? Юҡ, әйткәнем булманы...» һ. б.

Тәү ҡараштa хаттың авторы ваҡиға-күренештәрҙе кире ҡаға һымаҡ, асылда, уларҙы раҫлай: артистар араһында башҡорт артистары аҙ, йәнәһе, шуны раҫламай бит ул, республика етәкселәре араһында төп милләт вәкилдәре юҡ тиерлек, әммә бит ул шулай тимәй...

Бер йыйылышта етәксегә анонимкаларҙан ҡотолоу өсөн уларҙы яндырырға тәҡдим иткәс, етәксе шулай яуап ҡайтарған: «Утҡа яғырға мөмкин, әлбиттә, ләкин бит күңелдә көлө ҡала...»

Мөхәммәтша Буранғолов ҡобайырҙарҙа йыш ҡулланылған. Ситләтеп тасуирлауҙы-кинәйәне файҙалана. Уйын түгел, хат бит Сталин исеменә яҙылған, тураһын әйтһәң, концлагерь саңына әйләнеүең мөмкин... Бигерәк тә әллә ун тапҡыр, үҙ теле менән әйткәндә, төрмәлә ултырған кеше...

Буранғол драматургияһы фольклор әҙәби алымдарынан айырылғыһыҙ, һәм йәш әҙәбиәт эле тик тәүге аҙымдарын атлағанда, ул күренеш тәбиғи. Ләкин ошо яҙыусыны, тоталитар режим идеологияһына бирелеп, вульгар социологик әҙәби тәнҡит тап шуның өсөн ҡаты тәнҡит итте, милләтселектә ғәйепләне, ҡыҙғанысҡа ҡарты, был эштә мин дә актив ҡатнаштым. Хәҙер шул тиклем оят, наҙанлыҡтан йөҙ ҡыҙара... Бөтә

әҙәбиәттәр ҙә тәүге аҙымдарын үҙ халыҡ ижадының күкрәк һөтө менән туҡланып яһағандар һәм үҫкәндәр. Быны өсөн тәүге драматургты маҡтау, уның оло талантына һоҡланыу урынына, беҙ уны милләтселек, вәлидовсылыҡта ғәйепләп, күҙен дә астырманыҡ. Әҙәбиәтебеҙ бәхетенә ҡаршы, һәр бер ҙур яҙыусыға хас булғанса, Буранғол үтә түҙемле булып сыҡты, ошо талант утын хатта төрмәләрҙә интегеүҙәр һүрелтә алманы...

Сәсәндәргә хас булғанса, үткер телле, йор һүҙле ине Мөхәммәтша ағай. Һуғыш бара ине инде. Тарихсы Раимовты КПСС Өлкә комитетының идеология буйынса секретары итеп ҡуйҙылар. Буранғол бер саҡ яңы секретарға килгән дә шулай һүҙ башлай икән: «Раим ҡусты, ултырғысың йылынмаҫ борон әйтеп ҡалайым әле үҙеңә, ултырғысың йылынғас, файҙа булмай...»

Күп шағирҙарҙан өҫтөн булыуына ҡарамаҫтан, бик баҫалҡы һәм үтә түҙемле кеше ине ул. Нисек кенә әрләмәнеләр, хурламанылар үҙен, хатта типкеләп йөрөттөләр, нахаҡҡа төрмәгә ултыртылыуының иҫәбен ул хатта үҙе лә онотҡандыр, әммә бер генә ерҙә лә Мөхәммәтша ағайҙың ауыр яҙмышынан зарланғанын ишетмәнем, әҙәбиәттә шөһрәт артынан ҡыуғаны булманы, ул хатта үҙен үҙе яҡлай белмәне. Башҡорт сәсәне исемен рәсми рәүештә биргәндә, ул шаҡтай оло йәштә ине инде, ғүмеренең ҡояшы байыр алдынан бирҙеләр Мөхәммәтша ағайға ул оло исемде. Күрәһең, талантлы яҙыусыларҙың үтә ауыр яҙмышы шулай уртаҡ: танылғанға тиклем улар сират күперен бер нисә тапҡыр үтергә тейеш. Ихтимал, ошо ғәҙелһеҙлек тормоштоң үҙендәлер: талантлылар, ғәҙәттә, ғүмерен күркәм тамамлай, талантһыҙҙар иһә тауыш-тынһыҙ ғына донья ҡуя...

**16. Шәңгәрәева, Сәтиғә. Сәсәндең бай мираҫы [Текст] / С. Шәңгәрәева, СССР Фәндәр академияһының Урал бүлексәһе Башҡортостан ғилми үҙәге архивы мөдире // Ағиҙел. – 1988. - №12. – Б. 121 – 123.**

Куренекле сэсэнден тыуыуына бөтөн бер быуат тулыр алдынан, көндәрҙең береһендә, ҡосағына һыймаҫтай йөк күтәреп Нәжиб ағай Буранғолов килеп инде. Изге ниәт менән килгән булып сыҡты: атаһы

Мөхәммәтша Буранғоловтың ҡулъяҙма мираҫын алып килгән ул. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтындағы фольклор белгестәре һәм әҙиптәре менән йыйылып, әңгәмәләшеп, иҫкә алыу, үкенеү һәм ҡыуаныу минуттарын кисергәндән һуң, ҡомартҡыларҙы СССР Фәндәр академияһының Урал бүлексәһе Башҡортостан ғилми үҙәге архивында һаҡлау хаҡлы булыр тигән фекергә туҡталдыҡ. Ошо көндән алып был шәхси фонд 25-се һан аҫтында СССР Дәүләт фонды иҫәбенә инде. Ниһәйәт, Мөхәммәтша Буранғоловтың мираҫы тағы байыны, халыҡ хазинаһына әүерелде.

Шаҡтай йылдар ғилми архивта эшләү дәүерендә миңә төрлө яҙмышлы шәхси фондтар һәм документтар коллекциялары менән танышырға тура килде. Уларҙың ҡайһы берҙәре теге йәки был шәхестең юбилей көндәре еткәндә ифрат «кәрәк» булып китә. Был саҡта сығанаҡтарға мохтаж булған ғилми эҙләнеүселәр, тикшеренеүселәр ҙә күбәйә. Шау-шыулы көндәрҙән һуң, хужаһының киләһе тантанаһына тиклем тынып ҡалған фондтар ҙа була. Ә бына Мөхәммәтша Буранғоловтың ҡулъяҙмаһының яҙмышы башҡаса. Мин белә-белгәндән бирле был фонд тынлыҡты, туҙанланып ятыуҙы белмәй.

1978 йылда уҡ фольклор һәм әҙәбиәт белгестәре Мөхтәр Сәғитов менән Илдус Бүләков былай тип яҙғайны: «Мөхәммәтша Буранғоловтың халыҡ ижадына гәйәт ыңғай ҡараштa тороуы, уны тәрән аңлауы һәм бөтә йөрәктән ихтирам итеүе, уның көндән-көн юғала барған гәүһәр бөртөктәрен фанатиктарса бирелеп йыйыуы, һыйҙырышлы хәтер һандығына өҙлөкһөҙ туплауы һәм матбуғат биттәрендә туҡтауһыҙ пропагандалауы үҙе бер тиңһеҙ фиҙакәрлек ине. Уның яҙмалары сифаты, әҙәби фактик камиллығы яғынан заманы өсөн дә, хәҙерге әҙәби һәм культура үҫеше осоро өсөн дә ғилми юғарылыҡта, баһаһы тиң булмаған ҡиммәтлектә торалар».

Ысынлап та, башҡорт халҡы фольклоры өстөндә эшләүсе ғалимдар ғына түгел, гөмүмән, башҡорт әҙәбиәте, теле, сәнғәте тарихын яҙыу менән мәшғүл һәр кем сәсәндең ҡулъяҙмаларын төп сығанаҡ итеп файҙалана. Ә инде фольклор тыуҙырыусы сәсәндәр, ҡурайсылар ижадына мөһим күҙәтеү, байҡау яһаусылар өсөн сәсәндең «Башҡорт халыҡ поэзияһы»

һәм «Башҡорт туй йолалары» - ҡулдан төшмәҫ, һәр саҡ хәрәкәттәге хеҙмәттәр. Һәр хәлдә, мин белә-белгәндән бирле ике быуын фольклорсыларының белеме, ғилми оҫталығы үҫешенә сығанаҡ булып ошо уникаль хеҙмәттәр йәки ҡулъяҙмалар ҡала килә. Шулай уҡ башҡорт фольклористикаһының үҫешенә ҙур терәк һәм баҫҡыс ролен үтәне һәм үтәй Мөхәммәтша Буранғоловтың ҡулъяҙма ижады. Сәсәндең ижады тамам халыҡ ижады менән бәйләнеп, уралып, бер бөтөн сығанаҡҡа, хазинаға әүерелгән. Фекеремде ҡеүәтләр өсөн бер сағыштырыу килтерәм. Ошо йылдың 11 апрелендә Актерҙар йортонда композитор Мәсәлим Вәлиевтең тыуыуына 100 йыл тулыу уңайы менән уны иҫкә алыу кисәһе үткәрелде. Был тантанала композитарҙың замандашы М. Хәбибуллин түбәндәгеләрҙе иҫкә төшөрҙө: «Утыҙынсы йылдарҙа районДарға гастролдәргә сыға торғайныҡ. Ҡайҙағына барһаҡ та, Мәсәлимдең «Ил ҡыҙы» менән «Аҡ ҡайын» ын йырлайҙар. Сираттағы бер тамашанан һуң, кем яҙған һуң һеҙ яратып йырлаған был йырҙы, тип һораһаҡ, кем яҙған тип ни, халыҡ яҙған инде, тип яуапланылар. Был осраҡта ла М. Буранғоловтың «Туй йолалары», «Башҡорт сәсәндәренең ижады» ҡулъяҙмалары «халыҡтыҡы» булып йөрөнө. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» дың да яҙмышы шундай ине. Хәҙер сәсәндең элегә тиклем архивтарҙа һаҡланып һәм бик актив рәүештә файҙаланылған ҡулъяҙмаларын һанап үтәйек.

Юғарыла әйтеп үтелгән «Туй йолалары» йыйылмаһы, өйләнеүгә бәйле булған йолалар теҙмәһе, тарихҡа бәйләнгән иҫке йыр һәм таҡмаҡтар тупланған төпләмә, башҡорттарҙың йола һәм йырҙары тарихына арналған ҡулъяҙма, боронғо оҙон йырҙар, ниһәйәт, «Иҙеүкәй менән Мораҙым»... Уларҙың һәр береһенә сәсәндең үҙ ҡулы менән «халыҡтан яҙып алып туплаусы М. Буранғол» тип яҙып ҡуйылған. Ҡулъяҙмалар араһында ҡулдан башҡорт телендә латин хәрефтәре менән яҙылғаны ла, рус хәрефтәре менән машинкала баҫылғаны ла, Нәҡи Иҫәнбәттең баш һүҙе менән башланғаны ла бар, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, М. Буранғол, Ә. Усмановтар тарафынан төҙөлгән йыйылма варианты ла һаҡланған.

Шулай уҡ руссаға тәржемә ителгән нөсхәһе лә теркелгән. Тағы ла «Һары ла сәс», «Батырша», «Беренсе Әрме» легендалары тупланған ҡулъяҙма, 39-сы йылда яҙып алынған башҡорт халыҡ батырҙары тураһында ҡобайырҙар һәм башҡа төрлө фольклор хазинаһы. Йыйып әйткәндә, ун биш дана төпләмә, архив үлсәменә һалһаң, 1880-дән ашыу ҡағыҙ тәшкил итә. Сәсәндең был ҡулъяҙмаларын ғалимдар һәм тикшеренеүселәр минән - архив эшсеһенән - «Туй, йолалары», йә булмаһа «Башҡорт халыҡ поэзияһы» делоһын бирһәгеҙ ине, тип һорарҙар ине, йә булмаһа, «ике йөҙ ҙә ун бишенсе», «дүрт йөҙ ҙә ҡырҡ бишенсе» һанлы ҡулъяҙмалар берекмәһен бирмәҫһегеҙме икән, ти торғайныар. Купселек «М. Буранғоловтың ҡулъяҙмаһы» тимәҫ ине. Шуны ла әйтергә кәрәк, халыҡ араһында ҙур танылыу тапҡан ун һигеҙ томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтыҡтары төҙөлгәндә сәсәндең ҡулъяҙма байлығы «башы-тояғы» менән инеп китте, тип мин, архив хеҙмәткәре булараҡ, ышандырып әйтә алам.


Ашҡаҙарҙы ҡуйған осор

Хәҙер килеп, Нәжиб ағай тапшырған мираҫҡа күҙ һалайыҡ. Иң тәүҙә «Башҡорт халыҡ поэзияһы» ның ҡулъяҙмаһын алайыҡ. Әлегә тиклем архивта һаҡланып килгән нөсхәһенең беренсе бите бөтөнләй юҡ ине. Ә быны һуңынан тапшырылғанында сәсән иң беренсе әйтәһе һүҙҙәрен үҙ ҡулы менән яҙып ҡалдырған, ҡулъяҙмаһы теүәл, башы ла, аҙағы ла бар. Йәмғеһе 266 бит.

Архивҡа 1944 йылда Өфө китап нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан «Ҡобайырҙар йыйынтығы»ның ҡулъяҙмаһы ла тапшырылды. Уның башында «Тыуған ил тураһында ҡобайыр» тип яҙылған руссаға тәржемә

варианты ла бар. Информаторҙары тураһында белешмәләр ҙә иғтибарға лайыҡ.

Бына халыҡ батырлығы һәм уларҙың дуҫлығы тураһында ҡобайырҙар ҡулъяҙмаһы. Унда 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡының актив ҡатнашыуы, Наполеон армияһын Рәсәй еренән ҡыуған саҡта ҙур батырлыҡтар күрһәтеүе тураһында һөйләнелә. Был ҡобайыр башҡорт халҡының тел әҙәбиәтендә йәшәп килгән «Икенсе Әрме» һәм «Ҡаһым түрә» легендалары нигеҙендә яҙылған.

Үҙ эсенә 79 көй һәм йыр һыйҙырған бер папка. Йырҙарҙың текстарын М. Буранғолов йыйған һәм туплаған. Ә көйҙәрҙе туплаусы һәм музыкаль яҡтан эшкәртеүсеһе - композитор Х. Ф. Әхмәтов.

Көләмәстәр, йырҙар, тыуған ер тураһында ҡобайырҙар тупланған папка ла бик ҡыҙыҡлы. Бында Мәхмүт сәсән тураһында өс кенә битлек ҡулъяҙма теркәлгән, шулай уҡ биш дөйөм дәфтәрҙән торған исемһеҙ проза әҫәре ҡулъяҙмаһы ла бар.

Ниһәйәт, ун ике пьеса һыйҙырған өс папкаға күҙ һалабыҙ. Уларҙың исемдәрен генә һанап китеү ҙә сәсән мираҫының ҙурлығын, ҡиммәтлелеген һөйләй: «Шәүрәкәй», «Таштуғай», «Мәргән», «Берлек», «Ялан Йәркәй», «Осрашыуҙар», «Намыҫлы көс», «Башҡорт туйы», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Туҡтар менән Гөлнур». «Өлгө», «Ашҡаҙар». Быларҙың һәр ҡайһыһы авторҙың үҙ ҡулы менән яҙылған. Уҡыусыларға бөтөнләй билдәһеҙҙәре лә бар. Мәҫәлән, «Осрашыуҙар» пьесаһы. Был дүрт шаршауҙағы ике картиналы драма Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында яҙылған. Тик шуныһы: әҫәрҙең һуңғы шаршауы юҡ, күрәһең, юғалғандыр.

Сәсәндең, «Мәргән» либреттоһы 1939 йылда яҙылған. Был әҫәрҙең әҙәби-музыкаль редакторы Солтан Ғәбәши булһа, композитор А. А. Эйхенвальд көй яҙған. Республиканың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Л. П. Атанова билдәләүенсә, был либреттола башҡорт халыҡ көйҙәре алымдары бик асыҡ сағыла.

Бына «Шәүрәкәй» әҫәре. Сәсәндең был пьесаһы Башҡорт драма театрында шаҡтай ғына ваҡыт ҡуйылып килгән булһа ла, бер ҡасан да баҫылып сыҡмаған.

«Таштуғай» пьесаһы әҙәбиәт белгестәренә билдәле булһа ла, әҙәбиәт һөйөүселәргә бөтөнләй таныш түгел. Сөнки ул бер ваҡытта ла баҫылмаған.

Мөхәммәтша Буранғоловтың «Ялан Йәркәй» пьесаһы 1926 йылда уҡ ижад ителгән. Текст ҡулъяҙмала 58 бит тәшкил итә.

Бына «Намыҫлы көс» пьесаһы. Ул 1947 йылда яҙылған. Был әҫәрҙең тәүҙә «Ҡар һыуы» тип аталыуы ла билдәле. Иң һуңғы варианты «Ҡыҙыл таш» исемендә (ҡулъяҙмала) шәхси архивтарҙа йөрөй, тип әйтеүселәр ҙә бар.

Ниһәйәт, «Башҡорт туйы» йәки «Ил сәсәге – Гөлсәсәк» тигән музыкаль драмаға туҡталабыҙ. Ул өс шаршауҙа, алты картинала. Автор уны 1941 йылда ижад иткән. Ҡульяҙма дөйөм дәфтәрҙә, ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған, 115 битлек.

«Башҡорт туйы» ның икенсе нөсхәһе лә бар. Унда автор үҙ ҡулы менән һуңғы вариант, тип яҙып ҡуйған.

Сәсәндең «Иҙеүкәй менән Мораҙым әҫәренә туҡтамай булмай. Фольклор материалдарына нигеҙләнеп яҙылған был трагедия (өс шаршаҙа, алты картинала), 1939 - 40-сы йылдарҙа ижад ителеп, 1940 йылда «Октябрь» журналында баҫылған, театҙза ла ҡуйылған.

«Туҡтар менән Гөлнур» - дүрт шаршаулы либретто. Ул 1944 - 47 йылдаҙа яҙылған. Унда башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуынан алдағы тормошо легендаларға нигеҙләп һүрәтләнә.

М. Буранғоловтың «Өлгө» исемле дүрт шаршаулы драмаһы ла һаҡланып ҡалған. Әҫәр һуғыш осоронда яҙылған. Әммә ул тулы түгел, һуңғы бер шаршауы юҡ. Шул уҡ пьесаның бер варианты «Көтөусе» исеме менән ғәҥҥ йылда яҙылған икән.

Юғарыла байҡап сыҡҡан һәм тик исемдәре аталып үткән сәхнә әҫәрҙәренең йәмғеһе 738 бит тәшкил итә.

Йәнә бер ҙур папка хаҡында айырым әйтеп үтке килә. Унда М. Буранғоловтың мәҡәләләре тупланған. Шулай уҡ газета һәм журналдарҙан сәсәнде ҡыҙыҡһындырған төрле-төрле мәҡәләләр ҙә йыйналған. Бына, мәҫәлән, «Сәсән» журналының 1927 йыл 1-се һанда баҫылған Хәбибулла Ғәбитовтың «Сурашбатыр менән Брагин» тураһында мәҡәләһе, М. Буранғоловтың үҙенең «Көтмәгәндә осрашыу», «Айһылыу» хикәйәләре, «Башҡортостан» газетаһынан «Баймаҡ фажигәһе» исемле мәҡәлә һ.б...

Тағы ла бер төркөм документтар тураһында әйтеп китмәксемен. Улар күп түгел. Бына шуларҙың береһе. 1959 йылдың 30 октябрь көнөндә СССР Генеральный прокурорының урынбаҫары 1888 йылда тыуған Мөхәммәтша Абдрахман улы Буранғолов сәсәнде әҙерлекләүҙәрҙе тыйыу ҡағыҙына ҡул ҡуя. Ошо хаҡта документ һаҡлана. Икенсеһе лә шатлыҡ хәбәр итә: Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы 1944 йылдың 18 апрелдә сыҡҡан Указы менән шағир, фольклорсы Буранголов Мөхәммәтша Абдрахман улына импровизация сәнғәте өлкәһендәге күренекле хеҙмәттәре өсөн Башҡорт АССР-ының халыҡ сәсәне тигән почетлы исем бирә.

Тағы ла бер шаһит-документ. Мөхәммәтша Буранғолов 1940 йылдың 26 февралендә СССР Яҙыусылар ойошмаһы ағзаһы итеп ҡабул ителгән. Шулай уҡ сәсән СССР Әҙәби фонд ағзаһы ла булған икән. Был хаҡта ла документтар һаҡлана.

М. Буранғолов ғүмере буйы халыҡ араһында була. Аралаша, күңел һәм ижад илһамы алып, күптәр менән киң элемтәлә йәшәй. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның бер генә хаты ла, уға яҙылған бер генә хат та һаҡланмаған. Һәр хәлдә, Нәжиб ағай тапшырған архивта ла улар юҡ. Бәлки, хаттар ҙа табылыр әле...



М.Буранғоловтың ағзалыҡ билеты

Быйыл СССР Фәндәр академияһы Урал булексәһе Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ҡаршыһында Мөхәммәтша Буранғоловтың әҙәби мираҫы буйынса комиссия төҙәлдө. Уның председателе Нур Зарипов, ағзалары - Илдус Бүләков, Рәшит Шәкүр, Нәжиб Буранғолов, ғилми архив мөдире Сәтиғә

Шәңгәрәева. Мин, архив хеҙмәткәре булараҡ, бөтә иптәштәрҙән, журнал уҡыусыларынан сәсәндең туғандары һәм яҡындарынан уның ҡулъяҙмаларын, хаттарын, фоторәсемдәрен, гөмүмән, уның тураһында булған иҫтәлек-хәтирәләрен беҙгә - СССР Фәндәр академияһы Урал бүлексәһенең Башҡортостан ғилми үҙәге архивына (Өфө, Октябрь пр. 71) ебәреүҙәрен һорар инем. Халыҡҡа хеҙмәт итеү өлгөһө булып йәшәгән сәсән Мөхәммәтша Буранғоловтың тормошо һәм ижады һәр яҡлап өйрәнеүгә лайыҡлы.



*3 – сө бүлек.*

Сәсәндең бай мирасы

# Сәсәндең бай мирасы

… Алтын ҡомартҡы ҡалдырып,
Килер быуынға ғүмерен
Тиңһеҙ һәйкәл итте ул!

Фәүзиә Рәхимғолова

17. Буранғолов, Мөхәммәтша. Һайланма әҫәрҙәр [Текст] / М.Буранғолов. - Өфө: Китап, 2008. – 488 бит.
18. Буранғолов, Мөхәммәтша. Таштуғай: Пьесалар [Текст] / М.Буранғолов. - Өфө: Китап, 1994. – 496 бит.
19. Буранғолов, Мөхәммәтша. Сәсән аманаты: - Халыҡ ижады һәм ижадсылар тураһында, туй йолалары, боронғо йырҙар һәм легендалар, ҡобайырҙар. - Өфө: Китап, 1995. – 352 бит.

Йөкмәткеһе:

Уҡыусыға ……………………………………………………………...1-2

**I. 1-се бүлек. «Оло яҙмыш»**

1. Байымов, Б. Фиҙаҡәрлек……………………………………………...4-8
2. Буранғолов М. Минең биографиям………………………………. ....9-11
3. Мөхәммәтша Буранғол (1888-1966)…………………………………12-17
4. Сәсән яҙмышы…………………………………………………………17-33
5. Хәмиҙуллина, Мәҙинә. Халыҡ сәсәне: Имеш-мимештәр һәм ысынбарлыҡ………………………………………………………...33 - 38
6. Шәкүр, Рәшит. Мөхәмәтша Буранғол ……………………………39 - 41
7. Әбдрәхимов, Т. Ул рухи хазиналар йыйҙы……………………..42 - 45

**II. 2– се бүлек. «Сәсән булған ерҙә һүҙ ҡала»**

8. Биишева, Зәйнәб. Оло йөрәкле кеше………………………………...47-49
9. Бүләков, Илдус. Исемдәре ҡайтыр иленә…………………………..50-60
10. Бүләков, Илдус. Сәсән драматургияһы………………………….......61-80
11. Ғиляжев, Хәким. Халыҡ сәсәне аманаты………………………......80-82
12. Ишбирҙин, Эрнст. Мөхәммәтша Буранғолов әҫәрҙәренең ҡайһы бер тел һәм стиль үҙенсәлектәре……………………………82-85
13. Нәҙерғолов, Миңнеғәле. Ҡиммәтле мираҫ…………………………85-88
14. Нәҙерғолов, Миңнеғәле. Оло юлға сыҡҡанда …………………......88-91
15. Чаныш, Әмир. Мөхәммәтша Буранғол………………………………92-93
16. Шәңгәрәева, Сәтиғә. Сәсәндең бай мираҫы……………………..93-100

**III. 3– сө бүлек. «Сәсәндең бай мираҫы»**…………………………..102